ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23-29 июль (майай) 2016

№30 (708)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Картлыҡ...**

итәғәтле, тәүфиҡлы булһын



3

**Мине Өфөгә**

теркәһәгеҙ ҙә булалыр...



4

**Тәүбә**



11

**Сей сейәне сәйнәй-сәйнәй...**

Йәки артист булыу анһатмы?



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! 1 июлдән 30 августҡа тиклем 2017 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу иғлан ителде. Хаҡтар 2016 йылдың икенсе яртыһындағыса, йәғни 50665 индекслы гәзитебеҙгә 574 һум 32 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо арауыҡта "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙән 20 кеше 2017 йылға "Башҡортса дини календарь", өс кеше Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе", шулай уҡ башҡа китаптарға лайыҡ буласаҡ. Быйылғы икенсе ярты йыллыҡ өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып өлгөрмәгәндәр 15 августҡа тиклем яҙылып, гәзитте сентябрҙән алдыра ала. 4 айға яҙылыу хаҡы - 382 һум 88 тин.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Указына ярашлы, 2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Республика етәкселегенең, сәйәсмәндәр һәм тарихсыларҙың Башҡортостаныбыҙ өсөн оло тарихи әһәмиәткә эйә буласаҡ ошо ваҡиға хаҡындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.

***Рөстәм ХӘМИТОВ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы:*** Республика халҡы өсөн был - тарихи дата. Бер нисә йыл элек Рәсәй Хөкүмәтенә әлеге юбилейҙы юғары дәрәжәлә үткәреү тураһында тәҡдим индергәйнек. Хөкүмәт уны хупланы һәм байрамды ил кимәлендә билдәләү инициативаһы менән Рәсәй Президентына сыҡты. Ғөмүмән, республиканың йөҙ йыл дауамында илдең ышаныслы, ныҡлы төбәге булыуы беҙҙең өсөн мөһим. Ил Президентына рәхмәт. Владимир Путин башланғысыбыҙҙы хупланы.

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай Рәйесе:*** Рәсәй Президенты тарафынан Башҡортостандың 100 йыллығын байрам итеү хаҡындағы Указға өс йыл алдан ҡул ҡуйылыуы был ваҡиғаның ҡоласлылығы һәм тарихи әһәмиәте хаҡында һөйләй. 1919 йылдың 20 мартында Үҙәк совет власы менән килешеү төҙөү беҙҙең илдә федератив килешеүҙәр нигеҙенең тәүге "кирбесе" булды. Һөҙөмтәлә юридик йәһәттән республиканың хоҡуҡи-дәүләт статусы нығытылып, ул киң вәкәләттәргә эйә була. Башҡортостан тәжрибәһе Рәсәйҙең башҡа этностары өсөн дә йүнәлеш була һәм артабан улар ҙа милли үҙаллылыҡҡа хоҡуҡтарын төрлө дәүләтселек формалары нигеҙендә тормошҡа ашыра. Был иһә глобалләшеү шарттарында Рәсәйҙәге төрлө милләт халыҡтарына ҡабатланмаҫ милли үҙенсәлектәрен, йола-традицияларын, мәҙәниәттәрен һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итте.

***Лилиә ҒҮМӘРОВА, Федерация Советының Фән, мәғариф, һәм мәҙәниәт буйынса комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары, Башҡортостандан сенатор:*** Ошо көндәрҙә генә Рәсәй Президенты Владимир Путин 2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итеү тураһында Указға ҡул ҡуйҙы. Яҡын араларҙа юбилейҙы байрам итеүгә әҙерлек буйынса ойоштороу комитетын булдырыу ҡараласаҡ. 2019 йылда Башҡортостандың 100 йыллығын үткәреү тураһындағы Рәсәй Президенты Указы - бөтөн Башҡортостан халҡы өсөн оло байрам һәм еңеү ул, сөнки Указға ҡул ҡуйылырҙан алда уға ҙур әҙерлек эштәре башҡарылды. Бынан өс йылдан ашыу элек үк Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республиканың күп милләтле халҡы исеменән Рәсәй Президентына юбилей саралары үткәреү хаҡында мөрәжәғәт иткәйне. Артабан Рәсәй хөкүмәтендә ошо башланғыс ярайһы ентекле һәм оҙаҡ ҡына өйрәнелде һәм, ниһайәт, ул хупланды. Шунан һуң ғына Башҡортостандың 100 йыллыҡ юбилейын байрам итеү хаҡында Указға ҡул ҡуйылды.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*

# ИР-ЕГЕТТЕҢ ЙӨРӘГЕНДӘ...

## эйәрле-йүгәнле ат та, уҡ-һаҙаҡ та ята



**Үткән аҙнала Ғафури районы Имәндәш һәм Ташаҫты ауылдары араһындағы Уҡлыҡая итәге яланында, Көнсығыш Европа тигеҙлегенең Урал тауҙары аша Көнбайыш Себер тигеҙлегенә сәләм биргән урынында, үткән менән киләсәк, тарих менән бөгөнгө көн, олатайҙар васыяты менән вариҫтар тоғролоғо осрашты. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы, Республика Халыҡ ижады үҙәге, Ғафури районы хакимиәте булышлығында "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубы идараһы ағзалары тарафынан Башҡортостанда тәүге тапҡыр ойошторолған "Мәргән уҡсы" республика фестивале үҙенән-үҙе донъя фестиваленә әүерелде лә ҡуйҙы. Ярышта 29 уҡсы ҡатнашты, улар араһында Башҡортостан ҡалаларынан һәм райондарынан тыш, Омскиҙан, Литванан һәм хатта Ҡытайҙан килгән уҡсылар ҙа бар ине.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

✓ **_БАССР-ҙы булдырыу Рәсәй федерализмының нигеҙен тәшкил итә лә инде. Был - күп милләтле илдә милли мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең иң сағыу өлгөһө._**



*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АЙЫҠ ЙӘШӘЙЕК!

***Әминә ӘҘЕЛҒУЖИНА, Күгәрсен районының "Ағинәйҙәр ҡоро" рәйесе, "Ете ҡыҙ" ательеһы етәксеһе:*** Әлеге заманда бөтә аңлы кешеләрҙе йәмғиәтебеҙҙең эскелек афәтенә бирешеп, ошо һаҙлыҡҡа батыуы борсоуға һала. Борон тамсы ла спиртлы эсемлек эсмәгән башҡорт кешеһе, иҫереп, упҡынға тәгәрәй. Бер көн аҙыҡ-түлек магазинында улым: "Әсәй, ошолар нимә ул, нишләп беҙ уларҙы бер ҡасан да һатып алмайбыҙ?" - тип, спиртлы эсемлектәр теҙелгән кәштәгә күрһәтте. "Ул ағыу, уны эсергә ярамай", тип аңлатҡас, аптырауының сиге булманы. Бәләкәй бала ни өсөн кешегә үлемесле йоғонто яһаған ағыуҙың бер стена булып теҙелеп ултырыуын аңлай алманы. Бөтә аҙыҡ-түлек магазиндарында иң күренгән урынға ҡуйылған спиртлы эсемлектәр, ысынлап та, кешегә көндәлек ҡулланылышта булған эсемлек итеп тәҡдим ителә. Ризығын төрлөләндергә теләгән кеше тора-бара уны үҙе лә аңламаҫтан һатып ала башлай.

Беҙ үҙебеҙҙең Күгәрсен районында былтыр 2013-2018 йылдарға тәғәйенләнгән "Айыҡлыҡ - йәшәү рәүеше" тигән программаны ҡеүәтләп, "Айыҡлыҡҡа табан бер аҙым" тигән бер айлыҡ акция иғлан иттек. Быйыл район халҡы үҙе мөрәжәғәт итеп, ошо акцияны йәйҙең йәмле өс айында ла ойоштororға булдыҡ. Июндән башлап август айы аҙағына тиклем районда иҫерткес эсемлектәр һатмаҫҡа тигән саҡырыу ташланыҡ. Ҡыҙғанысҡа күрә, ҡайһы бер магазин хужалары килем сығанағы булған спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙан тыйылырға ашыҡманы. Магазиндарҙа һатылмағас, ауыл ерендә йәшәүсе айырым кешеләр үҙҙәре етештереп һатыу итә, тигән хәбәр ҙә булғыланы. Хәрәмдән килгән табыш үҙ мәнфәғәтеңә яҙмай, барыбер тиҙ арала сығып китеүен бөтәһе лә аңлап етмәй шул. Ҡайһы бер ауылдарҙағы һәр икенсе өй буш тороуы, ғаиләләр тарҡалыуы, балаларҙың етем ҡалыуы, күрше-күләндең ыҙғыш-талашта йәшәүе шул эскелек һөҙөмтәһе икәнен һәр кем дә аңларға теләмәй шул. Бына ошо афәттән милләтебеҙҙе нисек тә ҡотҡарыу, йәштәребеҙҙе был яман холоҡтан аралау ниәтендә башланыҡ та инде акциябыҙҙы. Район етәкселегенең был эшебеҙҙә ныҡлы ярҙам күрһәтеүе, башланғысыбыҙҙы күтәрмәләп алыуы ҡыуаныслы.

Бөтә кешелекте, милләтебеҙҙең киләсәген ағыулаған иҫерткес эсемлектәрҙе аҙыҡ-түлек магазиндарында һатыуҙы тыйыу тураһында республика Хөкүмәтенә тәҡдимдәр ҙә индермәксебеҙ. Был йәһәттән Швейцария иленән үрнәк алырға мөмкин булыр ине. Етмәһә, Башҡортостаныбыҙҙы унын менән йыш ҡына сағыштырырға яратабыҙ. Швейцарияла спиртлы эсемлектәр менән һатыу иткән махсус магазиндар ҡала ситендә урынлашҡан һәм улар билдәле бер ваҡытта өс сәғәткә генә асыла. Унан алкоголде паспорт күрһәтеп һатып алырға мөмкин. Һатыусылар шул уҡ минутта иҫерткес эсемлек алған кешенең йәшәгән адресы буйынса "Фәлән Фәләнов спиртлы эсемлек алды, абай булығыҙ!" тигән телеграмма ебәрә. Башҡа төрлө ҙур сауҙа үҙәктәрендә, аҙыҡ-түлек магазиндарында спиртлы эсемлектәр һатыу тыйылған. Киләсәктә ошондай сараларҙы күрге килә Башҡортостанда ла. Ул сараларға тиклем дә милләттәштәр үҙ теләге менән тормошон селпәрәмә килтергән ғәҙәтенән арынһын ине.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ***Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Указына ярашлы, 2019 йылда Башҡортостан Республикаһы ойошторолоуҙың 100 йыллығын байрам итәсәкбеҙ. Республика етәкселегенең, сәйәсмәндәр һәм тарихсыларҙың Башҡортостаныбыҙ өсөн оло тарихи әһәмиәткә эйә буласаҡ ошо ваҡиға хаҡындағы фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ.***

**(Башы 1-се биттә).**

Был документ һәм шулай уҡ 2019 йылда үткәреләсәк саралар Башҡортостан һәм Рәсәй үҫеше йылъяҙмаһында мөһим тарихи ваҡиға буласаҡ. Республикабыҙ юбилейға иҡтисад, фән һәм мәҙәни өлкәләрҙә оло ҡаҙаныштар менән килә. Һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Рәсәй һәм донъя кимәлендәге сараларҙы үҙәгенә, үҙенә йәлеп итеп тороусы төбәккә әүерелде һәм быларҙың барыһы ла - ҙур хеҙмәт һөҙөмтәһе. Юбилейҙы билдәләү беҙҙе яңынан-яңы проекттарға, фәнни-техник ҡаҙаныштарға рухландырасаҡ, тип ышанам. Төрлө тармаҡтар буйынса Башҡортостан тәжрибәһенең Рәсәй төбәктәре тарафынан өлгө итеп алыныуы һәм өйрәнелеүе юҡҡа ғына түгел шул.

***Зөһрә РӘХМӘТУЛЛИНА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһы рәйесе:*** Был Указды тәүге сиратта күп милләтле республикабыҙҙың Ватан тарихындағы әһәмиәтенә дәүләтебеҙ баһаһы тип аңларға кәрәк. Башҡорттарҙың 1612 йылда Минин менән Пожарский ополчениеһында Мәскәү өсөн поляктарға ҡаршы һуғышы, ҡурҡыу белмәҫ "төньяҡ амурҙары"ның 1812 йылғы Ватан һуғышында күрһәткән ҡаһарманлығы - башҡорт халҡының уртаҡ ватаныбыҙҙы дошмандан һаҡлауға индергән өлөшө - хәрби йылъяҙмаһы бөтәбеҙгә лә ил тарихынан яҡшы билдәле. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында иһә Башҡортостан фронтҡа 700 меңдән ашыу кеше ебәрә, уларҙың 300 меңе яу яландарында ятып ҡала, 278 яугир Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була. Бына инде биш быуат дауамында күп милләтле республика халҡы иңгә-иң терәшеп төрлө тармаҡ хужалыҡтарын үҫтерә, мәҙәниәтте һаҡлай, төбәктең данлы тарихын яҙа. Тап ошо берҙәмлек бөтөн Рәсәйгә Башҡортостанды милләт-ара татыулыҡ, конфессия-ара хеҙмәттәшлек өлгөһө итеп танытты.

Бөгөнгө Башҡортостан - илдең тотороҡло һәм әүҙем үҫешкән төбәктәренең береһе ул. Республикала алып барылған социаль-иҡтисади һәм милли-мәҙәни сәйәсәт ыңғай һөҙөмтә бирә, тап ошо арҡала Рәсәйҙе халыҡ-ара кимәлдә күрһәтеүгә өлгәштек. Үткән йәй Өфөлә ШОС һәм БРИКС саммиттары үтте, 2020 йылда Бөтә донъя фольклориадаһы ла беҙҙә ойошторolасаҡ. Башҡортостандың 100 йыллығын билдәләү - юбилей датаһын федераль кимәлдә үткәреү генә түгел, ә һәр власть органының, социаль институттарҙың, һәр ватандашыбыҙҙың яуаплылығы ла. Республикаға ошо дата айҡанлы бихисап сит ил ҡунаҡтары, ситтә йәшәгән башҡорт диаспоралары вәкилдәре киләсәк. Уларҙы лайыҡлы ҡаршылау һәм төп йортобоҙҙоң асыҡ, яҡты, тыныс икәнен күрһәтеү һәр ҡайһыбыҙҙың изге бурысы булып тора.

***Рөстәм ИШМӨХӘМӘТОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Башҡортостандың ойошторолоуына йөҙ йыл - халҡыбыҙҙың тарихында бик мөһим ваҡиға. Иҫтәлекле дата тарихты барлауҙы, үткәндәргә йомғаҡ яһауҙы талап итә. Шуға күрә байрам айҡанлы мәҙәни саралар ғына түгел, ә федераль кимәлдә лә фәнни-ғәмәли конференциялар, "түңәрәк өҫтәл"дәр үткәрелеүен хуп күрәм. Башҡортостан Рәсәйҙең сәйәси һәм иҡтисади картаһында мөһим, ныҡлы урынды биләй. Киләсәктә лә шулай булып ҡаласағына ышанам.

***Әмир ИШЕМҒОЛОВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе:*** БАССР-ҙы төҙөү - автономия ойоштороуҙың тәүге тәжрибәһе, һәм ул ваҡытында башҡа республикалар тарафынан киң ҡулланыла. Башҡорт Автономиялы республикаһы етәкселәре федерализм идеялары яҡлы сығыш яһай, тап шуға ла БАССР-ҙы булдырыу Рәсәй федерализмының нигеҙен тәшкил итә лә инде. Был - күп милләтле илдә милли мәсьәләләрҙе хәл итеүҙең иң сағыу өлгөһө. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы - Рәсәй Федерацияһы составында әүҙем эшмәкәрлек алып барған дәүләт берәмеге. Сәнәғәт, төҙөлөш, ауыл хужалығы, фән һәм мәҙәниәт өлкәһендәге уңыштарыбыҙ киң билдәле. Башҡортостан Республикаһы ойошторолуға 100 йыл тулыу айҡанлы үткәреләсәк саралар Рәсәй халыҡтары араһында дуҫлыҡты һәм хеҙмәттәшлекте нығытыуға, күп милләтле илебеҙҙең артабан сәскә атыуына булышлыҡ итер, тип ышанам.

***Нурислам ҠАЛМАНТАЕВ, тарих фәндәре кандидаты:*** Тарихтан белеүебеҙсә, автономия яулау бик ҡатмарлы була. Әйткәндәй, беренсе булып юл ярыусыларға бер ваҡытта ла еңел түгеллеген яҡшы беләбеҙ. Шуныһы ҡыҙыҡ: милли хәрәкәтте башлап ебәреү Әхмәтзәки Вәлидиҙең башына 1917 йылда килә. Ошо йылдың февралендә ул "Шура" журналына "Бөрйән башҡорттары" тигән мәҡәлә яҙа. Унда Вәлиди бөрйән башҡорттарының ҡыйыу, ғәскәри халыҡ булыуы менән һоҡлана. Тап бына шул мәлдә Февраль революцияһы башланып китә. Урамға сығып, шул ваҡиғаларҙың шаһиты булған Вәлидиҙең башына шул саҡ ҡыйыу фекер килә: "Башҡорттар бына тигән ғәскәри рухлы, ҡыйыу халыҡ, улар менән дә милли хәрәкәт башлап ебәрергә, үҙ республикабыҙҙы төҙөргә була бит!" Әйтергә кәрәк, ғалим булыуы, тарихты бик төплө белеүе өҫтөнә, Әхмәтзәки Вәлиди бик көслө рухлы шәхес тә була. Алдан күрә белеп, эште ваҡытында башлап ебәрергә лә кәрәк бит. Бер йыл эсендә генә лә Ырымбурҙа өс-дүрт тапҡыр ҡоролтай һәм съездар уҙғарыла. Вәлидиҙең көрәштәштәре лә уҡымышлы, егәрле, рухлы, эш эшләй торған йәш егеттәр була. Шул тиклем төплө итеп яҙылған программа, ер һәм башҡа мәсьәләләр буйынса ҡарарҙар, резолюциялар ҡабул ителә. Был мәл милли мәсьәләләрҙең дә өлгөрөп еткән осоро булғандыр, сөнки халыҡ та уға әҙер булған бит. Әйткәндәй, халыҡ та көсө, берҙәмлеге менән айырылып торған, араларында уҡыған, белемле кешеләр ҙә күп булған. Беҙ илде тотоп килгән ерле халыҡ, үҙебеҙҙең республикабыҙ булырға тейеш, тигән фекер йәшәгән халыҡ араһында. Тарихтан мәғлүм булыуынса, В.И. Ленин федерализм идеяһы яҡлы була, ләкин унын арҡаҙаштары Сталин һәм башҡалар унитар дәүләт төҙөйбөҙ, тип, һәйбәт идеяны тарҡатыуға, юҡҡа сығарыуға күп көс һала. Федерализм идеяһын һәм традицияларын бөгөн беҙ бөтә камиллығында тергеҙергә һәм үҫтерергә бурыслыбыҙ. Республикабыҙҙы лайыҡлы йәшәтеп, беҙ Рәсәйҙең ҡеүәтен дә арттырыуға булышлыҡ итәбеҙ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов Иран Ислам Республикаһы Меркези провинцияһынан килгән рәсми делегация вәкилдәре менән осрашты. Осрашыуҙа төбәк-ара хеҙмәттәшлекте нығытыу мөмкинлектәре, иҡтисадтың төрлө тармаҡтарында берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тикшерелде. Иран вәкилдәре белдереүенсә, уларҙы нефть һәм газ тармағындағы хеҙмәттәшлек ҡыҙыҡһындыра, сөнки провинцияла иҡтисадтың тап ошо йүнәлештәренә ярҙам кәрәк. Ҡунаҡтар республиканың ошо өлкәләге белгестәре делегацияһының Иранға командировкаға килеүе маҡсатҡа ярашлы булыр ине, тигән теләк белдерҙе.

✓Стәрлетамаҡ районында аграрийҙарҙың "Баҫыу көнө -2016" форумы булып үтте. Унда республика Башлығы Рөстәм Хәмитов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаттары, район һәм ҡалалар хакимиәттәре башлыҡтары һәм башҡалар ҡатнашты. Билдәләнеүенсә, быйылдан башлап был сара кәңәшмә-семинар йә күргәҙмә рәүешендә генә үткәрелмәйәсәк, унын маҡсаты ауыл хужалығы өлкәһендә заманса энергия һаҡлаусы технологияларҙы алға һөрөү, АПК-ның мөмкинлектәрен һәм ҡаҙаныштарын күрһәтеү буласаҡ.

✓Мәскәүҙә үткән һабантуйҙа милли көрәш буйынса ярыштар ҙа ойошторолдо һәм унда Башҡортостандан Рөстәм Арыҫланов төп призға -"Лада Грант" автомобиленә лайыҡ булды. Һабантуйҙың ойоштороусылары - Башҡортостан һәм Татарстан хөкүмәттәре, шулай уҡ РФ Президенты эргәһендәге БР һәм ТР Тулы хоҡуҡлы вәкиллектәре. Башҡортостандан барған рәсми делегацияны БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Мөхәмәтдинов етәкләне. Сарала 100 меңдән ашыу кеше ҡатнашты.

✓Салауат районы Малаяҙ ауылында "Беҙ - Салауат тоҡомдары" тигән атама аҫтында мәҙәни-лингвистик һәм тарихи-этнографик профилле лагерь асылды. Унда республиканан ғына түгел, ә Ҡорған, Ырымбур, Һамар, Силәбе өлкәләренән, Пермь крайынан һәм Мәскәүҙән 60 бала ял итә. Тематик лагерҙың маҡсаты - башҡорт халҡының тарихын, мәҙәниәтен, йолаларын өйрәнеү аша балаларҙа илһөйәрлек, үҙ тыуған республикаһы өсөн яуаплылыҡ тәрбиәләү.

✓ **_Баҫма матбуғат, бигерәк тә, милли гәзит-журналдар бер ҡасан да интеллектуаль сығанаҡ булыуҙан туҡтаманы. Йәғни, ул һаман да тәрбиәләүсе, халыҡты алға әйҙәүсе, уның йөрәгендә киләсәккә ышаныс уятыусы булып ҡала._**



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Миләүшә Ҡаһарманованың гәзитебеҙҙең 25-се һанындағы ҡартлыҡ ғәләмәттәре тураһындағы мәҡәләһен уҡығас, үҙем дә оло кеше булараҡ, байтаҡ ҡарттарҙың холоҡ-фиғелен күҙ алдына килтереп, хәтерләп ултырҙым. Ҡайһы бер таныштарыма хәл белергә лә инеп сыҡтым әле. Мәктәптә анатомия фәнен өйрәнгәндә кешеләге бөтөн ағзаларҙы исеме менән әйтеп уҡыныҡ. Уларға хас сирҙәрҙе, ул сирҙәрҙе дауалау юлдарын да өйрәнә инек. Ә бына ҡат-ҡат, бүлкәт-бүлкәт өлөштәрҙән торған "күңел" тигән сер донъяһын ни өсөндөр өйрәтеүсе булмаған, уны телгә лә алмайбыҙ хатта. Бөгөн ана шул күңел тураһындағы уйҙарым менән бүлешәйем, тигәндән ҡәләмгә тотондом.**



# ҠАРТЛЫҠ...

## итәғәтле, тәүфиҡлы булһын

Күңелде серле һандыҡ тип күҙ алдына килтерһәк, ул, минеңсә, бәләкәй-бәләкәй, бармаҡ баҫымындай ғына бихисап бүлкәттәрҙән торалыр. Һәр бүлкәттә бер ынтылыш, бер хис, бер кисереш йәшерелгән, уларҙың һәр береһенең үҙ бурысы, үҙ тәғәйенләнеше, һәр ҡайһыһы - игелек, изгелек, хыялға ынтылыш, кешелеклелек һымаҡ берәр ыңғай сифатты, йә яуызлыҡ, көнсөллөк һымаҡ яман сифатты үҙ эсенә алған, тип күҙ алдына килтерәйек. Кеше күңелендәге был бүлкәттәрҙе Хоҙай үҙе бар иткән, ҡайһы йәштә уларҙың ҡайһыһын асыуы, йә нығыраҡ асыуы - бары Алланың ихтыярынандыр, тип уйланыла.

Гел яуызлыҡ эшләүселәрҙең ауыҙҙарын ябырлыҡ, ҡырын юлдан дөрөҫ юлға йүнәлтерлек тәрбиә ғәмәлдәрен өс тапҡыр ҡылырға, әгәр ул кеше тәрбиәне ҡабул итмәһә, ҡул һелтәргә ҡушыла. Әлеге беҙҙең бүлкәттәр миҫалына күҙ һалһаҡ, ундай кешенең ыңғай сифаттары һаҡланған күңел бүлкәттәре ҡапҡастары асылмаҫлыҡ булып ябылған, тимәк.

Ҡайһы бер ҡарт кешеләр насар эш эшләүсене лә тик матур һүҙҙәр менән генә "әрләүсән". Беҙҙең ауылдағы Нәзифә инәй - тап шундайҙарҙан ине. Бер ваҡиғаға үҙем шаһит булдым. Инәй юҡта уның йәшелсә баҡсаһына малайҙар "төшкән". Инәй уларҙы быжғытыу урынына:

- Һай, матурҙарым, батырҙарым, бай булғырҙарым, ашап туйҙығыҙмы? Ниңә һорап алманығыҙ? - тип, иркәләп кенә ороша. Малайҙарҙың ауыҙы ҡолағына еткән, үҙҙәре:

- Инәй, һорап алһаң ҡыҙыҡ түгел, йәшенеп инһәң генә ҡыҙыҡ та ул, - тимәһендәрме. Инәй һыны ҡатып көлгән арала малайҙар:
- Инәй, ниндәй эшең бар, хәҙер эшләп бөтөрәбеҙ, - тип тә ебәрә. Ул арала утын ярып, өйөлгән, йорт, һарай таҙартылған, Ағиҙелдән һыу ҙа килтерелгән. Эш тә бөттө, малайҙар ҙа юҡҡа сыҡты. Яманлыҡты матурлыҡ, итәғәтле мөнәсәбәт, йылы һүҙҙәр еңде...

Тағы, өләсәйемдең күршеһе Зөлхәмиҙә инәй булды. Үҙе ябыҡ ғына, ҡупшы кейенә, ейәндәрен дә, урамдағы бала-сағаны ла ҡоймаҡ менән һыйлар ине. Үҙе тура һүҙле, етешһеҙлекте сатнатып әйтә торған кеше. Кемгәлер уның әйткәне оҡшамаһа, тупаҫ итеп яуап ҡайтарһа: "Ауыҙыңа бал да май бирәйем, ауыҙ эсең тәмләнһен, күңел түрең йәмләнһен", - тип, китә лә бара инәй. Тупаҫ телле кеше ояла, аптырап тороп ҡала. Бында ла яҡшы һүҙ бүлкәте тупаҫ һүҙ бүлкәтен еңә. Тимәк, кеше күңелендәге һәр бүлкәтте Хоҙай үҙе бүлеп биргән, үҙе белеп аса. Ҡайһы берҙәре ғүмер буйы бикле булып, ҡартлыҡ миҙгелендә асылыр мөҙҙәтен көтә. Иллә мәгәр, кеше күңелендәге һәр бүлкәт үҙ бурысын үтәй: кешегә, тормошҡа, тирә-йүнгә үҙенең төрлө-төрлө "таштарын" ташлай. Ҡайһы саҡта ул таштар араһында аҫылташтар ҙа осрай...

Күп холоҡто үҙгәртеп тә булмай. "Бөкөрөнө бары ҡәбер төҙәтә", тиҙәр.

Һәр беребеҙҙең күңелендәге тик матур бүлкәттәр генә асылһын ҡартлыҡта, тип теләйек. Гел аҡ "таштарын" ырғытһын тирә-яҡҡа кешеләр ҙә. Улар ҡартлыҡта тәүфиҡле, итәғәтле булһын. Ҡартлыҡ холҡо, ҡартлыҡ осоро - күңел түрендәге асылмай ҡалған серҙәрҙе асыу, ғүмер юлыңды йомғаҡлау мәле бит ул. Күңел түре серҙәре фәҡәт Хоҙайҙан икәнде онотмайыҡ.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# СӘҒӘТ БАШҠОРТСА НИСЕК "ҺӨЙЛӘШӘ?"

**Сәғәтте "тик-так" тип һөйләштергән йырҙар арта бара. Ә бит сәғәт башҡортса "келт-келт" тип "һөйләшә" ул, йәштәр! Тик-так - урыҫ сәғәте!**

Хәҙер, шөкөр уныһы, телебеҙгә урыҫ һүҙҙәрен һирәгерәк ҡыҫтырабыҙ, әммә һөйләмдәрҙе урыҫса уйлап төҙөйбөҙ, туранан-тура "ауҙарабыҙ". Был күренешкә "ауҙарыу" һүҙе тап-таман ғына. Тәржемә итеү, әйләндереү, тылмаслау - икенсе кимәл, юғарыраҡ. Әммә ҡайһы бер йәш журналистар "ауҙарыу" тип һөйләүҙе дауам итә, сөнки телебеҙҙе үҙҙәре шулай ауҙаралар! Һөйләшкәндә ваҡытты дөрөҫ әйтмәү ҙә йыш ҡолаҡҡа салына. Өфөлә сәғәт иртәнге йәки киске 7 була ул, бер нисек тә 7 сәғәт түгел. Өфөлә сәғәттәр һаны улай ғына түгелдер, сөнки 7 сәғәт тиеү ваҡыт төшөнсәһен түгел, ә һанды алға ҡуя. Сәғәт 12-нән һуң саф башҡортса һөйләшеүсе, көндөҙгө сәғәт бер, тиәсәк. Йәнә бер киң таралған хата йәнде көйҙөрә: урыҫсанан туранан-тура "ауҙарып", кейемде киймәй, өҫтөндә йөрөй башланыҡ! В шляпе - эшләпәле ул, бер нисек тә "эшләпәлә" түгел. Эшләпә эсендә нимә тип баҫып торорға кәрәктер! "Күлдәксән" йәки "күлдәк кейгән" урынына күлдәктә (тимәк, уның өҫтөнә менеп баҫҡан), "итек кейгән" йә "итексән" урынына - итектә тип һөйләйбеҙ, яҙабыҙ! Итекте кейергә кәрәк, ә өҫтөнә менеп баҫырға түгел! Һүҙ башына кире әйләнеп ҡайтып, шуны әйтке килә: әйҙәгеҙ, сәғәтте лә башҡортса һөйләштерәйек, ымлыҡтарҙы ла тейешенсә ҡулланайыҡ. Юғиһә, "Һей Башҡортостан!" тип тә йырлай башланыҡ бит! Тәүге һүҙ бер нисек тә ымлыҡ түгел, ә бойороҡ ҡылым! Республикабыҙҙы "ундай эштәргә" өндәү килешмәй...

**Гүзәл СИТДИҠОВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*



# МИЛЛИ БАҪМА...

## тәрбиәләүсе лә

**Бәләкәй саҡта олатайымдың, йөҙөнә етди генә ҡиәфәт сығарып, гәзит уҡығанын күҙәтергә ярата торғайным. Шулай уҡып ултыра-ултыра ла, ҡапыл ҡысҡырып көлөп ебәрә. Шуға ла мин, ир-егет мотлаҡ гәзит уҡырға тейеш, тип уйлай торғайным.**

Ысынлап та, яңы ғына баҫылған, буяу еҫтәре аңҡып торған гәзитте ҡулға тотоп, яйлап уҡып сығыу үҙе бер кинәнес тәһә! Бөгөн йәштәр уҡымай ул, тиергә яратыусыларға ла, бөтәһе лә сыбыҡтан ҡыуылмаған, тип әйтер инем. Минең эргә-тирәмдә ваҡытлы матбуғат яратыусылар бихисап. Эйе, хәҙерге заманда гәзит мәғлүмәт сығанағы булыуҙан туҡтаны, сөнки төрлө яңылыҡтарҙы беҙ башҡа сығанаҡтарҙан - телевизорҙан, интернеттан алабыҙ. Төрлө матди ҡыйынлыҡтар кисергән баҫмалар, етмәһә, аҙнаһына бер сығыуға ҡалып бара. Был - гәзит уҡыусылар кәмеүенең объектив сәбәбе, бөтөн донъяла көн һайын гәзит уҡыу мәҙәниәте юғала.

Субъектив факторға килгәндә иһә, баҫма матбуғат, бигерәк тә, милли гәзит-журналдар бер ҡасан да интеллектуаль сығанаҡ булыуҙан туҡтаманы. Йәғни, ул һаман да тәрбиәләүсе, халыҡты алға әйҙәүсе, уның йөрәгендә киләсәккә ышаныс уятыусы булып ҡала. Ошо юҫыҡта ижад итеүсе баҫманың тиражы бер ҡасан да кәмемәйәсәк. Был донъяла тамаҡ туҡ, өҫ бөтөн, тип кенә күңел тыныслығы табыу мөмкин түгел аңлы кешегә, уға рухи аҙыҡ та кәрәк. "Киске Өфө" гәзитен мин тап ошондай баҫмалар рәтенә ҡуям. Бөгөнгө йәмғиәттә булып ятҡан енәйәттәр, тәртип боҙоуҙар, башҡа йәмһеҙ күренештәрҙән сенсация яһап, күптереп-шаштырып яҙыусылар былай ҙа күп, ә бына башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен яҡтыртҡан, тарихыбыҙҙы, йолаларыбыҙҙы ҡабаттан иҫебеҙгә төшөргән гәзит берәгәйле. Күпме белемле, аңлы замандаштарыбыҙ бар икәнен белдек "Киске Өфө" аша. "Тарих төпкөлөндә ҡалған геройҙарығыҙ бар, ә бөгөн һеҙҙе кем күтәрә?" тиеүселәргә мин хәҙер уларҙы миҫал итеп килтерәм. Тарихыбыҙҙы ла онотмай, үҙ асылыбыҙ, үҙ холҡобоҙ, үҙ фәлсәфәбеҙ менән генә киләсәккә баҡҡанда беҙ көслө буласаҡбыҙ. Ошоно аңлап ижад иткән коллективҡа алдағы көндәрҙә лә салт аҡыл теләйем.

**Илшат ХӘЛИЛОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһы эшлекле туризм һәм МИСЕ - Russian Business Travel & MICE Award өлкәһендәге йыллыҡ профессиональ премияға "Рәсәйҙең иң яҡшы конгресс үҙәге" номинацияһында номинант булып үтте. Ростуризм тарафынан үткәрелгән конкурста онлайн-тауыш биреү 11 сентябргә тиклем дауам итә.

✓ Башҡортостан буйлап Бөйөк Еңеүҙең - 71, Рәсәйҙең Һауа-десант ғәскәрҙәре төҙөлөүҙең - 86, Чернобыль фажиғәләренең 30 йыллығына арналған "Салют, Еңеү!" тип аталған автойөрөү акцияһы ойошторолдо. Колонна Өфөнән сығып китеп, өс йүнәлештә юлын дауам итте. Ойоштороусыларҙың береһе Илдар Бикбаев әйтеүенсә, колоннала 30-лап машина булған һәм маршрут 22 июлдә Әлкә ҡасабаһында тамамланған.

✓ Башҡортостан ғаиләләрен "Йыл ғаиләһе" I Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашырға саҡыралар. Уны РФ Хеҙмәт министрлығы иғлан иткән. Конкурста Рәсәй гражданы булған, Рәсәйҙә йәшәгән, законлы никахта торған, балалар тәрбиәләгән ғаиләләр ҡатнаша ала. Унда ҡатнашыуға 60 төбәктән ғариза бирелгән дә инде. Ҡатнашырға теләүселәр араһында ғаилә тормошоноң 50 йыллығын билдәләүселәр ҙә бар.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәтенең Опека һәм попечителлек буйынса идаралығы сираттағы тапҡыр "Беренсе класҡа - беренсе тапҡыр. Етем балаларға ярҙам ит" мәрхәмәтлек акцияһы ойоштора. Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, быйыл Өфөлә 110 етем бала мәктәпкә барасаҡ. Акция мәлендә Өфө халҡы ул балаларға мәктәп кәрәк-яраҡтары һатып алырға ярҙам итә ала. 15 августҡа тиклем "Ғаилә"психолог-медик социаль үҙәге иҫәбенә аҡса күсерергә мөмкин. Һорауҙар өсөн телефон: (347) 241-42-25.

✓ БР Тәбиғәтте һаҡлау һәм экология министрлығы Экология һәм айырыуса һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылының эмблемаһына конкурс иғлан итә. Талаптар министрлыҡтың сайтына ҡуйылған. Конкурс эштәре быйыл 1 октябргә тиклем Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 86 адресы буйынса 213 кабинетта йәки nikandrova.n@bashkortostan.ru электрон почтаһына ҡабул ителә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 218-04-29.

**"Башинформ"дан.**

✓ Өфөлә халыҡтың транспорт хеҙмәтен ҡулланыуы тураһында интернет аша киң мәғлүмәт йыйыу буйынса тәжрибә үткәрелә. Уның анализланған һөҙөмтәһе ҡала транспорты өлкәһендә ҡарарҙар ҡабул иткәндә файҙаланыласаҡ.



ҠЫҪҠАСА



# ВЕЛОСИПЕД ЮЛЫ ЛА...

## ипотека ла мөһим

✓ Дим районында велосипед юлы эргәһенән яңы ял зонаһы эшләнә. Былтыр һалынған велосипед юлы "Серебряный ручей" биҫтәһен Тәрән (Глубокое) күл менән тоташтыра. Был урын велосипедсыларҙың ғына түгел, йәш әсәләрҙең дә иң күп йөрөгән ере. Шуға ла улар бер-береһенә ҡамасаулыҡ тыуҙырмаһын өсөн, йәйәү йөрөү зонаһын айырым эшләргә ҡарар ителә. Әлеге ваҡытта бында төҙөкләндереү эштәре бара.

✓ Күпселек республика халҡы беренсел торлаҡ өсөн ипотека алыуҙы хуп күрә. Ә бына файҙаланыуҙа булған фатирҙарға һорау кәмей. Яңы төҙөлөштәрҙә бер һәм ике бүлмәле эконом класындағы фатирҙар тиҙ һатыла, 3-4 миллионлыҡтарына хужа оҙағыраҡ табыла икән. Ғинуар-майҙа банктар 16,2 миллиард һумлыҡ 11747 ипотека кредиты биргән. Был былтырға ошо осор менән сағыштырғанда 76,5 процентҡа күберәк.

✓ Республикала Әсәлек капиталынан бер тапҡыр бирелә торған 25 мең күләмендәге сумманы алыуға Пенсия фондына 10,8 мең ғаилә ғариза биргән. Был хоҡуҡҡа сертификат алған йәки 30 сентябргә тиклем алырға тейеш булған һәм тотош сумманы файҙаланмаған ғаиләләр эйә. Ғаризаны бала тыуғандан һуң күпме ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан алырға мөмкин. Элегерәк бер тапҡыр бирелә торған 20 мең һум пособиены алыусылар ҙа яңы закон буйынса 25 мең һумды алырға хоҡуҡлы.

✓ Бүздәктә гемодиализ бүлеге асылды. Ул заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған, 30 пациентҡа бөйөр терапияһы үткәреү мөмкинлеге биргән 5 диализ урынына эйә. Бөгөн Башҡортостанда гемодиализ ярҙамы 29 бүлексәлә күрһәтелә. Уларҙың дәүләт ҡарамағындағы өсөһө Ҡыуатов исемендәге Республика клиник, Республика балалар клиник, Стәрлетамаҡ ҡалаһының 1-се клиник дауаханаларында булһа, 26-һы дәүләт-шәхси партнерлыҡ нигеҙендә эшләй.

✓ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премия буйынса комиссия премияға дәғүә итеүселәрҙән документтар ҡабул ителә башлауы тураһында белдерә. Положениеға ярашлы, премиялар 2015 йылдың сентябренән 2016 йылдың августына тиклемге осорҙа донъя күргән иң яҡшы әҫәрҙәр өсөн журналистарға, шулай уҡ журналистар коллективтарына бирелә. Дәғүәселәрҙең эштәре ағымдағы йылдың 1 сентябренә тиклем 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, БР Журналистар союзы, 1007-се офис (Матбуғат йортоноң 10-сы ҡаты) адресы буйынса ҡабул ителә. Телефон (факс): (347) 276-42-66.

БАШ ҠАЛА ҠУНАҒЫ...

# МИНЕ ӨФӨГӘ ТЕРКӘҺӘГЕҘ ҘӘ БУЛАЛЫР...



**Хәтерегеҙҙәлер, 22 апрелдә Өфө-Арена күп функциялы спорт-концерт комплексында ҡатнаш алыш төрҙәре буйынса "45-се Глобаль төнгө алыштар" ("Fight Nights global") тип исемләнгән сағыу тамашала "Башҡорт" тип ололанған, хәрби самбо буйынса ике тапҡыр донъя чемпионы исеме алған Венер Ғәлиевтың бокс, таэквандо, әрме ҡул һуғышы буйынса спорт мастеры Акоп Степанянды рингта еңеүе тураһында хәбәр иткәйнек. Алышты алып барыусы Александр Загорский менән шул кистә осраштыҡ һәм киң билдәле оратор менән танышып, унан Өфө, баш ҡала халҡы тураһында ла бер-ике ауыҙ һүҙ әйтеүен һораныҡ. Шулай итеп, Рәсәйҙең иң беренсе ринг-анонсеры, Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Александр ЗАГОРСКИЙға һүҙ:**

- Өфөгә нисәнсе ҡабат киләмдер - аныҡ ҡына әйтә лә алмайым. Башҡортостандың гүзәл баш ҡалаһында Өфө-Аренала, "Өфө уттары"нда, Спорт һарайында уҙғарылған бихисап спорт сараларында ринг-анонсер сифатында ҡатнашырға, йәғни ул сараларҙы алып барырға тура килде. Бында ныҡ ҡунаҡсыл, көләс халыҡ йәшәгәнлеген беләм, шуға ҡалағыҙға оло ашҡыныу менән киләм. Ғөмүмән, мин аҙнаһына ике тапҡыр ҡайҙалыр осам. Элекке йыл 75 турнир үткәрһәм, былтыр - ете тиҫтә алышты алып барыусы булдым. Әле бына "Fight Night Global" компанияһы саҡырыуын ҡабул итеп, һеҙҙең батырығыҙ Венер "Башҡорт" Ғәлиев менән Акоп "Снайпер" Степанян алышын алып барасаҡмын.

Өфө тамашасыһына, Башҡортостандағы спорт һөйөүселәргә, һеҙҙең гәзит уҡыусыларға әйтер һүҙем дә бар. Иғтибар иткән булһағыҙ, беҙ, нәфис һүҙ оҫталары, үҙебеҙҙе һәр ваҡыт яҡшы кәйефтә тотабыҙ. Радио, телевидение алып барыусыларымы, вокалсымы, йәиһә бүтән жанр артисы булһынмы - һәр артист иң тәүҙә күңелен күтәренке тоторға тырыша. Беҙҙең хеҙмәттә төрлө хәлдәр булғылай: ҡайһы берҙә 6-7-шәр сәғәт бер туҡтауһыҙ һөйләргә тура килә. Мин ғүмерем буйы вокал менән шөғөлләнгәс, тауышым һис ҡасан да ҡарлыҡмай, бөтмәй. Үҙем ни тиклем генә арыған булһам да тауышым кешеләрҙе дәртләндерерлек булып яңғырай. Был шулай булырға тейеш тә, ни өсөн тигәндә, ринг уртаһына сығып баҫҡан батырҙарға ышаныс, көйәрмәндәргә - дәрт өҫтәргә лә кәрәк. Минең ошондай энергиялы булыуымдың сере ябай ғына: мин бер кемгә лә кенә һаҡламайым, үсләшмәйем, бер кемгә лә үпкәләмәйем. Был һыҙатым һуғыш ауырлыҡтарын, Ленинград ҡамауын үҙ елкәһендә татыған атайымдан. Ғөмүмән, ата-әсәйем миңә бик дөрөҫ тәрбиә биргән. Тормошҡа ыңғай ҡарарға кәрәк. Көнләшеү, үсләшеү һаулыҡты бөтөрә. Үсле, көнсөл кешеләр, ҡағиҙә буларaҡ, оҙаҡ йәшәмәй. Дуҫтарығыҙға шатлыҡ өләшегеҙ, Өфө халҡы, Өфө ҡалаһы һымаҡ!

**Илгизәр БУЛАТОВ әңгәмәләште.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН...

# ХАЛЫҠ ФЕКЕРЕН ӨЙРӘНЕП...



**Ҡала халҡының ихтыяжынан һәм заман талаптарынан сығып, 2013 йылда ҡала хеҙмәттәре Өфөнө үҫтереү Стратегияһын эшләй башлағайны.**

- Транспорт мәсьәләһен хәл итеү - ҙур ҡалалар өсөн арауыҡ үҫешенең төп бурысы, - ти Өфө ҡалаһы Архитектура һәм ҡала төҙөлөшөнөң баш идаралығы начальнигы Илдар Ибраһимов. - Транспорт ағымы тураһындағы мәғлүмәттәр Стратегия тәҡдимдәренең ысынбарлыҡҡа тура килеүен баһалау һәм транспорт системаһының айырым төрө өсөн оптималь юлдар табыу мөмкинлеге бирә. Социологик һорау алыуҙар быға кәрәкле өҫтәмә булып тора.

Мәҫәлән, 2015 йылдың апрелендә Өфөлә халыҡтың транспорт хеҙмәтен ҡулланыуы тураһында интернет аша киң мәғлүмәт йыйыу буйынса тәжрибә үткәрелә. Уның анализланған һөҙөмтәһе ҡала транспорты өлкәһендә ҡарарҙар ҡабул иткәндә файҙаланыласаҡ. Шулай уҡ ҡала халҡының үҙ биҫтәләрен үҫтереү буйынса фекерҙәренә лә ҙур иғтибар бирелә. Бында административ түгел, ә тәбиғи бүленеш, йәғни Дим, Һупайлы, Инорс, Үҙәк, Черниковка һ.б. иҫәпкә алына. Бындай ҡараш киң ҡатламға таныш булған һәм аңлайышлы мәсьәләләр буйынса фекер алышыу, ә иң мөһиме - территория тураһында ентекле мәғлүмәт туплау мөмкинлеген бирә.

Стратегияны әҙерләү процесында тикшеренеү семинарҙары уҙғарыла. Семинарҙар ҡыҙыҡлы күренеште асыҡлай: ҡала хакимиәте планлаштырған киң ҡоласлы үҙгәрештәр (магистраль, күперҙәр төҙөлөшө, кешеләрҙе икенсе ергә күсереү) халыҡты "ыңғай" һәм "ҡаршы"ға бүлә. Тимәк, киләсәккә төбәлгән оҙайлы ҡарарҙар ҡабул итеү өсөн халыҡ менән эшләү мөһим. Ошондай эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә Өфөнөң арауыҡ үҫеше концепцияһы булдырыла. Уның төп мәлдәре булып ҡаланы урап алған тәбиғәтте һәм йәшеллекте һаҡлау; ҡала райондарында төрлөлөктө һәм оҡшаш мөхитте булдырыуға айырым ҡараш; һәр районда урындағы йәмғиәт үҙәктәре; барлыҡ райондарҙың йәмәғәт транспорты, шул иҫәптән уның тиҙ йөрөшлө төрҙәре системаһы менән бәйләнеш; "яңы райондар" булдырыу - яңы күп функциялы ҡала үҙәктәре тураһында тәҡдимдәр әҙерләү тора. Халыҡ менән эшләү һөҙөмтәһе Концепцияның эш вариантында сағылдырылған - һәр район өсөн уның көсһөҙ һәм көслө яҡтарын, үҙенсәлеген иҫәпкә алған артабанғы үҫеш юлы тәҡдим ителгән.

- Ысынлап та, беҙгә Өфөнөң халыҡ ихтыяжын иҫәпкә алмай ҡабул ителгән генераль планын тормошҡа ашырыуҙы туҡтатып торорға тура килде. Директив ысул менән раҫланған күпселек генпландарҙың бәләһе шунда, - ти ҡала хаки-

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Июлдең тәүге яртыһында республикала картуф һәм һөт бер аҙ арзанайған. Арзанайыу шулай уҡ он, дөгө, май, йомортҡа, кишер, тоҙ, тары ярмаһына ла ҡағыла. Шул уҡ ваҡытта яңы кәбеҫтәгә, сәйгә, тауыҡ итенә, алма, көнбағыш майы, ҡарабойҙайға, вермишелгә, арыш икмәгенә, шәкәр ҡомона хаҡтар бер аҙ күтәрелгән.

✓Билдәле булыуынса, Төркиәләге хәрби түңкәрелеш һөҙөмтәһендә ике ил араһында авиабәйләнеш буйынса ҡатмарлыҡтар килеп тыуған. Рәсәй Президенты Владимир Путин Транспорт министрлығына Рәсәй граждандарын Төркиәнән алып ҡайтыуҙа бар яҡлап ярҙам күрһәтеүҙе ойоштороуҙы йөкмәткән.

✓Башҡорт дәүләт аграр университетының йыйылма командаһы Кубанда үткән Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы Юғары уҡыу йорттары VI йәйге универсиадаһының финал ярыштарында икенсе урын яуланы. Был байрам 35 юғары уҡыу йортонан 800 спортсыны берләштергән. Улар баскетбол, волейбол, еңел атлетика буйынса ярышҡан.

✓50-се Халыҡ-ара йәйге балалар уйындарында Өфөнән 23 бала ҡатнашты һәм өс төрҙә ярышты. 7-се мәктәп уҡыусылары командаһы волейбол буйынса ярышта - алтын, 13-сө мәктәп уҡыусылары командаһы гандбол буйынса - өсөнсө урын яуланы. Тхэквондо буйынса ярыштарҙа Кирилл Хәмиҙуллин, Карина Ушакова - бронза, ә Анна Евдокимова көмөш миҙалға лайыҡ булды. Шулай итеп, баш ҡала балалары Халыҡ-ара уйындарҙан 1 алтын, 1 көмөш, 3 бронза миҙал менән ҡайтты.

✓Өфөлә 500-ҙән ашыу эре ағас ултыртыласаҡ. Хакимиәттә был эштәрҙе атҡарырға һәм 30 ноябргә тиклем тамамларға тейешле подрядсылар буйынса электрон аукцион үткәрелә. Ағастар Дим районынан башлап Черниковка биҫтәһенә тиклем ултыртыласаҡ. Тендер документтарында 259 ҡарағас, 260 ҡайын күрһәтелгән. Бейеклектәре - 2,5 метр. Шулай уҡ бейеклеге 4,5 метрлыҡ 12 ҡарағас һәм 12 ҡайынға ла заказ бирелгән.

✓Һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, йәйге каникулдарында студенттарҙың 90% эшләй. Сағыштырыу өсөн: 2013 йылда йәйгеһен эшләргә теләүсе студенттар һаны 79% ине. Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, йәш белгестәрҙең күбеһе - үҙ һөнәре буйынса, һәр унынсы студент сауҙа нөктәләрендә һатыусы йә менеджер булып эшләүен белдергән. Йәштәр шулай уҡ ваҡытлыса эш табыуҙың ауырлығын да билдәләй. Ғәҙәттә, эш биреүселәр уларҙы 2-3 айға эшкә яллауҙы өнәп бармай.

✓ ***Был, берҙән, граждандарҙы артыҡ ҡағыҙҙан азат итһә, икенсенән, муттарға ла юлды яба. Сөнки ҡағыҙ таныҡлыҡ бер тапҡыр бирелә, һәм унда милек менән артабанғы эш итеүҙәр, үҙгәрештәр сағылмай.***



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

**Ошо йылдың 15 июленән "Күсемһеҙ милеккә хоҡуҡтарҙы һәм уның менән эш итеүҙе дәүләт теркәүе тураһында"ғы федераль законға үҙгәрештәр индерелеү менән бәйле, күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты раҫлаусы ҡағыҙ таныҡтмалар биреү туктатыла. Күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты раҫлау өсөн хәҙер Күсемһеҙ милеккә хоҡуҡты һәм уның менән эш итеүҙең берҙәм дәүләт реестрынан (ЕГРП) күсермә алыу ҙа етә.**



# ҠАҒЫҘ ТАНЫҠЛЫҠТЫ...

## күсермә алыштыра

Хоҡуҡты дәүләт теркәүен таныҡлаусы бындай күсермә формаһы Рәсәй Иҡтисад үҫеше министрлығы тарафынан раҫланған. Уның ҡағыҙ рәүешендә лә, электрон формала булыуы ла ихтимал. Хоҡуҡты дәүләт теркәүен раҫлаусы ЕГРП күсермәһендә хоҡуҡ биләүсенең исем-фамилияһы, тейешле датаһы һәм номеры күрһәтелгән күсемһеҙ объект, милеккә хоҡуҡты теркәүгә нигеҙ булып торған документтар исемлеге тураһында мәғлүмәттәр була. Милеккә хоҡуҡты теркәү тураһында ошоға тиклем бирелеп килгән ҡағыҙ таныҡлыҡ милеккә хоҡуҡты раҫлаусы берҙән-бер документ түгел әле, сөнки ул граждандың теге йәки был датаға ҡарата милексе булыуын күрһәтә, ә иң төп әһәмиәткә эйә мәғлүмәттәр әлеге ЕГРП-ла. Мәҫәлән, Иванов исеменә бирелгән таныҡлыҡ бар, ти, ләкин әгәр ЕГРП-ла фатир хужаһы тип Петров күрһәтелгән булһа, дәүләт Петровты мөлкәт хужаһы итеп таныясаҡ. Реестрҙа быны раҫлау кәрәк булған мәлгә фатир хужаһының кем булыуы асыҡ күренеп тора. Был, берҙән, граждандарҙы артыҡ ҡағыҙҙан азат итһә, икенсенән, ҡағыҙ таныҡлыҡтар менән эш итеүҙәре ихтимал муттарға ла юлды яба. Сөнки ҡағыҙ таныҡлыҡ бер тапҡыр бирелә, һәм унда милек менән артабанғы эш итеүҙәр, үҙгәрештәр сағылмай. Ә инде милексенең үҙендәге милеккә хоҡуҡ биреүсе, йәғни ниндәй нигеҙҙә ул милеккә хужа булғанды раҫлаусы (һатыу-һатып алыу, бүләк итеү килешеүе, мираҫ алыу йәки хосусилаштырыу таныҡлыҡтары, суд ҡарарҙары һ.б.) документтарҙы бирәү ҙә юҡҡа сығарырға йыйынмай.

Әлек фатир һатыу йәки һатып алыу мәлендә төп таныҡлыҡтан тыш, документтар папкаһында ЕГРП күсермәһе лә алына ине. Был фатир менән эш итеүҙә уның "таҙалығы"н, йәғни унда башҡа милексәләр хужа булып тормаймы, фатир айҡанлы суд эштәре алып барылмаймы, уға арест һалынмағанмы икәнлекте тикшереү өсөн мотлаҡ кәрәк була ине. Муттарҙан алданмау өсөн был әле лә ышанысты юл. Үҙегеҙҙең йә булмаһа һеҙҙе ҡыҙыҡһындырған теләһә ниндәй фатир хаҡында мәғлүмәттәр алыу өсөн ЕГРП күсермәһенә заказ бирә алаһығыҙ. Быны өсөн кадастр палатаһына килергә лә, дәүләт хеҙмәте йә Росреестр порталдары аша уның электрон вариантын һоратып алырға ла була (хаҡы - 150 һум).

Ҡайһы берәүҙәр, элек бирелгән ҡағыҙ таныҡлыҡты яңы күсермәгә алыштырып алыу кәрәкмәйме, тигән һорау бирә. Таныҡлыҡҡа бәйле мәсьәләләр килеп тыуғанда, мәҫәлән, коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн субсидия юллағанда, дәүләт чиновниктары ҡағыҙ таныҡлыҡты әлегә ҡабул итә, ләкин күпселек осраҡтарҙа, мәҫәлән, банктарҙа ипотека алғанда таныҡлыҡтың ЕГРП күсермәһен талап итәсәктәр.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# СИТ ИЛ ОРЛОҠТАРЫН...

## илгә индермәскә!

**Июлдең тәүге аҙнаһында Рәсәй Президенты Владимир Путин яңы закондар пакетына ҡул ҡуйҙы.**



- Шуларҙың береһе дәүләт йәки муниципаль хеҙмәттә эшләргә теләгән кешеләргә ҡағыла. Эшкә урынлашырҙан алда улар һуңғы өс йыл эсендә интернетҡа ниндәй мәғлүмәттәр урынлаштырыуҙары, был сайттарҙың һәм социаль селтәрҙәрҙең адрестары хаҡында мәғлүмәт бирергә тейеш буласаҡ.

-Тағы бер закон буйынса, коррупционер өсөнсө кеше аша эш иткән хәлдә лә был аралашсы (физик йәки юридик шәхес булыуға ҡарамаҫтан) шулай уҡ ришүәт алыусы булып иҫәпләнәсәк. Ришүәтте кәрәкле кешеһенә тапшырыу йә алып биреүҙә үҙ хеҙмәттәрен тәҡдим итеүсегә ҡарата ла яуаплылыҡ билдәләнгән.

- Хеҙмәткәргә эш хаҡын өлөшләтә йәки тулыһынса һәм ваҡытында түләмәү административ хоҡуҡ боҙоуҙарҙың айырым өлөшөн тәьмин итәсәк.

- В.В. Путин шулай уҡ дәүләт хеҙмәткәрҙәрен вазифаларынан ситләтеүгә нигеҙҙәрҙе киңәйтеүсе законға ҡул ҡуйҙы. Элек гәйебе булған чиновникты эшенән бушатыу йә ваҡытлыса эштән ситләтеү өсөн суд ҡарары тейеш булһа, хәҙер судты көтмәскә лә була. Абруйы тапланған хеҙмәткәр юғары етәкселек талап итеүе буйынса отставкаға китергә тейеш.

- Ҙур ҡалалар тирәләй үҫкән ағастарҙы ҡырҡыуҙы сикләүсе законға ҡул ҡуйылды. Халыҡта был закон "йәшел ҡалҡан" исемен алды, ул мегаполистар тирәләй "йәшел билбау" булдырыу бурысын ҡуя. Бындай урындарҙа ағас ҡырҡҡан өсөн граждандарҙан - 5 мең, вазифалы кешеләрҙән һәм шәхси эшҡыуарҙарҙан - 20 - 40 меңгә тиклем, ә юридик шәхестәрҙән 250-нән 500 меңгә тиклем штраф түләтеү ҡаралған.

-Тағы бер закон буйынса коллекторҙар ваҡытында түләнмәгән бурыстарҙы физик шәхестәрҙән генә талап итә ала. Элек был зонаға шәхси эшҡыуарҙар ҙа инә ине. Бынан тыш, коллектор агентлыҡтарына торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн бурыстарҙы түләтеү тыйылды. Бурыслыларға хәҙер коллекторҙар аҙнаһына ике тапҡыр ғына һәм ҡәтғи рәүештә иртәнге сәғәт 8-ҙән кискә 10-ға тиклем шылтырата ала.

- Һәм, ниһайәт, иң күп шау-шыу тыуҙырғаны - ГМО-ға ҡаршы закон булды. 4 июлдән гендар инженерияһы юлы менән сығарылған сит ил орлоҡтарын Рәсәйгә индереү һәм уларҙы сәсеү тыйыла. Шулай уҡ ватан ғалимдары тарафынан сығарылған ГМО-үҫемлектәр үҫтерергә ярамай. Ә инде сит илдән "ят" генлы ингредиенттар һәм әҙер аҙыҡ-түлек индереүгә әлегә тыйыу юҡ, ләкин ГМО-ризыҡтарҙың кешеләр һаулығына һәм тирә-яҡ мөхиткә зыяны булған хәлдә хөкүмәткә уларҙы Рәсәйгә индереүҙе сикләү хоҡуғы бирелгән.

миәте башлығы Ирек Ялалов. - Беҙҙең бурыс - халыҡтың ихтыяжын ғына түгел, ә ҡаланың 10 - 20 йылға үҫеше перспективаларын күҙаллаған генплан төҙөү. Беҙ бөгөн нигеҙ һалғанды киләсәк быуын тормошҡа ашырасағын һәр саҡ иҫтә тоторға кәрәк.

# РӨХСӘТЕҢ БУЛМАҺА...



**Уҙған йома Өфө эргәһендәге ҡасабаларҙа йәшәүселәр пассажирҙар ташырға рөхсәте булмаған автобустарҙың маршрутка сыҡмауы арҡаһында ауырлыҡ кисергәйне.**

15 июлдән көсөнә ингән "Рәсәй Федерацияһында пассажирҙарҙы һәм йөктө автомобиль транспорты һәм ҡала ер өҫтө электр тарнспорты менән даими ташыуҙы ойоштороу тураһында"ғы 220-се Федераль законға ярашлы, автобус водителдәренең маршрут ҡағыҙы булырға тейеш, булмаған осраҡта, уларға штраф һалына. Был яңылыҡҡа бик күп шәхси эшҡыуарҙар әҙер булмай сыҡҡан. Һөҙөмтәлә транспорт тотҡарлыҡтары килеп тыуған.

Ошо мәсьәләне тикшереп, Республика Башлығы Рөстәм Хәмитов аҙна барышында автобус маршруттарының бер нисә һуңғы туҡталышында булып, баш ҡалала автобус хеҙмәтләндереүе менән танышты. Һөҙөмтәлә пассажирҙар ташыу өсөн рөхсәте булған эшҡыуарҙарҙың микроавтобустары маршрутка ҡәтғи рәүештә расписание буйынса сығыуы, туҡталыштарҙа халыҡтың йыйылып тормауы асыҡланған. Маршрут водителдәре 220-се Федераль закондың үҙ көсөнә инеүенә шат булыуын белдергән, сөнки хәҙер рөхсәте булмаған автобустар эшләмәй. Юҡһа, тап уларҙың ҡыҫылыуы арҡаһында тығындар барлыҡҡа килеп, туҡталыштарға яҡын килеү ҙә ауырлыҡ тыуҙырған. Бынан тыш, автобус хеҙмәтләндереүе баҙарында ҡатнашыусылар мәғлүмәттәре буйынса, закон ғәмәлгә инеү менән рәсми пассажирҙар ташыусыларҙың төшөмө ике тапҡырға артҡан. Тимәк, бюджетҡа һалым кимәле лә күбәйгән.

Автобус менән пассажирҙар ташыу баҙарындағы хәл-торош рәсми ташыусыларҙың транспорт сараларын арттырыу иҫәбенә хәл ителә. "Бөгөн автобустар менән пассажирҙар ташыу баҙарында барыһы ла тотороҡланды, транспорт даими йөрөй, халыҡтан ялыуҙар юҡ, - тип хәбәр итә БР Госкомтранст матбуғат хеҙмәте. - Өҫтәмә автобустар талап ителгән маршруттарҙа конкурс үткән һәм маршрут ҡағыҙҙары булған автоташыусылар автобустар һаның артырҙы. Шулай итеп, халыҡты ҡала һәм муниципаль-ара маршруттарҙа йөрөтөүҙе ойоштороу мәсьәләһе хәл ителде".

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ 50 грамм прополисты 50 мл үҫемлек майына һалып, ҡайнап ултырған һыуҙа иретергә. Һөҙөргә һәм быяла банкаға һалып алырға. Йүткергән саҡта көнөнә 2 тапҡыр арҡаны, күкрәкте, аяҡтарҙы майларға. Яҡтылыҡ төшмәгән урында һаҡларға.

### Тонзиллит

❖ Хроник тонзиллит мәлендә көнөнә 2 тапҡыр һалҡын һөттә һалам менән эсергә. Шул рәүешле 2 аҙна буйы тамаҡты сыныҡтырғас, көн һайын 8-10 тапҡыр аҙ-аҙлап тундырма ашай башлайһың. Бер ай самаһы шулай дауаланғас, миндалиналар нормаға килергә тейеш.

### Дегәнәк

❖ 5 грамм дегәнәк тамырына 1 стакан үҫемлек майы ҡойорға, 1 тәүлек төнәтергә. Һуңынан майҙы 15 минут талғын утта ҡайнатаһың, һыуытаһың, һөҙәһең. Яраларҙы бөтәштерә, эренле яраларҙы дауалай.

❖ 1 ҡалаҡ дегәнәк япрағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә. Көнөнә 4-6 тапҡыр 1-әр ҡалаҡ эсергә. Ашҡаҙан сей яраһы, шәкәр диабеты сирҙәре мәлендә файҙалы.

### Битлек

❖ Был битлек майлы тире өсөн. 2 йомортҡа ағына 30 грамм бал, ярты ҡалаҡ үҫемлек майы ҡушып, болғатырға һәм 2 ҡалаҡ һоло оно ҡушырға. Битҡә 20 минутҡа һөртәргә. Тәүҙә - йылы, һуңынан һалҡын һыу менән йыуырға.

### Иммунитет нығытыу

❖ 1-әр өлөш меңъяпраҡ үләне (тысячелистник), мышар емеше, юл япрағы, бөтнөк (мята), 2-шәр өлөш кейәү үләне (чабрец) һәм һырланды (череда) ҡушып болғатып, 1 өлөш ошо ҡатнашманы эмаль кәстрүлгә һалып, ярты литр ҡайнар һыу ҡойорға, 3-5 минут талғын утта тотоп, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 50-100 тамсы элеутерококк төнәтмәһе тамыҙырға, 2-3 балғалаҡ бал өҫтәргә. Көнөнә 4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә. Көн һайын яңынан әҙерләргә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

## ТЕШ ҠОРТОН АРБАУ

Һыу ҡойолған күнәккә ҡыҙыу утта ҡыҙҙырылған таш һалып, уға киндер орлоғо өҫтәп, күтәрелгән быуға теше һыҙлаған кешене бөркәндереп ултыртаһың да, йәмкәгә бысаҡтың һырты менән бер көйгә генә һуға-һуға тораһың. Ауырыуҙың хәленә ҡарап, ташты өҫтәргә мөмкин. Аҙаҡ һыуҙы һарҡытып, орлоҡ араһынан тештән төшкән ҡортто һүпләп ташлайһың.

Алтмыш башлы ала ҡорт,
Етмеш башлы ерән ҡорт,
Ҡырҡ башлы ҡара ҡорт,
Бөтөр-бөтөр бала ҡорт,
Кинәт-кинәт кир ҡорт,
Кинәгән ар ҡорт*,
Кәликүрҙе ҡырҡ башлы ала ҡорт,
Әүбәкерҙен* алтмыш тамырын
Киҫкән ҡорт!
Шеш теймәм шарша,
Йә, Мөхәммәт, йә әле!
Асылам, асылам,
Асылам ләкәт*,
Аҫтыртын йөрөгән кафыр ләкәт,
Туғыҙ ҡабат тупраҡтан
Тешеңде сығарма ләкәт!
Шеш теймәм шарша,
Йә, Мөхәммәт, йә әле!
Сәңке, сәңке, сәңке ҡорт,
Сәңке башлы һары ҡорт,
Ҡылдан нәҙек нескә ҡорт,
Ҡылыстан да етеҙ ҡорт,
Ягын һыуҙан үткен ҡорт,
Аҡ мамыҡтан ҡомшаҡ ҡорт!
Шеш теймәм шарша,

Йә, Мөхәммәт, йә әле! - теш һыҙлағанда әйтелә торған был һамаҡты йылан арбауҙа ла файҙаланырға тула.

## ӘПСЕНЛӘҮ

Эй, Хоҙайым, шифаһын бир
Өс йөҙ алтмыш тамырға.
Күҙҙәренең нурын бир,
Тәндәренә сәләмәтлек бир
(Өс тапҡыр елкәненән өрөп ебәрә).

Әпсен-төпсөн, әмәләк,
Күҙҙән килһәң, күҙгә кит,
Ерҙән килһәң, ергә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Ҡайҙан килһәң, шунда кит.
Тфү, тфү, наҙы юҡ,
Күҙ төшөрлөк ере юҡ...

Әпсен-төрсөн,
Бүрәнә баҫһын,
Бер биҙ(е)рә ҡаны сыҡһын,
Бер биҙ(е)рә биҙе сыҡһын,
Бөлдөргәне бөтөп китһен,
Әпсен-төпсөн, үтеп китһен.
Сир-сир, сирмешкә,
Им - имгә,
Сир - мөйөшкә.
Әпсен-төпсөн,
Шайтан үпһен!

**"Башҡорт халыҡ ижады"нан.**

*кинәгән - йәнә; яңырған умарта мәгәнәһендә
*Әүбәкерҙең - кем сағылһа, шуның исеме әйтелә
*ләкәт - хурлау һүҙе

АТАЙЫМ...



# ҺИНЕҢ ФАТИХАҢ МЕНӘН...

## үргә артылам

**Гәзитебеҙҙең үткән 29-сы һанында "Әйт, тиһегеҙ..." рубрикаһында респонденттар алдына бик матур һорау ҡуйылғайны: "Һеҙ атайығыҙҙан ниндәй сифаттар үҙләштерҙегеҙ, үҙегеҙ уландарығыҙға ниндәй өрнәк тәрбиһе бирәһегеҙ?" Ошо һорау өҫтөндә мин дә уйландым әле бына...**

Атайым, Нил Хәким улы Бүләков, иң тәүҙә миндә яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләгәндер, тип уйлайым. Ғаиләлә биш бала үҫтек. Бала саҡтан эшеңде еренә еткерергә кәрәк, тип, ҡалған эшкә ҡар яуа, тигән принципта тәрбиәләне ул беҙҙе. Үҙаллылыҡҡа өйрәтте. Ул яуаплы эштәрҙә эшләне: колхозда инженер, звено етәксеһе, бригадир, ун ике йылдан ашыу ауыл хакимиәте башлығы. Атайымдың эштән арып ҡайтыуын белгәс, өйҙәге бар эштәрҙе башҡарып ҡуйырға тырыша инек. Бер маҡтап ебәрһә, икенсе көн тағы ла дәртләнеберәк эшләй торғайныҡ. Ата-әсәбеҙ беҙҙе бала саҡта бер ҡасан да үҙҙәре менән ҡунаҡҡа алып йөрөмәне. Ул саҡта бығ үпкәләп тә ҡуя торғайныҡ, тик бының беҙҙең өсөн яҡшыға булыуын хәҙер аңлайым. Улар беҙҙең әрһеҙ, оло бәйел булып үсмәүебеҙҙе теләгәндер. Хәҙер беҙ ҙә кәләшем менән ҡыҙҙарыбыҙҙы ошо йүнәлештә тәрбиәләйбеҙ.

Атайҙағы рух ныҡлығы ла һәр саҡ һоҡландырҙы. 90-сы йылдарға тиклем колхозда эштән эсеп ҡайтыу заманаһың нормаһы тип ҡабул ителгән бит. Илдә үҙгәрештәр башланғас, миңә 10 йәш тирәһендә, атай спиртлы эсемлектән бөтөнләй баш тартты. Инде 30 йылдан ашыу айыҡ тормош алып бара. Бала сағым, үсмер осором тыныс тормошта уҙыуы менән уға сикһеҙ рәхмәтлемен.

Атай ҡатынынан - әсәйемдән уныуы тураһында ла әйтеп ҡуя ҡайһы саҡ. Ысынлап та, уларҙың ғаилә моделе беҙҙең өсөн үрнәк. Ир кеше табыусы булырға тейеш. Шул сифаттарҙы ла унан күреп үҫтем. Шуға ла бөтә тапҡан-таянғаным ғаиләм өсөн тигән инаныс менән йәшәйем.

Атай нисә йәштә булһа ла ныҡлы терәк ул. Инде ул аҡһаҡалдар йәшенә етте. Мине утыҙ йәш булғанда, тап бынан 6 йыл элек, ауыл хакимиәте башлығы итеп һайлап ҡуйғанда бер аҙ борсолоп та ҡуйғайны. Сөнки ул үҙе ошо эштә тиҫтә йылдан ашыу эшләгән, эштең ауырлығын яҡшы белә. Тәүге йылдарҙа аҡыллы кәңәштәре, төплө фекерҙәре менән ярҙам итте. Кешеләрҙе,аҡты-ҡараны айырырға өйрәтте. Эреләнергә, башҡаларҙан үҙенде өҫтөн ҡуйырға ярамағанын да атай-әсәй һеҙдерҙә беҙҙең аңға. Хәҙер үҫеп килгән өс ҡыҙыбыҙға ла ошо хәҡиҡәтте төшөндөрөргә тырышабыҙ.

Илебеҙ кимәлендә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, атай тәрбиәһе, ғаиләлә атай роле тигән мәсьәлә, нишләптер, ситтә ҡала. Ир-егетте ир итеүсе - ирҙәрсә атай тәрбиәһе, тигәнде онотмаһаҡ ине. Түбәндә - атайыма арналған шиғырымды ла тәҡдим итәм.

### Атайыма

Уҡ юнырлыҡ заман түгел бөгөн,
Заманаһың башҡа ҡоралы.
Атай, һинән күпте төшөндөм дә,
Мин тормошта шуға ҡоралды.

Аталы ла бала - арҡалы ла,
Аҙымымда минең ышаныс.
Балаларым ҡосағымда хәҙер,
Атайлыҡтың хисе бик таныш.

Хискә һаранбыҙ беҙ, тик шулай ҙа
Күҙҙәр өнһөҙ генә аңлаша.
Атай һүҙе - хәҡиҡәттең үҙе,
Мин төшөндөм быға аң аша.

Аҫыл ир-егеттең асылы һин,
Атай, тиеп һинә тартылам.
Тормош үре текә, фатихаң бар,
Шуғалыр ҙа еңел артылам.

**Фәнил БҮЛӘКОВ,**
**Учалы районы Иманғол ауыл биләмәһе башлығы.**

ҠЫҘЫҠ МӘЛДӘР

# ЕЛДЕРӘБЕҘ ҮГЕҘҘӘ...

## барып етергә, тиеп, эшкә

**Гәзитебеҙҙең 28-се һанында Зилдә Хәмиҙуллинаның үҙе менән булған ҡыҙыҡ хәлдәр тураһында яҙғанын уҡығас, күп кенә мәрәкә хәлдәр күҙ алдына килде.**

### Үпкәләү юҡ ине

Беҙ үҫкәндә әле колхоздар гөрләп торҙо, бөтә эштәрҙә лә халыҡ тырышып эшләне. Бесән мәлендә беҙҙең кеүек 15-16 йәшлектәр ҙә әүҙем ҡатнашты. Ауылдан алыҫта ҡуна ятып эшләй инек. Кәрәк-яраҡҡа ғына ҡайтып киләбеҙ. Бер ҡайтҡанда 5 ҡыҙ бергә китергә әҙерләндек. Колхоздың "Ходуля" ҡушаматлы ҙур, үтә яй, йыуаш үгеҙен тотоп алдыҡ та, арҡаһына дүртебеҙ ултырҙыҡ, бишенсебеҙ уны икмәккә әүрәтеп, алдан бара. Көн буйы шулай үгеҙҙе әүрәтә-әүрәтә килеп, бесән өҫтәнә төн уртаһында ғына барып еттек. Үндағылар үгеҙҙе күргәс, тәгәрәп ятып көләләр, нисек килеп етеүебеҙҙе ҡат-ҡат һөйләтәләр. Беҙ көләшкән арала "Ходуля"быҙ ҡыуыш артындағы бер биҙрә тоҙло ҡыярҙы ҡыя һуҡҡан да, аптырап, ҡарап тора. Ике малай уны әүрәтеп, йәнә ауылға алып ҡайтып китте. Беҙҙең, биш ҡыҙҙың, үгеҙҙә "елдереүенә" бағышлап, йор һүҙләләр таҡмаҡтар ҙа сығарҙы. Түнәрәктә уларҙы әйтә-әйтә бейешеп алдыҡ. Үпкәләү, үсегеү тигәндең әҫәре лә юҡ, һәр нәмәнән ҡыҙыҡ табып, күңелен күтәреп йәшәй торған шул халыҡ.

### Муйыл йыйғанда

Беҙҙең ауыл ҡара урман ҡаплаған тауҙар уртаһында ултыра. Башҡа ағастар араһында муйыл да шыйҙа һымаҡ бейек булып үҫкән. Өлкән апай-еңгәләр менә алмай уларға. Мин бәләкәйҙән гел малайҙар менән үҫкәнгәме, ағас башына оҫта үрмәләйем. Шуға күрә еңгәмдәр мине, әсәйемдән һорап, гел муйылға алып китәләр. Муйыл төбөнә ҙур киндер ашъяулыҡ түшәйбеҙ, муйыл өҫтән төшкәндә ергә ҡойолмаһын өсөн инде быныһы. Өҫкә меңгәс, еңгәләргә үҙемдең шартымды әйтеп ҡуям: "Тәүҙә минең биҙрәмде тултырабыҙ!" Улар: "Төлкөбикә, хәйләкәрбикә, муйылды аңһат ҡына йыймаҡсы!" - тип, минән көлгән булалар. Биҙрәләр тулғас, ҡайтып китәбеҙ. Иң тәүҙә беҙҙең өйгә һуғылып, "Төлкөбикә"не һөйләп, көлөшөп, сәй эсә еңгәмдәр, унан һуң ғына үҙ йорттарына таралышалар. Шуныһы һоҡланғыс: бәләкәй генә эш-хәлдән дә кешеләр ихлас көлә белгән, үпкәләү һәм үсегеүҙе иҫкә лә алмаған.

### Утлы убыр таралған

Ауылда баҡсасылыҡ көслө булды: йәшелсә, емеш-еләктең ниндәйе генә юҡ! Көҙгә ҡарай ҡабаҡтар тәгәрәп ята. Шуның башын киҫеп, эсен алабыҙ ҙа, ауыҙ, күҙ, танау яһайбыҙ, эсенә утлы күмер тултырабыҙ. Бер имәнес нәмә килеп сыға. Ҡурҡаҡ ғыраҡ кешеләрҙең тәҙрәләренә терәп ҡуйып торабыҙ - өй эсендә сарбайлашалар, илайҙар, ә беҙгә - ҡыҙыҡ. Ауыл буйлап "утлы убыр" йөрөй, тигән һүҙ китә. Ул ҡабаҡтарҙы кешеләрҙең картуфы араһына ла йәшереп, күмеп китәбеҙ. Ҡайһы берҙәрен картуф хужалары таба ла, үткән берәүгә күрһәтә. Ауыл таҡ ла йәштәрҙең шуҡлығынан көлә, үҙҙәренең йәш сағын иҫенә төшөрә. Кем шаярғанын эҙләүсе лә, һораусы ла юҡ. Әйтерһең, шулай кәрәк...

### Мәктәптең "эйәһе" йөрөгән

Уйындан ҡайтҡанда, тура, тип, мәктәп ихатаһы аша сығабыҙ. Шунда уҡ ҡарауылсы Сәрүәретдин бабай килеп сыға. Бер көндө уны "уҡытырға" булдыҡ. Ҙур аҡ түшәмә таптыҡ, Шамил исемле бейек кенә малайҙың елкәненә тоҡос Хәйбуллаңы ултыртып, әлеге аҡ түшәмәне уларға баштан-аяҡ яптыҡ та, ихатаға индек. Бабай килеп тә сыкты, аҡырып, өйөнә лә сапты. Өйө ҡыын ине. Ауылда мәктәптең "эйәһе" барлығы тураһында һүҙ таралды. Бабай башҡа күренмәне, үҙе ҡурҡаҡ ҡына ине шул. Аҙаҡ, үҙебеҙ буй еткергәс, уға ошо хәлде һөйләп бирҙек. Ул, сер бирмәй генә: "Мин юрый ғына ҡастым бит ул, һеҙ икәнде белдем", - тигән булды. Күмәкләп көлөштөк.

ШУЛАЙ ИТЕП...
**Әлләнә ниндәй ҡыҙыҡтар була торғайны шул кешеләр татыу, бер-береһенә ысын дуҫ булғанда. Бар, хәҙер шаярып ҡара, хөкөмгә тарттырырға ла күп һорамаҫтар...**

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

ХАҠ ТАМЫРЛЫБЫҘ

**Ошо көндәрҙә Ғафури районы Һабай ауылында "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар!" тигән ҙур сара ойошторолдо. Ошо уңайҙан, әҙме-күпме яҙма сығанаҡтарына таянып һәм быуындан-быуынға тапшырылып, беҙҙең көндәргә килеп еткән ҡайһы бер хәтирәләрҙе файҙаланып, ауылыбыҙҙың тарихына яҡынса бер аҙ байҡау яһап ҡарайыҡ.**

# ИКЕ ЗЫЯРАТЛЫ АУЫЛ




Ә.З. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башҡортостана" тигән хеҙмәтендә, ауылдың исеме әүҙем пугачевсы Һабай Ҡотлиндың шәхесе менән бәйле, тиелә. Ә уның оло улы Иманғолдоң 1760 йылда тыуғанлығын билдәләй.

Басировтар шәжәрәһе буйынса, Мостафа олатайыбыҙҙың 1725 йыл Һабайҙа тыуғанлығы билдәле. Шулай булғас, уны донъяға тыуҙырған ата-инәһе лә Һабайҙа йәшәгән тигән һүҙ.

Халҡыбыҙҙың бик борондан үҙ аҫаба ерен һаҡлап, бер урында ғына йәшәгәнлеген иҫәпкә алһаҡ, Һабай ауылы башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылған осорҙа ла булған, тип ныҡлы әйтергә була. Тик ул был ваҡыттарҙа ниндәй исем менән аталғанлығы әлегә билдәһеҙ. Үҙ тарихында ауылыбыҙҙағы өйҙәр һаны 60-70-тән артмаһа ла, уның ике ҙур зыяраты бар. Был да уның бик боронғо икәнен раҫлай.

Олатайымдың ауылыбыҙҙың тарихына ҡағылышлы һөйләгәндәре лә бик фәһемле. Ул - Әхмәтгәрәй Басир улы Басиров (1926 йылғы халыҡ иҫәбен алғанға тиклем Мөхәмәтәминов) батша армияһында туғыҙ йыл хеҙмәт итеп, 1904-1905 йылдарҙағы рус-япон һуғышында ҡатнашып, Рәсәйҙе арҡырыға-буйға йөрөп сыҡҡан яугир булған. Шул арҡала ауылда ғына түгел, яҡын-тирәлә лә рус телендә таҙа һөйләшә белгән, заманына күрә тормош университеттарының бөтә баҫҡыстарын үткән бик абруйлы аҡһаҡал булған. Әлеге аҡылым булып, уның һәр һөйләгәнен яҙып барғанда, ҡалын ғына бер китап сығарып булыр ине лә бит...

Олатайым "олатайым һөйләй торғайны", тип, ауылыбыҙға типтәрҙәрҙең Ҡаҙан яғынын нисек килеп урынлашыуын да аңлатыр ине. "Халыҡ хәтере - мәңгелек", тиҙәр бит. Бер заман ауылыбыҙға арбаларына аттар егелгән бер төркөм ылаусылар килеп керә. Старостаға туҡтап, хәлдәрен аңлатып бирәләр. Мәсьәләне хәл итеү өсөн староста ауыл ҡарттарын сходҡа йыя. Сөнки ул заманда ауыл өсөн сход ҡарары ғына закон көсөнә эйә булған. Ылауҙағылар ауыл ҡарттары алдында тубыҡланып, балаларыбыҙ хаҡына, тип, ауылға ҡабул итеүҙәрен һорағандар. Улар күпме ерҙәр, ауылдар аша үтеүҙәрен, бер нисә тапҡыр көслө ямғыр аҫтында ҡалыуҙарын, юлда бер сабыйҙарын ерләп китеүҙәрен һөйләп бирәләр. "Ҡаҙанлылар (олатайым татарҙар тип һөйләмәй торғайны) ерҙәребеҙҙе тартып алып, беҙҙе тыуған төйәгебеҙҙән ҡыуғас, үҙ башҡортобоҙ ситкә типмәҫ әле, тип юлға сыҡтыҡ, бына нисәнсе ай киләбеҙ, беҙҙе бер ауылда ла ҡабул итмәнеләр. Алып сыҡҡан бөтә малдарыбыҙҙы ла юлда һуйып ашап бөттөк, бына ошо егеүле торған аттарыбыҙ һуңғы малыбыҙ. Әгәр һеҙ ҙә ҡабул итмәһәгеҙ, беҙгә йәшәү бөттө", - тип илашҡандар.

Ауыл ҡарттары бер аҙ кәңәшләшкәс, быларҙы ауылға ҡабул итергә ҡарар сығара. Йорт һәм башҡа ҡаралтылар төҙөү өсөн ер бүләләр, ваҡытлыса йәшәп тороу өсөн берәүҙәр аласығын, келәтен биреп, бөтә ауыл менән төҙөлөш эштәрендә ярҙам итәләр. Малы күберәктәр һыйырҙары менән дә иҫәпләшеп тормайҙар. "Күмәкләгән- яу ҡайтарған" тигәндәй, ҡыш етеүгә, күскенселәрҙең торағы әҙер була. Шул замандарҙан башлап ауылыбыҙҙа Бикҡоловтар, Гәрәевтар, Ғилманшиндар һәм Яппаровтар ғаиләләре ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәп алып китәләр.

Тарихтан белеүебеҙсә, еренән яҙған башҡорт ергә аҫабалыҡ хоҡуғынан да мәхрүм ителгән һәм халыҡ иҫәбен алған ваҡытта милләтен башҡорт итеп яҙҙыра алмаған. Шул сәбәпле, фамилиялары үрҙә телгә алынған ауылдаштарыбыҙ 1926 йылғы иҫәп алыуҙа ла (һуңғы тапҡыр) үҙҙәрен "типтәр" тип яҙҙырғандар (миндә 1926 йылғы иҫәп алыу исемлеге бар).

Исеме бөтә донъяға танылған академик Р.Кузеев үҙе иҫән саҡта "Башҡортостан" гәзитенең эске ике битен тултырып "Башҡортостанда иң күп халыҡ - башҡорттар" тигән ҙур мәҡәлә баҫтырҙы. Бында ул типтәрҙәрҙең башҡортлоғон кире ҡаҡҡыһыҙ итеп иҫбат иткәйне.

Һабай халҡы революцияға тиклем бик иркен йәшәгән. Ул дәүерҙәге хужалыҡ иҫәбен алыу материалдарынан күренеүенсә, 58 йортта бөтәһе 317 кеше көн иткән. Аттар һаны - 408, ә һыйырҙар һаны 380 башҡа еткән. Бынан тыш, ваҡ мал да, бал ҡорто ла аҫрағандар. Һунарсылыҡ, солоҡсолоҡ менән дә шөғөлләнгәндәр. Игенде үҙҙәренә етерлек кенә сәскәндәр. Октябрь революцияһынан һуң, илдә коллективлаштырыу башланғас, "Ҡыҙыл таң" исемле колхоз төҙөп, райондың иң алдынғы хужалығына әйләнә. Орлоҡсолоҡ буйынса махсуслашып, райондың күсмә Ҡыҙыл Байрағын бер нисә тапҡыр үҙендә тота. Н.Хрущевтың колхоздарҙы эреләтеү сәйәсәте ауылыбыҙ өсөн емергес була. Колхозыбыҙҙың иген келәттәре, пилорамаһы, тирмәне, аттары менән ат фермаһы, тимерлеге һәм башҡа хужалыҡ кәрәк-яраҡтары - Ҡауарҙыға, ә һуңғараҡ Юлыҡҡа күсерелә. Шулай итеп, гөрләп торған колхоз юҡҡа сыға, тегеләре лә мандый алмай. Ә шулай ҙа ауылым халҡы милләтебеҙ яҙмышын бергә кисереп, илебеҙ үҫешенә үҙенең дә өлөшөн индереп йәшәүен дауам итә.

**Рәсүл БАСИРОВ,**
**мәғариф ветераны.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1736 йылдың 3 сентябре** - Силәбе нығытмаһына нигеҙ һалына. 1743 йылдан - Исеть провинцияһының хәрби-административ үҙәге. 1787 йылдан - өйәҙ ҡалаһы.

➔ **1736 йыл** - Урал дәүләт заводтары идарасыһы В.Н.Татищев Урал тауы һырттары буйлап Европа менән Азия сиген үткәрә.

➔ **1736 йыл** - Красноуфимск нығытмаһына нигеҙ һалына.

➔ **1736 йыл** - Көңгөр өйәҙендә ташкүмер ятҡылығы асыла.

➔ **1736 йыл** -Сорочинский нығытмаһы Быҙаулыҡҡа нигеҙ һалына.

➔ 1737 йыл - Илецк ҡаласығына нигеҙ һалына.

➔ **1737- 1739 йылдар** - Ырымбур экспедицияһы менән Василий Никитич Татищев етәкселек иткән йылдар. Кириллов тарафынан нигеҙ һалынған Ырымбур нығытмаһын Татищев "бик насар хәлдә" күрә. Ул стеналарҙы, йырындырҙы нығытырға ҡуша, шул уҡ ваҡытта үҙенән алдағылар һайлаған был урындың бигүк уңайлынан булмауын күрә: яҙ һыу баҫа; бер яҡтан - үтеп сыҡҡыһыҙ тауҙар, икенсе яҡтан уңдырышһыҙ дала менән уратып алынған. Нығытманы тәртипкә килтергәс, Татищев Ырымбур өсөн яңы урын һайларға ҡарар итә. 2 июлдә ул Ҡыҙыл тау тигән бер урынға килә һәм был ерҙе, бөтәһе лә хуплағанса, тигеҙ һәм иркен тип таба. Шул уҡ ваҡытта Татищев Ташкентҡа ҙур сауҙа карауаны ебәрә. В.Н.Татищев Рәсәйҙә этнография һәм тарихи сығанаҡтар фәнен үҫтереүгә нигеҙ һала, тәүге рус энциклопедик һүҙлеген төҙөй.

➔ **1738 йыл** - Ырымбурҙан Урта Азияға тәүге рус сауҙа караваны оҙатыла. Сауҙа башланыу менән Һиндостанда, Фарсыла, Афғанстанда ҡойолған алтын һәм көмөш тәңкәләр ботлап Рәсәй ҡаҙнаһына ағыла башлай. 1751 йылда Азия сауҙагәрҙәренән алмашып алынған алтын-көмөштө иретеп ҡойоу өсөн Петербургтан Ырымбурға ҡойоу оҫталары, иретеүселәр ебәрелә.

➔ **XVIII быуаттың 40-сы йылдары** - Уралда тау мәктәптәре, училищелар асыла, унда башҡорт балалары ла уҡый.

➔ **1739 - 1742 йылдар** - Ырымбур экспедицияһы менән Василий Алексеевич Урусов етәкселек иткән йылдар. Буласаҡ ҡала өсөн Татищев һайлаған ергә килеп, Урусов 1740 йылда Ырымбур ҡалаһы төҙөлөшөн башлап ебәреү сараларына тотона, ләкин Башҡортостанда Ҡараһаҡал ихтилалы тоҡанып китеү сәбәпле, эш тотҡарланып ҡала. Хәрби коллегиянан килгән Указ буйынса Урусов баш күтәреүҙе баҫтырырға ебәрелә. Был эшкә ул танау-ҡолаҡтарҙы ҡырҡыуға тиклем барып еткәнсә, сиктән тыш аяуһыҙлыҡ менән тотона.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

## Инеш

Этногенез теорияһы буйынса, этник төркөмдөң этник үҙаңын сағылдырған үҙ этнонимы барлыҡҡа килгәндән һуң формалашыу осоро тамамлана. Тик ошонан һуң ғына халыҡтың этник тарихы башлана, этник берҙәмлек үҫеш осоро кисерә, башҡалар менән ҡушылып яңы этник ойошма барлыҡҡа килтерә. Башҡорттар физик тип булараҡ, монголоид һәм европеоид расалары берҙәмлегенән формалаша, генетик яҡтан улар Урал ареалына ҡарай. Артабан оҙайлы быуаттар буйына барған аралашыу процесында төрки телле халыҡтар өҫтөнлөк ала башлай. М.З. Зәкиев фекеренсә, Волга-Урал буйының төркиләшеү процесы беҙҙең эраға тиклем VII-IV быуаттарға ҡарай.Көнбайыш Уралда иһә, фин-уғыр ҡәбиләләре менән төрки ҡәбиләләр ныҡ аралаша (195, 305-се бит). Беҙҙең эраға тиклем V быуат тарихи сығанаҡтары Көньяҡ Урал ҡәбиләләре хаҡында аныҡ мәғлүмәт еткерә: унда әйтелеүенсә, Ра (хәҙерге Волга) йылғаһының көнсығышына табан, таулы-урманлы Рифей (Урал тауҙары) буйында даи (даик, дахо), исседондар, аримастар, агриппейҙар, иирктар, ә уларҙан көньяҡтараҡ саҡтар һәм мәсәғүттәр йәшәгән. В.В. Бартольд яҙыуынса, даиҙар (даиктар) боронғо төрки телендә һөйләшкән. Уның фекерен С.Е. Малов яҡланы һәм иртә тимер быуат башында Көньяҡ Уралда йәшәүсе ҡәбиләләр боронғо башҡорт телендә аралашҡанлығын иҫбатланы. ("Республика Башҡортостан" гәзите, № 228, 01.12.2010, Н. Мәжитов мәҡәләһе).

С.И. Руденко, С. Е. Малов, Дж. Кейекбаев, К.Ф. Смирнов башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте һәм теле Көньяҡ Уралда йәшәүсе дахо-мәсәғүт ҡәбиләләре менән булыуын раҫлай (21, 56-сы бит). Мәсәғүт ҡәбиләләренең башҡорттар менән уртаҡ тамырҙан булыуын улар генетик туғанлығынан сығып аңлата (110, 110-сы бит). Уралтау итәгендә йәшәүсе мәсәғүттәр боронғо башҡорттар (уғырҙар) менән тығыҙ аралашҡан һәм даи (даик) этнонимы менән башҡорттарҙың яйыҡ төркөмөнөң оҡшашлығы ошо аралашыуҙы иҫбатлай.

Һуңыраҡ күренекле археолог Н. А. Акишев саҡ ҡәберлектәрендә табылған боронғо төрки яҙыуҙарҙы - донъяға саҡтарҙың телен асыусы руна яҙмаларын баҫтырып сығарҙы. Саҡ ҡәбиләләре төркисә яҙған, боронғо төрки телдә һөйләшкән. Ғалимдарҙың фараз итеүенсә, саҡ ҡәбиләләре Ырымбур яғында, Көньяҡ Уралда Саҡ һәм Һаҡмар йылғалары буйында йәшәгән. "Саҡ" этнонимы шунан килә. Мәшһүр башҡорт ғалимы Н.А. Мәжитов ошо фекерҙә. Волга, Кама йылғаһы буйҙары, Урал тауҙары борон-борондан төрлө-төрлө сит ҡәбиләләрҙе үҙенә ымһындырып торған. Был хәл урында йәшәүсе аҫаба халыҡтың булмышында яңы һыҙаттар барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ иткән дә инде. Һәр хәлдә, боронғо башҡорттарҙың саҡтар менән этник берҙәмлеге бәхәсһеҙ тип әйтергә була.

С.И. Руденко фекеренсә, Башҡорт иленең төньяҡ-көнбайышында йәшәүсе башҡорттар менән Геродот тиссагеттарын этник яҡтан бәйләргә мөмкин (93, 304-се бит).Тарихсыларҙың мәғлүмәттәре буйынса, Кама йылғаһының урман-дала өлөшөндә тиссагеттар йәшәгән. Тиссагеттар - "үҙенсәлекле һәм күп һанлы халыҡ, һунарсылыҡ менән көн иткән", улар ултыраҡ тормошта, бүрәнә өйҙәрҙә көн күргән (147, 21-22-се биттәр). Тиссагеттар Башҡорт иленең үҙәгендә һәм төньяғында, йәшәүселәр менән тығыҙ аралашҡан. Тиссагеттар менән ҡандаш булған иркта ҡәбиләһе Урал тауҙарының көнсығышында, хәҙерге Силәбе ҡалаһы урынлашҡан ерҙәрҙә ҡуйы урмандар араһында йәшәгән.

**(Дауамы. Башы 29-сы һанда).**

✓ *Уҡсылар "арба аҫтынан" да, бүрәнәгә, түмәрҙәргә баҫып та, хәрәкәт итеүсе һәм тик торған сәптәргә, дүрткел саф булып теҙелгән "дошман отрядына" төҙәп тә атышты, шулай уҡ етеҙлектә һәм мәргәнлектә көс һынашты.*



# ИР-ЕГЕТТЕҢ эйәрле-йүгәнле ат та,

**(Башы 1-се биттә).**

## Башҡорт уҡ-һаҙағының төрҙәре

Фестиваль барышын һүрәтләүгә, унда ҡатнашыусыларҙың, ҡунаҡтарҙың фекерҙәрен еткереүгә күсер алдынан, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегенә, Г.Н.Йәғәфәрованың "Башҡортса-урыҫса хәрби лексика һүҙлеге"нә күҙ һалайыҡ. Нимә ул башҡорттоң уҡ-һаҙағы? Башағына ҡарап, уҡтар түбәндәге төрҙәргә бүленә: кирәгә - ике ҡыры ла үткер башаҡ. Ҡуҙы яурын башаҡ - дүрт ҡыры ла осло башаҡ. Бынан тыш, башҡорттарҙа алмас башаҡлы, ҡырма башаҡлы (ҡырҡып үтә торған), ҡалаҡ башлы, мөгөҙ башаҡлы, бөрөз (беҙ һымаҡ уҡ башағы), сыраҡ баш (биш ҡырлы башаҡ) уҡтар ҡулланылған. Әҙерләү материалына ҡарап, башҡорт уҡтары түбәндәгесә аталған: һыҙма уҡ (һыҙма), һаплы уҡ (самострел), елемкәс, туғыҙ тотам уҡ, туҙ ҡанатлы уҡ. Уҡтан, яндан торған бөтә ҡорал уҡ-һаҙаҡ, уҡ-һая тип йөрөтөлгән. Яндың синонимы - йәйә. Һунарҙа һәм яуҙа файҙаланыуына ҡарап, йәйәләр ике төргә бүленгән. Мәҫәлән, әҙернә - һыртына бүре тарамышы ҡуйып, мөгөҙҙән яһалған хәрби ян. Бүре тарамышы ҡуйып яһалған янды шулай уҡ мөкәтә ян тип тә атағандар. Һанай ян - ябай ян. Уҡ менән яндың ҡайһы бер өлөштәренә килгәндә, улар былай тип атала: яндың сирткес бауы - кереш; уҡтың керешкә эләктерә торған киртекле асалы башы - киҙе; ҡырҡа торған ҡоралдың үткер яғы - беҙ; уҡты һалып, арҡаға элеп йөрөтә торған һауыт - ҡалъян, ҡаңғы, ҡаптырға, ҡорман.

## Һауаларға уҡ сойорғоттом...

Ике көн буйы дауам иткән ярыштарҙа ойоштороусылар батырҙарҙы һәм батыр ҡыҙҙарҙы (улар өсәү ине) бик ҡыҙыҡлы, мауыҡтырғыс һәм ҡатмарлы ете һынау алдына ҡуйҙы. Мәҫәлән, уҡсылар "арба аҫтынан" да, бүрәнәгә, түмәрҙәргә баҫып та, хәрәкәт итеүсе һәм тик торған сәптәргә, дүрткел саф булып теҙелгән "дошман отрядына" төҙәп тә атышты, шулай уҡ етеҙлектә һәм мәргәнлектә көс һынашты. Ә һуңғы, финал ярышында, 7 ҡатнашыусы уҡты сәпкә яһалма ат өҫтөндә ултырған килеш сәпәне. Бындай ҡыҙыҡлы ярыштарҙы ойоштороуҙа баһалама комиссияһы ағзалары - "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубы идараһы рәйесе урынбаҫары Юлай Ғәлиуллиндың, шул уҡ клуб ағзаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Рафаэль Амантаев, Польшала йәшәүсе милләттәшебеҙ, рәссам-тергеҙеүсе Азат Ҡужин, Литванан килгән мәргән уҡсылар - Ирмантас Вишняускас менән Уҡтан атыу буйынса донъя чемпионаты призеры Томас Поцюстың өлөшө ҙур. Әйткәндәй, Вильнюс ҡунағы Ирмантас Вишняускастың нисек итеп осоп барған "ҡош"то атып төшөрөүенә бер һоҡланһаҡ, уның мөгөҙ-һауыттан эргәләге шишмә һыуын эсеп туя алмауы йәнә бер аптыратты. "Любизар" Беренсе башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубы рәйесе Илдар ағай Шәйәхмәтов был күренеште европалыларҙың һыуға ихтирамлы ҡарашына бәйләп аңлатты. Илдар Ғиндулла улы шулай уҡ был фестивалде ойоштороуға сәбәп булған ваҡиғалар, сараның әһәмиәте тураһында ла һөйләп үтте:

- Рафаэль Амантаев менән Юлай Ғәлиуллин Кореяла, Төркиәлә, Ҡытайҙа традицион уҡ атыу буйынса ярыштарҙа ҡатнашып, тәжрибә туплап ҡайтты. Клубыбыҙ менән күмәкләшеп 2014 йылда Венгрияға барҙыҡ, Ҡырғыҙстан менән бәйләнеш булдырҙыҡ. Ошо тәжрибә бөгөнгө сараның идеяһына ерлек булып ятты ла инде. Фестиваль программаһын, нигеҙен Юлай төҙөнө, атамаһын мин ҡуштым. Фекерҙәр берлектә тыуҙы. Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығына рәхмәтлебеҙ - улар ошо эштә ярҙам итте, фестиваль урынын беҙ һайлағанса ҡалдырҙы. Фестивалдең әһәмиәте, маҡсаты - халҡыбыҙҙың яугирҙәр, батырҙар тәрбиәләй торған уйындарын, милли спорт төрҙәрен тергеҙеү, һаҡлап ҡалыу, донъя кимәленә күтәреү. Был эштәрҙе атҡарыу өсөн тәбиғи шарттар ҙа, инвесторҙарҙы йәлеп итеү өсөн мөмкинлектәр ҙә етерлек...

Уҡтан атыу, берҙән, физик көс, таҫыллыҡ, теүәллек, түҙемлелек талап итә торған бик ҡыҙыҡлы спорт төрө ул. Уны Ҡытайҙа урта мәктәп программаһында уҡыталар. Кереште тартыу кешелә түҙемлелек, ныҡышмаллыҡ, маҡсатҡа ынтылышлыҡ тәрбиәләй. Юлай менән Рафаэлде Ҡытайҙа: "Башҡортостанды беҙ батырҙары, уҡсылары менән дан алған ил, тип беләбеҙ. Һеҙ ни эшләп икәү генә килдегеҙ? Беҙ бит һеҙҙе урам һайын, өй һайын уҡсылар йәшәгән халыҡ тип беләбеҙ", - тип, сәмдәренә бик ныҡ тейеп ҡаршылағандар. Шул сәм беҙҙе уятты ла инде. Әҙерләнер-әҙерләнмәҫтән, ярты йыл эсендә ошо фестивалде үткәреү идеяһын күтәреп сыҡтыҡ. Республика кимәлендә ойошторолған был сарабыҙға хатта сит илдәрҙән дә ҡунаҡтар килеүе уның киләсәге өмөтлө булыуына ишаралай. Киләсәктә был фестиваль Евразия кимәлендәге ярышҡа әүерелер, тип өмөт итәбеҙ. Ә әлеге ярышта ҡатнашып, матур һөҙөмтәләр күрһәткәндәрҙе республика йыйылма командаһына туплап, Ҡырғыҙстанда 3-8 сентябрҙә уҙғарыласаҡ Бөтә донъя Күсмә төрки халыҡтарҙың этноуйындарында ҡатнаштырасаҡбыҙ. Ғариза бирҙек. Хөкүмәтебеҙ юл сығымдарында ярҙам итһә, беҙ унда мотлаҡ барасаҡбыҙ...

Илдар Шәйәхмәтов шулай уҡ әлеге фестивалде үткәреү урынының тарихы менән дә таныштырҙы. Уның һөйләүенсә, ошо урында борон башҡорт яугирҙары дошман ғәскәрен Уралдың бирьяғына үткәрмәй, башҡорт илен һаҡлап торған. Һуңғы бер нисә тиҫтә йыл элгәре был урында төрлө уҡ башаҡтары йыш табылған. Ләкин һуңғы тиҫтә йыл эсендә "ҡара археологтар" әүҙемләшеп, был урындағы уҡ башаҡтарын йыйып, коллекционерҙарға таратып бөткән.

## "Еләкле ялан"дар бар әле

Илдар Ғиндулла улы бик талапсан кеше, шуға ла ул һөйләшеү барышында сараның ҡайһы бер ҡытыршылыҡтарын телгә алып, "Беренсе ҡоймаҡ төйөрлө була инде", тип тә ҡабатланы. Әммә ярышта ҡатнашыусылар ҙа, байрамды тамаша ҡылыусылар ҙа был ҡытыршылыҡтарҙы һиҙмәне. Барыһы ла был оҙаҡ телдән төшөрмәй һөйләп йөрөр ваҡиғанан рухи аҙыҡ алды, ир-егеттәр күңелендә иһә уҡ-һаҙаҡлы булыу, ошо һөнәрҙе үҙләштереү теләге уянды. Барыһы ла батырҙар һынын кәүҙәләндергән уҡсылар менән фотоға төшөргә теләне, кемдәрҙер уларҙы "Уҡ-һаҙаҡты ҡайҙа һатып алып була?" тигән һорауҙары менән бимазаланы. Республикала уҡ-һаҙаҡ етештереү һөнәрселегенең киң таралмағанлығы, "Мәргән уҡсы"ла ҡатнашыусыларҙың күбеһе уҡтарҙы Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында йәшәүсе оҫталарҙан почта аша яҙҙырып алыуы тураһындағы яуапты ишеткәндәрҙең кемдәрелер, бәлки, был шөғөлгә тотоноу тураһында ла ҡарар иткәндәр. Был да бик хуп буласаҡ. "Еләкле яландар"ҙы яулап алып бөткәндәр инде, үҙ эшебеҙҙе асырға һуңланыҡ", тип ҡул ҡаушырып йөрөгәндәргә бынамын тигән идея был. Бала саҡта һәр ауыл малайының ҡулында сыбыҡтан эшләнгән уҡ була ине ләбаһа. Ниңә артабан был ҡыҙыҡһыныу егеттәребеҙҙең уҡтан атыу буйынса спорт төрөнә килеүенә булышлыҡ итмәй икән? Һорауға яуап ошо бәйге тураһындағы һығымталарҙан һуң тыуҙы ла инде. Уның бер сәбәбе, әлбиттә, республикала ысын уҡ-һаҙаҡ етештереүселәр булмауында. Икенсенән, уҡтан атыуҙы спорт төрө булараҡ ҡыҙыҡһындырыусылар юҡлығы ла быға сәбәптер. Өсөнсөнән... Ата-бабалар шөғөлөн дауам итергә кәрәк, тигән рух тәрбиәләү ҙә самалы ғына шул әле беҙҙә. Әле булып үткән сара бына ошолар тураһында ла уйландырҙы. "Йатаған" төркөмө етәксеһе, "Сал Урал" төркөмө солисы Илдар Шакир менән һөйләшкәндә лә ошоға ауаздаш фекерҙәр ишетелде: "Мин Силәбе өлкәһенең Минйәр ҡалаһынан, - тине музыкант. - Беҙҙә рус мөхите өҫтөнлөк итә икәнлеге һәр кемгә мәғлүм. Ошо мөхиттә тыуып, буй еткерһәм дә, арҡам З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтында нығынды. Рух барыбер үҙенә тартып алды мине. Ошо рух халҡыбыҙҙы ла үҙ хозурында тота, ситкә ебәрмәй. Һуңғы ике быуат эсендә уҡ-һаҙағы онотторолған халҡыбыҙ барыбер тамырҙарын барлай, үткәндән килгән ауаздарға күңелен һәм йөрәген аса, тарихтағы бөйөклөгөн таный. "Мәргән уҡсы" сараһы ошоға раҫ..."









"Ир-егеттең күңелендә эйәрле-йүгәнле ат ятыр" тигән башҡорт халыҡ мәҡәленә тағы ла "уҡ-һаҙаҡ та ятыр" тип өҫтәге килә. Ысынлап та, был бәйге бит уҡ атыу буйынса спорт төрө менән ҡыҙыҡһынғандарҙы ғына түгел, ә оҫталарҙы ла йәлеп иткән. Ҡурайҙан башлап думбыра, ҡумыҙ кеүек башҡорт музыка ҡоралдары эшләүсе Күгәрсен районы Юлдыбай ауылы оҫтаһы Рәмил Хөснуллин был сараға тамашасы булараҡ ҡына түгел, ә тап шул оҫталыҡ серҙәренә төшөнөргә лә тип килгән: "Уҡ-һаҙаҡты нисек, ниндәй ағастан эшләйҙәр икән, тигән ҡыҙыҡһыныуым алып килде мине бында. Киләсәктә, бәлки, йәйәләр ҙә эшләй башларбыҙ", - тине ул.

Тағы бер оҫта - тирмәләр һәм традицион башҡорт яндары эшләүсе, "Любизар"клубының әүҙем ағзаһы Ғәлинур Зарипов менән дә танышырға насип булды. "Бөгөнгө ярышта минең биш йәйәм "ҡатнаша". Минең яндарҙы һатып алған күптәр килә алманы", - тине ул. Ул шулай уҡ башҡорт янының күсмә тормош алып барған башҡа төрки ҡәүемдәрҙең янынан бер ни тиклем айырылып тороуын билдәләне:

"Башҡорт йәйәһе ҡыҫҡараҡ була. Ат өҫтөндә оҙон ян тотоп йөрөүе, унан атыуы ауыр, хатта мөмкин булмаған эш. Башҡорт уғы, ҡыҫҡара килә, ҡыҫҡара килә, ваҡыт үтеү менән 1,1 метр оҙонлоғона ҡалған. Унан ҡыҫҡараҡ яндар ҙа булған, әммә улар тиҙ һынған. Башҡорт йәйәһенең тағы бер үҙенсәлеге - уның ҡолағындағы ыңғырсағы. Был хәйләкәр ҡулайлама ҡыҫҡа янға оҙон уҡ һалып

**✓ *Мин башҡорттоң һыбай килеш уҡ атыу маһирлығын тергеҙеү тураһында хыялланам. Иртәме, һуңмы, беҙ быға ла киләсәкбеҙ. Ни өсөн тигәндә, башҡорт яугиры - атлы яугир.***



# ЙӨРӘГЕНДӘ...

## уҡ-һаҙаҡ та ята

атыу өсөн эшләнгән. Бөгөнгө сараға килгәндә, уны ойоштороуға беҙҙең клубыбыҙ ҙур өлөш индерҙе. Юлай Ғәлиуллин иһә, ойоштороу ғына түгел, ә ғәйәт ҙур сығымдарҙы ла үҙе ҡапланы. Мин 6 тирмәмде ҡороп ултырттым," - тине оҫта.

Тағы бер ҡатнашыусы, Учалы районы Әүешкүл ауылынан килгән тарих уҡытыусыһы Фәнүр Шаһиев та ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәре менән уртаҡлашты: "Быға тиклем үҙем эшләгән уҡ-һаҙағым менән туристар алдында сығыш яһай инем. Уғым сәпкә лә тейә, алыҫҡа ла осҡан һымаҡ ине лә бит, бында килеп, оҫталарҙың нисек уҡ атыуын күргәс, быға тиклем был һөнәр буйынса бер нәмә лә белмәгәнмен икән, тигән һығымтаға килдем. Башҡорт янынан атырға өйрәнеүемдең тәүге аҙымдарын атланым, тиергә була. Литванан килгән оҫталар бик матур файҙалы мәғлүмәт бирҙе," - тине. Шулай уҡ Ҡытайҙа Пекин университетында докторлыҡ диссертацияһы яҡларға әҙерләнеүсе Өфө егете Алишер менән танышыу ҙа фәһемле булды. Ҡытай студенттарына алдынғы мәғлүмәт технологиялары буйынса белем биреүҙән бушаған сағында уҡ атыу менән ҡыҙыҡһына икән йәш ғалим. Ул ошо ярышҡа өлгөрәйем, тип, йәйге ялын күптән хәстәрләп ҡуйған.

### Сабып барған килеш балдаҡҡа...

Финал уйындарында быға тиклемгә ете һынауҙы уңышлы үткән 7 ҡатнашыусы һыбай килеш сәпкә атырға тейеш ине. Даниил Вяткин, Салауат Юлбирҙин, Роберт Хәмиҙуллин, Рушан Хәсәнов (ул өҙәнгегә баҫып, бик матур сығыш яһаны, тип билдәләне ойоштороусылар), Хөрмәт Таһиров иң яҡшылар тип табылып, финалда көс һынашты. Ярыш ҡыҙғандан-ҡыҙҙы... Бына бер заман өс мәргән тороп ҡалды: быға тиклем Ҡырмыҫҡалы районында үткән уйында уҡ атыу ярышында ал бирмәгән Рушан Хәсәнов, Сибай ҡалаһынан Хөрмәт Таһиров һәм Омскиҙың "Служивые люди Сибири" хәрби-тарихи клубы ағзаһы Даниил Вяткин беренселек өсөн көрәшергә тейеш. Йәнә уктар һыҙғырышты, йәнә сәптәр тишкеләнде. Халыҡ араһында: "Йә, ҡунаҡ егетте уҙығыҙ", - тигән тауыштар ишетелеп-ишетелеп ҡалды. Ләкин оҙаҡ йылдар уҡ атыу менән шөғөлләнгән Омск уҙаманы башҡорт батырҙарынан мәргәнерәк булып сыҡты. Өфө районынан Рушан Хәсәнов - өсөнсө, Сибай ҡалаһынан Хөрмәт Таһиров - икенсе, Омск ҡалаһынан Даниил Вяткин - беренсе урын яуланы.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

***Зәки Әлибаев, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Яҙыусылар Берлегенең әҙәби тәнҡит бүлеге етәксеһе:*** Беҙҙең йәмғиәттә илһөйәрлек тәрбиәләнә торған һайланмыш әйберҙәр күптер, әммә уларҙың араһында иң-иңдәре бар. "Мәргән уҡсы" ярышын ошо исемлеккә идерергә була. Сөнки илһөйәрлекте ҡайһы ваҡыт бутап та ебәрәләр. Ә был фестивалдә ир-азамат тәрбиәләү техникаһы күҙгә күренеп тора. Мәргәнлек - ир-егеттәрҙең асылы. Уҡ атыуҙы беҙ ситтән үҙләштермәйбеҙ. Беҙҙең тарихыбыҙҙа ул алтын хәрефтәр менән яҙылған. 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт мәргәндәре хатта бөйөк Гетеның алдында уҡ атып күрһәткән. Европа тарафынан танылған беҙҙең мәргәнлек. Бөгөнгө фестивалдең Башҡортостанда, Уҡлыҡая эргәһендә үткәрелеүе иһә символик мәғәнәгә эйә. Ошо Уҡлыҡая, Ғафури ерендә башланған фестиваль киләсәктә олимпиада юғарылығына күтәрелһә, рухлы егеттәр тәрбиәләнәсәк. Миңә был ярышта Бөрйәндән йәш шағирә Розалия Зарипованың ҡатнашыуы ла оҡшаны. Башҡорт ҡыҙҙары бит яугирҙар сафында Парижға тиклем барып еткән. В. Зефировтың "Йәнтүрә хикәйәһе"н генә алайыҡ. Ир-егеттәр менән ярышып, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла күтәрелә икән, быға иғтибар итергә кәрәк. Бында ла рухтың юғарылығы сағыла. Бында түбәнлек, ваҡлыҡ юҡ. Беҙ - юғары халыҡ. Беҙ - "Урал батыр"лы халыҡ. Беҙҙең юғарылыҡты билдәләй торған сараларҙың береһе - ошо ярыш. Ошо кимәлде һаҡларға кәрәк. Шоуға әйләндерергә ярамай. Уҡ атыу беҙҙең халыҡтың тәбиғәтенә тап килеп тора. Халҡыбыҙ ғәҙеллек ярата. Бөгөн милли кейемдә йөрөгән ҡатнашыусыларға ҡарайым да, араларында бик рухлы таныштарым барлығын күреп, һөйөнәм. Мәҫәлән, думбырасы, ҡурайсы, композитор Илһам Байбулдин - рухыбыҙҙы танытыусы шәхестәребеҙҙең береһе. Сит илдәрҙән: Ҡытайҙан, Литванан килеүсе кешеләр башҡорт уғын ата...

Уҡлыҡаяға килгәндә иһә, мин был тау образын Салауат Әбүзәрҙең ижадынан беләм. Уның шиғриәтендәге Уҡлыҡая образы ошо сараға тап-таман тура килеп тора. Уны хәрби-тарихи-реконструкция итеп күҙ алдына килтергән хәлдә иһә, декорациялар бөтөнләй кәрәкмәҫ ине...

***Рафаэль Амантаев, Башҡортостандың халыҡ артисы, "Мәргән уҡсы" фестиваленең баһалама комиссияһы рәйесе:*** Уҡ-һаҙаҡ менән 5-6 йыл ғына шөғөлләнәбеҙҙер. Шөғөлләнә торғас, ҡайҙа ниндәй фестивалдәр ойошторолоуы менән ҡыҙыҡһына башланыҡ. "Төньяҡ амурҙары" сүрәтендә хәрби-тарихи реконструкцияларҙа сығыш яһаған сағыбыҙҙа беҙҙең уҡ-һаҙаҡтар менән ҡыҙыҡһыныусылар күплегенә шаһит булындыҡ. Традицион йәйәләрҙән атыу буйынса фестивалдәр уҙғарыла башлағас, Юлай Ғәлиуллин менән ике фестивалгә - Төркиәгә һәм Ҡытайға барып ҡайттыҡ. Уларҙың нисек үткәрелеүен күрҙек. Унда донъяның төрлө илдәренән килгән уҡсылар менән таныштыҡ, улар беҙгә һәр төрлө сараларға саҡырып, хаттар яҙа башланы. "Ваҡыт, аҡса сарыф итеп, әллә ҡайҙа ситкә юлланғансы, әйҙәгеҙ, бындай фестивалде үҙебеҙҙә ойоштораыйыҡ", - тигән һығымтаға килдек. "Әммә был ярыштар мотлаҡ башҡорт ерлегенә таянып ойошторолорға тейеш", - тинек һәм башҡорт яугирҙары ниндәй күнекмәләр үткән, шуларҙы тергеҙергә тырыштыҡ. Тәүге аҙымбыҙ уңышлы ғына булды бит. Был беҙҙе артабанғы аҙымдарға рухландыра...

***Азат Ҡужин, Польшала йәшәүсе милләттәшебеҙ, "Мәргән уҡсы" фестиваленең баһалама комиссияһы ағзаһы, фестивалдең логотибы авторы, рәссам-реконструктор:*** Беҙ бөгөнгө байрамдың әһәмиәтен әле аңлап та етмәйбеҙҙер, бәлки. Ни өсөн тигәндә, әгәр ҙә уҡ атыу традицияһы терелеп китһә, был хәл баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтле ваҡиға буласаҡ. Егеттәребеҙ күпләп ошо спортҡа киләсәк. Мин башҡорттоң һыбай килеш уҡ атыу маһирлығын тергеҙеү тураһында хыялланам. Иртәме, һуңмы, беҙ быға ла киләсәкбеҙ, тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, башҡорт яугиры - атлы яугир. Ҡатнашыусылар бөгөнгө сарала иҫ киткес ҙур тәжрибә алды. Интернет, китап ярҙамында уҡ атырға өйрәнеп ҡарарға була ул, әммә иң яҡшыһы - үҙ ҡулың менән тотоп ҡарап өйрәнеү. Оҫталыҡҡа һине тәжрибәле уҡсы өйрәтә икән, был - алтынға бәрәбәр. Мин үҙем "флу-флу" исемле ярыш уғын эшләү буйынса оҫталыҡ дәресе үткәрҙем.

Быйыл май айында Грюнвальд яланындағы һуғышҡа арналған уҡсылар ярышы үтте. Был һуғышта Туҡтамыш хандың улы, буласаҡ Алтын урҙа ханы Йәләлетдин дә үҙ ғәскәре менән ҡатнашҡан. Тимәк, уның ғәскәре составында башҡорт яугирҙары ла булған, тигән һүҙ. Ҡаршы яҡта тәре йөрөтөүсе рыцарҙар һуғышҡан. Майҙа үткәрелгән ярышҡа ғариза биреү иғлан ителеү менән ярышта ҡатнашыусылар исемлеге 13 секунд эсендә билдәле булған. Бер танышымдан: "Ә һин ниңә ҡатнашмайһың?" - тип һорағайным, ул теркәлеп өлгөрмәүен әйтте. Бына бит нисек унда...

Мин Башҡортостандан 5-6 егетте Швециялағы бик шәп уҡсының мәктәбендә шөғөлләндереп алып ҡайтыу хыялы менән янам. Егеттәр атыу буйынса оҫталыҡтарын камиллаштырыр ине.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙең традицияларыбыҙ ни тиклем бай булһа ла, Европа уҡсылары менән Башҡортостан уҡсылары араһында айырма ер менән күк араһы. Иң шәп уҡсылар - Венгрияла. Унан һуң Польша килә. Польшала аҙна һайын ошондай типтағы тиҫтәнән артыҡ сара үткәрелә. Хатта сараларҙа ҡатнашҡан өсөн аҡса түләү ҙә ҡаралған. Ни өсөн тиһәгеҙ, әйтәйем: Польшала хәрби-тарихи реконструкциялар үткәреү дәүләт тарафынан контролдә тотола. Хатта тарих факультетында реконструкторҙар әҙерләү кафедраһы ла бар.

***Ирмантас Вишняускас, "Мәргән уҡсы" фестиваленең баһалама комиссияһы ағзаһы, Вильнюс, Литва:*** Был фестивалдең ойоштороусылары менән Төркиәләге фестивалдә танышҡайныҡ. Шул уҡ йылда Ҡытайҙа ла күрештек. Шунан башланды ла инде беҙҙең дуҫлыҡ. Улар минең дуҫтарым менән дә таныш. Уҡсылар күп түгел бит, улар бер-береһен белеп тора. Мин уҡ атыу менән осраҡлы рәүештә шөғөлләнә башланым. Бала саҡтан Робин Гуд тураһында фильмдар ҡарап үҫтек, урмандарҙа үҙебеҙ эшләгән яндар менән "байҙарҙы таланыҡ". Тарихты һағыныу хисе ҡанда ла барҙыр инде.

Башҡортостанға тәүге тапҡыр килеүем. Бында барыһы ла оҡшай: тәбиғәт тә, кешеләр ҙә... Дуҫтарҙы күреп, улар менән аралашып, ләззәтләнәм. Быға тиклем, бөгөнгө фестивалде ойоштороусыларҙы белмәгән сағымда, бер генә башҡорт - Төркиәнең баш ҡалаһы Стамбулда йәшәүсе башҡорт егете менән таныш инем. Ул миңә башҡорт халҡы тураһында күп һөйләй торғайны. Бына әле килеп был халыҡ менән, ул йәшәгән төбәк менән танышыу бәхетенә лә ирештем. Тәбиғәт үҙенсәлектәренә килгәндә... Ер ҙә, ағастар ҙа, үләндәр ҙә - беҙҙәге һымаҡ уҡ, шул уҡ йәшеллек, шул уҡ хозурлыҡ. Ләкин беҙҙә йылға-күлдәр күберәк, Балтик диңгеҙе арҡаһында инде уныһы. Уның ҡарауы, һеҙҙә ҡояш сағыуыраҡ яҡтырта. Беҙҙә һыу быуҙары бер туҡтауһыҙ күккә күтәрелгәнгә күрә, күкте монар ҡаплап тора. Күк йөҙө ап-аяҙ көндәр бик һирәк була. Башҡортостан мул ҡояшлы ил булып хәтеремдә ҡаласаҡ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мәҡәләне Юлай Ғәлиуллиндың һүҙҙәре менән йомғаҡлағы килә. Мин унан: "Фестиваль артабан дауам итәсәкме, һеҙ унан ҡәнәғәт ҡалдығыҙмы?" - тип һорағас, ул: "Бик ҡәнәғәтмен. Өс йыл хыялда ғына йөрөткән проектым тормошҡа ашты. Бөтә ҡатнашыусыларға ла оло рәхмәтемде еткерәм. Бөтә ҡыҙыҡһынған кешеләргә лә - рәхмәт. Эшемдең дөрөҫ йүнәлештә икәнен аңланым. Киләсәктә фестивалде үҫтерергә, географияны киңәйтергә кәрәк, тигән уйым бар", - тип яуапланы.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**



**✓ Ниндәй бәхетле бөгөн Зәлифә! Йылдар буйы көткән кешеһе ҡул һуҙымы арала ғына ултыра. Бер өҫтәл генә айырып тора уларҙы. Ошо осрашыуҙы күпме көттө ул, ире менән булған саҡтарында ла бары тик Ғаязы хаҡында уйланы.**




Лена ХӘЙРУЛЛИНА

# АҘАШҠАН ХЫЯЛ

(Хикәйә)

-Аһ, Зәлифә, һинме?..

Тротуар буйлап йүгерә-атлай китеп барыусы ҡатын, таныш тауыш ишетеп, ҡапыл туҡтап ҡалды. Уға өндәштеләр түгелме? Кит, булмаҫ. Яңылыш ишеткәндер. Бында уны кем белһен? Мәркәз тиклем ерҙә, анау саҡлы кеше араһында әллә кем уны шәйләп ҡалған, ти. Аҙ, ти, бында Зәлифәләр! Быға инаныр өсөн ул алға ынтылды.

- Зәлифәү, тим, ишетмәйһеңме ни? Туҡта! Һин бит был?

- Эйе, мин... - тип әйтергә лә өлгөрмәне, уның янына әҙмәүерҙәй бер ир килеп баҫты. Зәлифә һиҫкәнеп китте.

- Ғаяз, әллә һин инде? Хоҙайым! - Көтөлмәгән осрашыуҙан бер аҙ башы әйләнеп киткән ҡатынҡай еңелсә сайҡалып ҡуйҙы. Аяҡ быуындары тотмағандай итте. Дарҫлап типкән йөрәген тынысландырып, тын алышын рәткә һалыу өсөн бер-нисә секунд ваҡыт етте.

- Тиҙ генә таныманың мине, ивет? Ә мин һине шундуҡ таныным. Бынау пәлтәндән таныным, - тине ир. - Теге саҡта ла ошоно кейгәйнең бит, дүрт йыл элек, тим...

Пальтоһының оҙаҡ кейеүҙән ҡырыла башлаған ең остарын йәшерә-йәшерә, Зәлифә ҡаршыһында торған иргә йылмайҙы. Уңайһыҙланды үҙе. Быны һиҙҙермәҫ өсөн ян-яғына ҡаранды, күҙҙәрен ситкә алды. Ниндәй ҡыйын хәлгә ҡалды әле ул? Уйламаған ерҙән. Ғаяз һөйләгән ул осрашыу икенсе төрлөрәк булғайны, дүрт йыл бигүк күп булмаһа ла, бик аҙ ҙа ваҡыт түгел, унда Зәлифә үҙе лә йәшерәк, матурыраҡ, пальтоһы ла яңыраҡ ине. Күңел торошо ғына бөгөнгөләй булғандыр: ошо Ғаяз менән юлдары айырылғандан бирле бер генә төрлө кисерештәр менән йәшәй. Үкенестәр менән. Хәйер, уныһы үҙенән башҡа кемгә кәрәк инде? Шул бөтмәҫ үкенестәре нисәмә йылдар буйына йәнен ҡамсылай. Ятһа ла, торһа ла шул бер уй мейеһен сүкей: "Ниңә улай килеп сыҡты әле? Ни эшләп көтмәне һуң уны Ғаязы? Ярата ине бит..."

- Әйҙә, машинаға ултыр, берәй ергә инеп, тамаҡ ялғап алайыҡ, - Ғаяз ҡатынды биленән ҡосаҡлап уҡ алды. Ашығыуын төрлөсә аңлатып аҡланған Зәлифәне, ай-вайына ҡуймай, етәкләп тигәндәй, тығыҙ теҙелешкән машиналар рәтенә алып китте.

- Ана, күрәһеңме, иң ситтәгеһе минеке. Ҡыҙылдың аръяғында торғаны.

Ҡатын ҡояшта ялтлап ултырған, еүеш асфальт төҫөндәге джипты күреп, баш ҡаҡты.

- Бына ул минең танк. Әйҙә, ултыр!

Тар итәген йыртып ҡуйыуҙан ҡурҡып, машина янында тапанған Зәлифә, ярҙам көткәндәй, тирә-яғына, унан Ғаязға ҡарап алды.

- Номерың да үҙенсәлекле икән. Ә ни эшләп 111?

- Сөнки мин һәр ерҙә лә, һәр эштә лә, һәр ваҡыт беренсе булырға яратам. Спецзаказ. Һинең дә беренсең инем бит. - Ир кәүҙәһен уйната биреп, йылмайып ҡуйҙы.

- Ҡыҙыҡ икән, - тигән булды ҡатын, - ә мин булһам, 777 тигәнен алыр инем. Изге һан да инде. Бигерәк тә мосолман өсөн. Ете тажлы ҡурай, ете ырыу...

- О, Зәлифә! Һин бер ҙә үҙгәрмәгәнһең икән. Ниндәй ҡурай? Ниндәй ырыу? Юҡ менән булмасы! - Ир ризаһыҙлыҡ белдереп, ҡул һелтәне.

- Ә һин үҙгәргәнһең... - Машинаның йомшаҡ ултырғысына менеп ҡунаҡлаған ҡатын был һүҙҙәрен үпкәләберәк әйтте. - Йә, ярай, улай оҡшамағас, икенселәйтеп әйтәм. Ҡасандыр бер, әгәр ҙә һин китеп юғалһаң, ете тау, ете диңгеҙ артынан табасаҡмын, тигәйнең. Иҫләйһеңме шуларҙы, Ғаяз?

Ир уның әйткәндәрен ишетмәне. Әллә ишетмәмешкә һалышты.

- Машинамды әйтәм, һиңә оҡшаймы? Ҡарале, бында хатта йәшәп тә булыр ине. Бөтә уңайлыҡтары бар. Арты ла, ана, ниндәй иркен.

Кәүҙәһен яртылаш бороп, машинаның артын байҡаған Зәлифә, тубыҡтарына ҡайнар устар ҡағылыуын тойоп, һиҫкәнеп китте. "Их, яратам да инде үҙен!" тип ҡуйҙы Ғаяз. "Мин дә!" тип әйтеүҙән саҡ тыйылып ҡалды ҡатын, әллә үҙенә, әллә ошо танкка төбәлеп әйтелгән һүҙҙәрҙе ныҡлап төшөнөп етмәүе генә туҡтатты уны. "Үҙен әйтәләр. Машинаны яратып булалыр шул? Тимер киҫәген..." Был уйҙары эсенә йылы йүгертте.

- Вот так встреча! Өфө һынлы Өфөлә һине осратыуымды әйтәм. Үәт әй! - Тел шартлата-шартлата машина тәҙрәһен һөрткән Ғаяздан күҙен алманы Зәлифә. Йөрәге урынынан ҡуҙғалғандай булды. Күпме көткән осрашыу бит был! Ғүмере буйы көткән, ғүмере буйы өҙөлөп яратҡан кешеһе, беренсе мөхәббәте уның янында бөтөрөлә. Быға тиклем уларҙы аймылыш иткән яҙмышына үпкә һаҡлап йәшәне Зәлифә, әле килеп, әйтерһең дә, бар үпкәрәнйеүҙәре ыуалып юҡҡа сыҡты. Һүнеп барған өмөт-хыялдар баш ҡалҡытты, нисәмә йылдар күңеле төбөндә быҫҡып ятҡан хистәре, бер йылы һүҙ, яғымлы ҡараштан гөлтләп ҡабынырға тора. "Әйҙә, киттек минең менән, һаман һине яратам", тиһә, бер минут та уйлап тормайынса, сығам да китәм. Тормошто яңынан башлайым. Бары ошо кеше менән бәхетле булырымды беләм. Күпме ғүмер уны көтөп йәшәнем. Яҙмыш бүләгелер, бөгөн юлыма үҙе килеп сыҡты бит...

Башында зырлап әйләнгән ошо уй-хыялдарынан "Иремде һөймәнем дә, бынан аръяғына инде һөйә алмам. Йәшәлде инде шунда. Аптыраған көндән. Бер барғас. Йәшәгәс, балалар булды."

- Кейәүҙәме ул һин, Зәлифә? - Уйҙарын Ғаяз бүлде.

- Эйе, - тине ҡатын ишетелер-ишетелмәҫ, теләр-теләмәҫ кенә. Был һүҙен әллә ҡайҙан төптән, көсәнеп йолҡоп алғандай итеп әйтте. - Кейәүҙәмен. Ун йыл инде. Ике ҡыҙым бар. Миләүшә менән Нурия. Ҙурына - биш, кесеһе ике йәштә. Төҫкә аталарына тартҡандар, ә холоҡтары - минеке, - күңеленә ғәзиз исемдәрҙән ҡапыл талпынып ҡуйҙы әсә кеше.

Телефон төймәһенә бер туҡтауһыҙ баҫып, ниҙер эҙләп маташҡан Ғаяз башҡаса һорауҙар биреп торманы. "Ҡарале, минең турала бер ни белмәй үҙе. Ҡыҙыҡһынмаған, тимәк. Ауылдағы әсәһенән һорашһа ла, һөйләп бирер ине. Хатта тормошломо, юҡмы икәнемде лә яңы һорап ултыра. Ә мин иһә уның бар тормошон энәһенән-ебенәсә белеп йәшәнем. Шатлығына ҡыуандым, хәсрәтенә көйөндөм. Ә ул... Йә, ярай, - тип тынысландырҙы үҙен ҡатын, - ваҡыты булмағандыр. Бынауындай машиналарҙа йөрөр өсөн эшләгән дә эшләгәндер. Йә булмаһа, юрый һорайҙыр. Иренән айырылып-фәлән ҡуймағанмы, яңғыҙ түгелме тип өмөтләнәлер. Һаман онота алмайҙыр..."

-Ҡатынға смс ебәрҙем. Борсолмаһын, тип. Минһеҙ бер минут та тора алмай ул. Һәр аҙымым тикшереүле, - ир телефонын һүндереп, кеҫәһенә тыҡты.

"Ышанмайҙыр" тип әйтеүҙән саҡ тыйылып ҡалды Зәлифә, "Яраталыр" тигән булды. "Бына мин Уралдың ҡайҙа йөрөгәнен уйлап та биргәнем юҡ. Ышанам да. Яратмайым да..." Был һүҙҙәрен тышҡа сығарманы ҡатын, үҙ алдына ғына әйтеп, ауыр көрһөнөп ҡуйҙы.

Ә танк алға елдерҙе. Ҡала урамдарында ла трассалағы кеүек ҙур тиҙлек һаҡлауына юл буйы Ғаязды әрләп барҙы ҡатын. Эстән генә. Ҡысҡырып шелтәләргә ҡыйманы. Дөрөҫөрәге, ҡурҡты. Уның күҙҙәрен сытырлатып йомоп, ишек тотҡаһына йән-сытырман йәбешеүен күргән ир ҡысҡырып көлдө. "Барыһы ла яҡшы, - тине ул, - был машина уттан да, һыуҙан да, юлдан да ҡурҡмай".

"Үҙе тураһында ғына уйлай икән был. Ә бүтәндәр? Уларҙың ғүмере менән иҫәпләшмәй түгелме? Урал улайтмаҫ ине. Юлда бик тәртипле, ипле генә йөрөй ул, ҡағиҙәләрҙе бер ваҡытта ла боҙмай. Үҙенде генә түгел, башҡаларҙы ла уйларға, хөрмәт итергә кәрәк, тип йыш ҡабатлай. Юл хәлен яҡшы белә. Юл һалыусы бит үҙе. Нисәмә саҡрымдар уның тырыш ҡулдары менән һалынған. Эшен ярата. Мин һалған юлдар кешеләрҙе бер-береһенә илтһен, зарығып көткәндәр осрашһын, ҡауышмай ҡалғандарҙы ҡауыштырһын, тип ебәргән була үҙе. Ә бына бөгөн килеп ошо юлдар ҡатынын икенсе ир менән осраштырғанын белһә, ни эшләр ине икән?"

Зәлифәнең эсе бошоп ҡуйҙы. Быға саҡлы Уралының тойғо-кисерештәренә бөтөнләй иғтибар итмәй йәшәүен аңлап, аптыраны. Бүтән ирҙәр менән сағыштырып ҡарағаны ла булмаған бит хәләлен. Уйында ғына булһа ла Ғаяз менән дә сағыштырмаған, һәр икеһен айырымлап ҡына ҡараған, Уралы ир уртаһында, ә Ғаяз... Ә Ғаязын тотош донъя, юҡ, улай ғына ла түгел, шул донъяның күсәре, кендеге итеп күргән.

Әллә ни эшләне ҡатын. Әлеге мәлдә, әйтерһең дә, уның күңелендә ике төрлө Зәлифә ултыра. Тартҡылаша, бәхәсләшәләр, әммә бер генә төрлө фекергә килә алмай йонсойҙар.

- Мин ҡайтайым инде, Ғаяз, - тигән булды ул, аңын йыйырға тырышып, - өйҙәгеләр көтәләр. Автовокзалға алып барсы.

Ирекәй ялт итеп Зәлифәгә ҡараны. Сәғәтенә күҙ һалды.

- Шылтыратып әйт, эшем бөтмәне, иртәгәлеккә ҡалырға тура килер, туғандарымда йә таныштарымда ҡунам, тиген. Вокзалға иртәгә алып барырмын. Бөгөн көндө бергә үткәрәйек.

- Өфөлә туғаным да, танышым да юҡ. Ирем быны яҡшы белә, - Зәлифә, эштән асығып, өшөп ҡайтҡан Уралын, уны көтөп ултырған ике балаһын уйлап, татлы хыялынан баш тартырға әҙер ине шул саҡ.

- Йә, ярай инде, Зәлифәкәй, көн дә осрашмайбыҙ ҙа һуң. Алдап тор инде шунда берәй нәмә тип...

Машина эсендә көсөргәнешле тынлыҡ урынлашты. "Эйе шул" тип уйланы ҡатын, көн дә түгел, бөтөнләй осрашҡаныбыҙ юҡ ине бит быға саҡлы. Теге саҡ ауылда, Ғаяздың атаһын ерләгәндә генә күрешеп ҡалғайнылар. Ғәзим ағай Зәлифәнең уҡытыусыһы булды, уны һуңғы юлға оҙатырға тотош синыфтары менән барғайнылар. Ул саҡ менән был саҡ араһында оҙаҡ дүрт йыл ваҡыт ята инде. Оҙаҡ дүрт йыл...

Ғаяздың машинаһы зыйлап барып бер кафе алдына туҡтаны. Ыҡсым ғына өҫтәл артына барып ҡунаҡлағас, Зәлифә тирә-яғына күҙ һалды. Талғын ғына ағылған көй уның ҡолағын иркәләне, көршәктәге гөлдәр, өҫтәлгә ябылған ҡупшы эскәтер, матур һауыт-һаба барыһы ла оҡшай уға. Ҡатын үҙен сихри бер донъяға эләккәндәй хис итте. Бындай урындарҙа бөтөнләй булғаны юҡ уның. Өй-эш-өйгә көйләнгән тормошо тамам ялҡытҡысҡа әйләнгәйне инде. Ярай әле Ғаяз осраны, бындай матурлыҡты ғүмерҙә лә күрмәҫ ине атыу. Өйөндә лә бертөрлөлөк хөкөм һөрә. Уралы арманһыҙ булып эшенән ҡайта ла, ҡайҙа ятһа, шунда йоҡлап китә. Аҡса эшләйем, донъя көтәм, тип, көн-төн тырыша, шул рәүешле көндәре төнгә, төндәре көнгә ялғана. Шул да булдымы тормош? Ялҡытты!

Ул арала официант ҡыҙ өҫтәлгә тәмле ризыҡтар теҙҙе. Ҡаршыһына килеп ултырған Ғаязға тәү күргәндәй һоҡланып һәм яратып ҡараны Зәлифә. "Бына, исмаһам, ир, - тип уйланы ул, - кейгән костюмы, таҡҡан галстугы ҡайһылай килешә үҙенә. Сөм-ҡара сәстәре килешле итеп артҡа таралған, ҡулындағы сәғәте ҡояшҡа ялт-йолт итеп ҡала, ҡыйбатлы таштар менән биҙәлгән. Ә һөрмәле күҙҙәрендә һаман да, элеккесә, ниндәйҙер бер сер һаҡлана кеүек. Ниндәй бәхетле бөгөн Зәлифә! Йылдар буйы көткән кешеһе ҡул һуҙымы арала ғына ултыра. Бер өҫтәл генә айырып тора уларҙы. Ошо осрашыуҙы күпме көттө ул, ире менән булған саҡтарында ла бары тик Ғаязы хаҡында уйланы, ҡулдарынан тотоп, күкрәгенә башын һалғыһы, наҙлы һәм йән иреткес һүҙҙәр ишетеп иркәләнгеһе килде. Бәхетле булғыһы килде.

- Ғаяз Ғәзимович, сдача, - Зәлифәнең уйҙарын яндарына килеп баҫҡан официант бүлде.

- Кәрәкмәй, үҙегеҙгә булһын, - ир көшөлөгөн түш кеҫәһенә тыға-тыға, ҡаршыһында ултырған ҡатынға өндәште.

-Бында мине барыһы ла белә. Килеп инеүем менән йүгерешергә тотоналар. Ҡайҙа

ултыртып, ни менән һыйларға белмәй аптырашалар, бахырҡайҙар. Хәйер, бында ғына түгел, бөтә ерҙә лә шулай инде. Яраталар, тимәк! Хөрмәт итәләр!

Аҙаҡҡы һүҙҙәрен ул айырым бер ғорурлыҡ менән әйтте. Уларҙы күрше өҫтәл артында ултырыусылар ҙа ишетерлек итеп, тағы бер ҡат ҡабатланы. "Һине яратмау мөмкин түгел", тип әйткеһе килһә лә, Зәлифә һүҙҙе башҡа яҡҡа борҙо.

- Ҡайҙа, кем булып эшләйһең, Ғаяз? - Уның ҙур кеше икәнен белә ине ул, тик үҙенән ишеткеһе килеп кенә һораны. Ә уныһы иһә, шуны ғына көткәйндәй, түрәләргә генә хас тонға күсеп китте:

- Начальник булырға хыялландым бит мин. Әлеге көндә үҙ бизнесым бар. Үҙемә эшләйем. Дөрөҫөрәге, эшләтәм. Бүтән алйоттар кеүек, хөкүмәткә бил бөкмәйем. Ә һин?

- Балалар баҡсаһында тәрбиәсемен.

Бығаса яратып эшләгән эшенән, һөнәренән тәү тапҡыр оялып ҡуйҙы ҡатын. "Бизнесмен һәм тәрбиәсе. Бер ниндәй уртаҡлыҡ юҡ..." Ир башын артҡа ташлап көлдө:

- Әле бармы ни ундай һөнәр? Тәрбиәсе, имеш. Ҡыҙыҡ. Бөгөнгө заман балалары тыуғанда уҡ институт бөтөп тыуа, уларҙы тәрбиәләп ултырырға кәрәкмәйҙер, тием. Юҡты бушҡа ауҙарып йөрөйһөң инде, Зәлифәкәй! Ваҡыт әрәм итеп. Үҙеңә генә эшләргә, үҙеңде генә ҡайғыртырға кәрәк, аңла шуны. Бына минең кеүек! Бизнес асырға! Бизнесмен булырға!

Зәлифәнең бер ҡасан да үҙен былай меҫкен итеп тойғаны юҡ ине. Яҡлау эҙләгәндәй, йәһәт кенә әйләнә-тирәһенә күҙ йүгертте.

- Мин бит шул буласаҡ бизнесмендарҙы тәрбиәләйем, - тине ул, - артистәр, уҡытыусылар, банкирҙар, киләсәктә кеше ғүмерен һаҡлап ҡалыр табиптар ҙа миндә тәрбиәләнә. Ә һинең балаларың бармы һуң, Ғаяз?

- О, юҡ! Нимә һөйләйһең һин, Зәлифүш? Ундай мәшәҡәткә батып ултырырға башыма тай типмәгән әле. Аҡса эшләп ҡалырға кәрәк, матурым, аҡса! Ҡатыным да фигураһын боҙоуҙан ҡурҡа. Үҙебеҙ өсөн йәшәйбеҙ. Рәхәтләнеп театр, ресторандарға йөрөйбеҙ, сит илгә сығабыҙ...

Ғаяз тағы әллә ниҙәр хаҡында һөйләне, тик Зәлифә уны ишетмәне. Ул уйҙарында үҙ-үҙе менән алышты, дөрөҫ йәшәлмәгән тормошона һыҙланды. Капыл ғына, ошо минутынан алып бизнесмен ҡатыны булғыһы, мул аҡса менән ҡыйбатлы кибеттәр ҡыҙырғыһы, театр, ресторандар күргеһе килеп китте. Бала йүргәге йыуып, иренең гудронға буялып ҡатҡан кейемдәрен таҙалап үткән ғүмерен йәлләп, эсе бошто. "Ә ни эшләп Урал бына Ғаяз кеүек түрә түгел? Булдыра алмай, тимәк. Шуға ла, ана, саң эсеп, ҡояшта янып юл түшәй. Изге эш, имеш. Юҡты. Унан башҡа ла табылыр ине әле битумға болғанып йөрөүселәр..."

- Зәлифүк, әйҙә берәй театрға алып барам үҙеңде. Бер ни күрмәй йәшәйһеңдер, атыу. Унан берәй ҡунаҡханала номер алам. Бөгөн ҡайтмайһың бит инде?.. - Ғаяздың тауышына һиҫкәнеп китте ҡатын. Театр! Студент сағынан бирле булғаны юҡ бит. Ихлас ризалашты. Спектакль барышында ирҙең бер өҙләкһеҙ шылтыраған телефонына ла, уның йыш-йыш сәғәтенә күҙ һалыуына ла иғтибар итмәскә тырышты Зәлифә. Уға рәхәт ине.

Ҡупшы ҡунаҡхана бүлмәһендә үткән төн дә уның бер төндәренә лә оҡшамағайны. Уға шулай тойолдо. Ысын бәхеттең татлы тәмен дә тап ошонда татығандай булды. Йән һөйгәне ҡосағында. Күптән донъя мәшәҡәтенә генә сумып көн иткән ҡатынға барыһы ла иҫ киткес тәьҫир итте. Иртәнге йоҡоһонан уҡ һағынып торғайны Ғаязын. Бығаса Уралының: "Йоҡомдан торғансы уҡ һағынам үҙеңде, эштән дә юҡҡынып ҡайтам, хатта янымда сағыңда ла һине һағынып йәшәйем", - тигән һүҙҙәрен бер ҙә ысынға алғаны юҡ ине. Ысын һағыныуҙың ни икәнен белеп тә бөтөрмәгән булған бит, хыялый! Әле килеп аңланы.

- Миңә ҡайтырға кәрәк! Кәләш шылтырата, - Ғаяз һикереп тороп кейенергә тотондо. - Тун ҡарарбыҙ ти ине, онотҡанмын бит...

- Яратаһыңмы? - Көтөлмәгән был һорауҙан ир заты аптырашта ҡалды. - Кемде?

- Ҡатыныңды.

"Уның менән йәшәһәм дә, һаман һине яратам" тигән һүҙҙе көткән Зәлифәне ишеткән яуабы бөтөнләй шаңҡытты.

- Ниндәй яратыу, Зәлифуш? Юҡ бит ул яратыу. Мөхәббәт тигәндәре лә юҡ. Кешеләрҙе ҡуш инде юҡ-бар уйлап баштарын ҡатырырға. Күберәк аҡса эшләү, мал табыу тураһында уйлаһаҡлар, арабыҙҙа байҙар күберәк, ә фәҡирҙәр бөтөнләй булмаҫ ине...

"Бына һин дә дүрт йыл буйы бер пәлтәлә йөрөмәҫ инең..." - былары ҡатындың үҙе хаҡында эсенән уйлаған уйҙары ине.

Ғаяз көҙгө алдында бөтөрөлдө:

- Ә ҡатын-ҡыҙға килгәндә, - тине ул, - улар күп ул миндә, Зәлифәкәй, бөтәһен дә ярата башлаһаң, яратыуың етмәҫ. Йә, ярай, мин киттем. Хуш! Аҫҡысты тапшырырға онотма!

- Ғаяз!..

Шап итеп ябылған ишек артында аяҡ тауыштары ғына ишетелеп ҡалды. Карауатта һеңгәҙәп оҙаҡ ятты ҡатын. Биттәре, муйыны буйлап аҡҡан күҙ йәштәрен тыйырға теләмәне. Аҡһындар әйҙә. Күптән былай илағаны, ғәрләнгәне юҡ ине уның. Уралы ошолайтып сығып китһә лә енелерәк булыр ине, сөнки күңелендә Ғаязға булған һөйөүе, уның ҡасан да булһа әйләнеп килеренә өмөтө тере ине бит. Әле иһә бер ни ҡалманы. Йөрәген йолҡоп алып киттеләр. Хистәрен тапап, үҙен мыҫҡыл итеп.

Ауыр уйҙарынан телефон тауышы араланы. Иренән смс-хәбәр икән. "Белһәң ине нисек һағындым!" Бығаса уның ошондай смстарын яуапһыҙ ҡалдыра торғайны. Әле ошо бер-нисә һүҙ уға тереһыу кеүек булды. Ҡалтыранған ҡулдары менән яуап яҙҙы: "Мин дә!" Ҡыҫҡа ғына ошо хәбәр бығаса тәңгәл генә барып та тоташа алмаған ике юлды бергә ҡушмағанда ла, киҫештерҙе...

Ҡунаҡхананан сыҡҡас, тупһаһында оҙаҡ тапанып торҙо ҡатын. Нисәмә йылдар буйы күңел түрендә һаҡлап йөрөткән хистәренән төңөлгәйне инде. Ымһындырып, үҙен бөтөнләй сит тарафҡа әйҙәп, ире менән араларын алыҫлаштырып торған хыялын аҙаштырып, Зәлифә ары атланы...

*АФАРИН!*

# ТӘҮБӘ

РӘСӘЙ КИНОҺЫ ЙЫЛЫ
2016
ГОД РОССИЙСКОГО КИНО



**Башҡорт кинорежиссеры яҡташым Вилүрә Иҫәндәүләтованың "Тәүбә" тип аталған документаль фильмын ҡабат-ҡабат ҡарап сыҡҡас, ошо хаҡта үҙемдең фекеремде гәзит уҡыусыларға ла еткерергә булдым. Быйылғы "Рәсәй киноһы" йылы айҡанлы күрһәтелгән фильмдар араһындағы иң ныҡ тәьҫирләндергән әҫәр тураһында өндәшмәй ҡала алмайым.**

Халҡыбыҙҙың иманға йөҙ бороуы һөйөнөслө. Тап бына шундай маҡсат менән төшөрөлгән был фильмды ла тыныс ҡына ҡарау мөмкин түгел. Ә иң мөһиме - ул берәй яҙыусы, йә иһә режиссерҙың уйлап сығарған фантазияһы түгел, ә ысынбарлыҡ! Беҙҙең дәүер кешеләре, халҡыбыҙ өсөн иң-иң кәрәк булған проблеманы алғы планға ҡуйып күтәреп сыҡҡан Вилүрә.

Ниндәйҙер бер ауыр енәйәт өсөн оҙаҡ йылдарға иркенән мәхрүм ителеп, төрмәнән сыҡҡас, ауылына ҡайтып, өр-яңынан тормош башлаған Әхәт исемле яҡташыбыҙ хаҡында был кино. Төрмәнән ҡайтҡас та, эш юҡлыҡҡа һылтанып, эскелеккә бирелеп, йә иһә һаман да енәйәт ҡылыуын дауам итеүсе ҡайһы берәүҙәрҙән ҡырҡа айырмалы, яҡташыбыҙ, ғаилә ҡороп, артабан тыуған төйәгендә йәшәргә ҡарар итә. Һәммә эштәрҙән ҡурҡмаған көслө рухлы был кеше үҙ хужалығын төҙөп, етеш кенә ғүмер итә башлай. Төрмә рәшәткәләре артында саҡта уҡ Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәте менән рухы нығынған була уның. Ул ошо фани донъяла Аллаһы Тәғәлә тарафынан һәммә кеше өсөн бойоролған иң тоғро юлға баҫа. Раббыбыҙ алдында тәүбә итеп, иман килтерә, йәғни Ислам динен ҡабул итә. Изге Ҡөрьән Кәрим ҡушҡанды үтәгән, һәммә кеше өсөн мотлаҡ булған намаҙ-ураҙаларын ҡалдырмаған ысын мосолман булып ҡайтып инә ул ауылға. Оҙаҡламай уның хатта ауылда имам вазифаһын да атҡара башлауы күптәрҙе ғәжәпләндерә. Тотҡонлоҡ дәүерендә дин ғилемен ныҡ ҡына өйрәнгән, уның асылына төшөнгән Әхәт һымаҡ башҡа кеше табылмай ауылда. Күп ауылдаштары баштараҡ, әлбиттә, уға ҡырын ҡарай. Әммә ҡаҡшамаҫ рухлы мосолман башҡаларҙың бындай мөнәсәбәтенә иғтибар итмәй, оло сабырлыҡ ҡыла, ул ғына ла түгел, бүтәндәрҙе иманға өндәй. Әкренләп оло хәҡиҡәтте аңлаусы кешеләр ҙә табыла, дингә килеүселәр арта төшә. Әхәттең хәләл ефете Зөлфиә ханым да дин ҡабул итеп, намаҙға баҫа. Бына шундай таң ҡалырлыҡ мосолман яҡташыбыҙға, уның ҡатынына һәм бәғзе ауылдаштарына, айырыуса ошо фильмды ҡуйған режиссерға ҡарата оло ихтирам тойғоһо уята был фильм.

Ҡатмарлы яҙмышлы кешенең тормош юлын сағылдырған бындай фильмды төшөрөү режиссер өсөн һис тә еңелдән булмағандыр. Тиҫтә йылдар тирәһе тотҡонлоҡта булып, күптән түгел генә азат ителгән кешенең үҙе менән уртаҡ тел табыу ҙа уға, ай-һай, ауыр булғандыр, тип фаразлайым. Фильм геройының уның шәхси тормошон бөтә республикаға күрһәтеүҙәренә ризалыҡ алыуға өлгәшеү генә лә үҙе ни тора. Был кинорежиссерҙың профессиональ оҫталығын, кешеләр менән аралаша белеү һәләтен дә күрһәтә. Рәшәткә артына инеп, төрмәне, шәхсән, төрмә мәсетен, Әхәт һымаҡ иманға килгән тотҡондарҙың унда намаҙға йөрөүен дә төшөрөп алыуға өлгәшкән Вилүрә һылыу, афарин! Төрмә хужалары менән килешеү өсөн дә байтаҡ көс һалырға тура килгәндер уға...

"Тәүбә" фильмы тик бер кешенең, йәғни Әхәттең тормошон ғына һүрәтләүҙе түгел, бәлки, уның кеүек меңәрләгән яҡташтарыбыҙға дөрөҫ юл күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. "Тәүбә" һүҙе ғәрәп теленән алынған, урыҫса - "покаяние". Йәмғиәт, йә иһә закон алдында ғына түгел, ә Аллаһы Тәғәләгә тәүбә итеү күҙ уңында тотола бында.

Бәғзеләр тик кешеләр өсөн ниндәйҙер насарлыҡ ҡылғандар ғына тәүбәгә килергә тейеш икән, тип уйлай. Мин үҙем дә бала сағымда "Нимә өсөн тәүбә итергә һуң?" тип, әсәйем мәрхүмә йырлаған ошо йырҙың мәғәнәһенә төшөнөп етә алмай аптырай инем:

Иртәнсәккәй тороп тәһәрәт алдым
Ике беләккәйемде һыҙғанып.
Йәш ваҡыттарымдан тәүбә иттем,
Ғәзиз башҡайымды ҡыҙғанып...

Түнәрәккәй күлдә, ай, суртан күп
Һыуы кибеп үлеп тә бөтмәһен.
Егет кенә кеше йәш ваҡытта
Тәүбә итмәй үлеп тә китмәһен...

Һағышлы көйгә ҡалып йырланған был йыр һаман да ҡолағымда сыңлай. Үҙем дингә килеп, динебеҙҙе төпләп өйрәнә башлағас ҡына, ата- бабаларыбыҙ сығарып йырлаған ошо йырҙың тулы мәғәнәһенә төшөндөм. Бәйғәмбәребеҙ ғәләйһис-сәләм һәр саҡ барлыҡ кешеләрҙе иң тәүҙә Аллаһы Тәғәлә алдында тәүбә ҡылып, унан иман килтерергә өндәгән. Эйе, тәүбә ҡылып. Ни өсөн? Ә бына ни өсөн: ошоғаса бер Аллаһты бар тип белмәй, Уға баш эймәй, Уның мотлаҡ үтәргә ҡушҡан ғәмәлдәрен үтәмәй ғәфләттә (вайымһыҙлыҡта) ғүмер иткән өсөн. Аллаһы Тәғәлә ысын күңелдән үкенгән һәм үтенгән кешенең тәүбәһен ҡабул итеүсе. Йәғни һәммәбеҙ ҙә әлегә тере сағыбыҙҙа Уның алдында тәүбә итергә тейешбеҙ. Беребеҙ ҙә гонаһһыҙ бәндәләр түгелбеҙ (фәрештәләр генә гонаһһыҙ була). Хатта Аллаһ илсеһе Бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм үҙе лә көнөнә етмешләгән мәртәбә Раббыбыҙҙан үҙен ғәфү итеүҙе һораған. Шуның өсөн дә "Тәүбә итерлек гонаһтар ҡылғаным юҡ әле", тип, Аллаһы Тәғәлә алдында тәкәбберләнеп йөрөү - үҙе оло яңылышыу. Сөнки тәкәбберлек кәферлеккә алып килеүсән, Аллаһ һаҡлаһын! Ошо хәҡиҡәтте аңлап, Аллаһ Тәғәләнең яҙаһынан ҡурҡып, тик Уға ғына ғибәҙәттәр ҡылып, бына шундай милләттәштәребеҙҙең ахирәттә, йәғни, һәр кемебеҙ барасаҡ мәңгелек тормошҡа алдан үҙ-үҙен әҙерләп ғүмер итеүен күреп һөйөнөүҙәремдең сиге юҡ. Ә кинорежиссерыбыҙ Вилүрә Иҫәндәүләтованың ошо эшенә Аллаһ рәхмәте насип булһын, тип доға ҡылам.

**А. ҠЫУАНДЫҠОВ.**

✓ *Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠЫЛЛЫ БУЛЫУ ЯҠШЫМЫ?

■ Еләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-ендә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай еләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус еләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарараланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға еләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырыға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Кеше нимә ашай, шул уның тиреһендә асыҡ сағыла, тиҙәр. Ниндәйҙер микроэлемент етмәһә, матдәләр алышыныу процесы шунда уҡ боҙола башлай. Шулай итеп, тирене йәш һаҡлау өсөн ниндәй витаминдар кәрәк һуң? С витамины коллаген епсәләре барлыҡҡа килеүендә ҡатнаша. С витамины етерлек булғанда, тире күгәреп бармай, күҙәнәктәр ҙә әүҙемерәк яңыра. Был витамин аҙыҡ-түлек менән етерлек ҡулланылырға тейеш, ул йәшелсә, емеш-еләктә, мәҫәлән, ҡара ҡарағатта, цитрус емештәрендә, паприкала, шпинатта, кивила, сельдерейҙа күп. Е витамины тирене ультрафиолеттың насар эҙемтәләренән һаҡлай. Ул балыҡтың майлы сорттарында, йоморткала, үҫемлек майҙарында, сәтләүектәрҙә бар. А витамины етешмәһә, тире кибә башлай. Тырнаҡтарҙың, сәстәрҙең сәләмәтлеге лә А витамины менән бәйле. А витамины сығанаҡтары - аҡ май, ҡабаҡ, эремсек, һыйыр бауыры.

■ Юғары интеллектҡа эйә ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәрҙә ҡыҙыҡһыныу уятмай, ти Буффало университеты ғалимдары. Эксперимент ваҡытында 105 ҡатын-ҡыҙ менән ир-егет математика һәм инглиз теленән тест эшләгән. Һуңынан көслө зат ҡатын-ҡыҙҙы баһалаған, бының алдынан тест һөҙөмтәләре белдерелгән. Ир-егеттәр аҡыллы ҡатын-ҡыҙҙарға һоҡланыуын белдергән, әммә үҙ-ара аралаша башлағас та, уларға ҡыҙыҡһыныуын юғалтҡан. Улар был аҡыллы гүзәл заттар менән ҡабаттан осрашырға теләмәгән. Белгестәр быны ир-аттың аҡыллы ҡатын-ҡыҙ эргәһендә үҙенең көс-ҡеүәтен юғалтыуы менән аңлата.

■ Һөнәри ауырыуҙар исемлегенә тағы бер диагноз өҫтәлгән. Америка ғалимдары селфи-терһәк тигән яңы термин уйлап тапҡан. Был сиргә үҙен-үҙе фотоға төшөрөргә яратыусылар дусар була, имеш. Нью-Йоркта урынлашҡан медицина үҙәге белгестәре билдәләүенсә, был саҡта терһәк быуыны зарар күрә. Йәғни, бер үк хәрәкәтте күп ҡабатлағандан, терһәк шешә, етмәһә, селфи яратыусыларҙың ҡулы тәбиғи булмағанса бөгөлөргә мәжбүр була. Шуға ла бар нәмәлә лә сама кәрәк, ти ғалимдар. Бик булмаһа, фото төшөргәндә бер ҡул менән генә түгел, ә уларҙы сиратлау дөрөҫөрәк. Күптән түгел ғалимдар тағы бер гипотеза яңғыратҡайны. Фотоны күп төшөү биттә һырҙар барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итә, сөнки тире даими рәүештә смартфондарҙан бүленгән электро-магнит радиацияһы тәьҫиренә бирелергә мәжбүр.

БАЛАЛАР ҠОРО

# СЕЙ СЕЙӘНЕ СӘЙНӘЙ-СӘЙНӘЙ...

## Йәки артист булыу анһатмы?

**Был һөнәр бер ҙә ҡартаймай һәм һәр заман балалары өсөн ул иң ҡыҙыҡлыларҙан иҫәпләнә. Был һөнәр кешегә ҡартайырға бирмәй, тигәндәрен дә ишеткәнегеҙ барҙыр. Актерҙар тураһында ине бөгөн һүҙебеҙ. Актер булыу өсөн ниндәй сифат мөһим? Ғәҙәттә, кемдәр актер һөнәрен һайлай? М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры эргәһендәге Башҡорт балалар театр студияһында шөғөлләнеүселәр - Гөлнур ЙӘМӘЛЕТДИНОВА, ағалы-ҡустылы Батырхан менән Баязит ШӘЙХЕТДИНОВтар, Карина ҠАДИРҒОЛОВА менән ошолар хаҡында әңгәмә ҡорабыҙ.**



**➔ Актер - кем ул? Үҫкәс, кемдәр актер булып китә?**

**Батырхан:** Кем үҙенең һәләттәрен күрһәтергә оялмай, уның тураһында башҡа кешеләр нимә әйтеренән ҡурҡмай, шул актер була. Былай беҙҙең студияға актер булыр өсөн генә йөрөмәйҙәр. "Тамыр" телеканалы өсөн тапшырыуҙар әҙерләүҙә ҡатнашһам да, алып барыусы һәм актер араһында айырма бар. Мәҫәлән, театрҙа актер үҙенең бөтөн кисерештәрен күрһәтә алырға тейеш...

**Гөлнур:** Мин дә актер оялмаҫҡа тейештер тип уйлайым. Студиялағы беҙҙең уҡытыусыларыбыҙ актерҙар, улар театрҙа уйнайҙар. Бына Хөрмәтулла Үтәшев оялмаған өсөн актер булған. Улар беҙгә төрлө күнегеүҙәр эшләтә, уйындар үткәрәләр, сәхнә теленә өйрәтәләр. Нимәнелер эшләй алмаһаң, әрләмәйҙәр ҙә.

**Баязит:** Актер һәләтле булырға тейеш инде... Минең әҙерәк һәләтем бар былай...

**Батырхан:** Һәләт кәрәк нәмә инде, ә шулай ҙа һәләтһеҙ ҙә актерлыҡҡа барырға булалыр. Тик быны өсөн ныҡ тырыш булырға, үҙеңдә һәләт барлыҡҡа килгәнсе шымарырға кәрәк. Дуҫым менән фехтованиеға йөрөгәйнек. Минең спортҡа һәләтем бар ине, тик ялҡауланып, илке-һалҡы йөрөнөм, шуға ла турнирҙарҙа еңелә башланым. Ә дуҫым ныҡ тырыш малай булып сыҡты, ул үҙенең бөтәһенә ҡарағанда ла яҡшыраҡ икәнен ярыштарҙа раҫланы. Бында ла шулайҙыр инде. Һәләтең булып та, тырышмаһаң, һәләт кенә ҡотҡара алмай...

**➔ Арағыҙҙа актер булырға теләүселәр бармы ул, әллә юҡмы?**

**Карина:** Мин актер булаҫаҡмын. Әлеге мәлдә 35-се мәктәптә 9-сы класты тамамланым. Артист булыу маҡсатыма әле ошолай бәләкәй генә аҙымдар менән барам. Актер тормошо ныҡ ҡыҙыҡ тип уйлайым һәм уларға бер ҡасан да күңелһеҙ түгелдер ул...

**Батырхан:** Студияла алған белемебеҙ беҙгә ниндәй һөнәр һайлаһаҡ та ярҙам итәсәк. Мин, бәлки, депутат, министр, президент булып китермен. Шул саҡта "Бына ошоно, тегене эшләргә кәрәк", тип кенә ултырһам, мине тыңлаусы булмаясаҡ. Ә ҡул аҫтымда эшләүселәрҙән эшләтергә теләгәндәрҙе үҙемде ышаныслы тотоп, тауышты күтәреберәк талап итһәм, моғайын, маҡсатыма өлгәшермен. Минең нисек итеп һөйләшеүемдән, үҙ-үҙемде тотоуымдан эштең үтә мөһимлеге һиҙелеп торорға тейеш.

**Гөлнур:** Кеше был ерҙә йәшәгәндә үҙен яҡшы яҡтан күрһәтеп өлгөрөргә тейеш. Шуға ла үҙеңә оҡшаған эш һайларға кәрәк. Мин хирург буласаҡмын. Нисек итеп кешенең йөрәген алыштыралар икән, шуны белгем килә. Йөрәкте алыштырырға кәрәк, сөнки ул ҡайһы саҡта туҙып китә бит...

**Батырхан:** Кем тәмәке тарта, зарарлы эсемлектәр эсә, уларҙың йөрәге тиҙ ҡартая инде ул. Үпкә лә зарарлана төтөнгә, шулай ҙа ҡан тамырҙары тарайып, йөрәккә лә көс төшә. Ул ныҡ итеп эшләй, ҙурая башлай. Уның һайын насар, көсһөҙөрәк була бара. Мин былар тураһында интернетта төрлө төркөмдәрҙә уҡыйым. Сөнки мин дә хирург булырға хыялланам. Студиялағы уҡытыусыларыбыҙ ҙа беҙгә артист булығыҙ тип әйтмәй...

**➔ Ундағы уҡытыусыларығыҙ тураһында нимә әйтер инегеҙ, улар ныҡ уҫалдарҙыр, шулаймы?**

**Баязит:** Киреһенсә, улар ныҡ изге күңеллеләр. Бигерәк тә Римма Тәлғәт ҡыҙы Харисова һәйбәт. Уның менән беҙ төрлө уйындар уйнайбыҙ. Ә башҡалар менән тауыш, телмәр өҫтөндә эшләйбеҙ, матур итеп һөйләшергә өйрәнәбеҙ.

**Батырхан:** Ысынлап та, Римма Тәлғәт ҡыҙы тыштан талапсан тойолһа ла, ныҡ һәйбәт. Уның менән күңелле. Хөрмәтулла Ғаззали улы беҙҙең кәйефте күтәреп ебәрә белә. Бер ваҡыт дәрестә ишетелер-ишетелмәҫ кенә һөйләнеп ултырған булабыҙ. Хөрмәтулла Ғаззали улы ҡысҡырып бер көлөп ебәргәйне, беҙгә лә күңелле булып китте...

**Гөлнур:** Мин Хөрмәтулла Үтәшевты "Ҡоҙаса" спектаклендә күргәйнем. Ул ҙур актер. Ә бына Фәнис Вәкил улы Рәхмәтовты "Хыялға ҡаршы" спектаклендә күрҙем. Унда ул Даян булып уйнаны. Уның был роле миңә бик оҡшаманы. Ә бит ул тормошта бөтөнләй ундай түгел, һәйбәт...

**Карина:** Уҡытыусыларыбыҙ, ысынлап та, бик яҡшы. Унда төрлө йәштәге балалар бар, ныҡ итеп шаярып алып та китәләр ҡайһы саҡта. Шулай ҙа уҡытыусылар бер кемгә лә асыуланмай, киреһенсә, һәр кемдең яйын табып, көйләп алалар.

**Баязит:** Бына һеҙ ҡабатлай алаһығыҙмы ошо тиҙәйткесте: "Сейәлек соҡорон үткән саҡта сей сейәне сәйнәй-сәйнәй сикәләрем сатнаны"? Ҡыйын шул, һеҙ әллә артист булыуы анһат тигәйнегеҙме? Шулай ҙа студияла мәктәптәге кеүек түгел, унда уйнап ҡына уҡыйбыҙ.

**➔ Ә мәктәптә уҡыуы ауырмы ни?**

**Баязит:** Ауырыраҡ инде... Мин хәҙер икенсе класҡа күстем, әҙерәк шаярам инде дәрестәрҙә. Бер тапҡыр ғына директорға алып барҙылар. Был оҙон тарих, ярай, һеҙгә лә һөйләйем инде. Дуҫым менән бергә шар уйнап ултыра инек, ул бер малайҙың күҙенә тейә яҙҙы. Беҙҙе директорға алып барҙылар, башҡа улайтмағыҙ, тине директор. Шарҙы ла алып ҡалдылар.

**Карина:** Ауыр булһа ла уҡырға кәрәк. Алда төрлө имтихандар тапшырырға кәрәк бит. Мәктәп йылдары тиҙ генә үтә лә китә ул, шуға ҡәҙерен белеп ҡалығыҙ, ҡыҙҙар, малайҙар.

**➔ Актер булһағыҙ, ниндәй ролдәр башҡарыр инегеҙ?**

**Батырхан:** Күңелле, көлдөргөс комедияларҙа уйнар инем. Комедияла уйнауҙың ауырлығы бар, үҙең көлмәҫкә тейешһең.

**Гөлнур:** Мин, мәҫәлән, "Хыялға ҡаршы" тигән спектаклдә уйнар инем. Унда малайҙар ғына уйнай инде былай. Мин Урал Әминев булыр инем, был спектаклдә ул миңә ныҡ оҡшай. Ә былай мин Алһыу Ғәлинаны яратам.

**Карина:** Мин дә берәй һағышлы тарихлы әҫәрҙә драматик роль башҡарыр инем.

**Баязит:** Бэтменмы шундай, йәки тағы берәй шундай роль башҡарыр инем. Бер ҙә генә һәйбәт геройҙы уйнағым килмәй, ниңә улайҙыр инде? Тормошта ла шулай ул мин. Атайым, тышҡа сығып уйнап ин, тиһә, мин киреләнәм дә, юҡ, тейем. Тышҡа сыҡма, тиһә, сығып китәм. Тиҫкәре инде. Беҙҙең ысын ҡылысыбыҙ бар. Шул ҡылысҡа теймә, тиһә, мин уға барыбер тейәм...

**Батырхан:** Фәнис Вәкил улы тиҙерәк хәрәкәтләнә, ә Хөрмәтулла Ғаззали улының мимикаһы оҡшай, шуға ла мин уларҙың ошо сифаттарын үҙемдә берләштерергә теләр инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һәр башҡорт ҡыҙы һәм малайы киләсәктә билдәле кеше булырға тейеш, шуға ла беҙ башҡорт студияһына йөрөйбөҙ", - тип юҡҡа әйтмәйҙәр йәш әңгәмәселәребеҙ. Артист булыуы ғына түгел, ғөмүмән, халҡыңдың лайыҡлы улы йә ҡыҙы булыуы ла анһат түгел, әммә был яуаплылыҡты бәләкәйҙән тойған дуҫтарыбыҙға аҡ юлдар теләйбеҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

*✓ Ҡатын-ҡыҙға ла, ир-егеттәргә лә нәфселәрен тыйыу фарыз. Йософ ғәләйһиссәләм әйтә: "Хәҡиҡәттә нәфсе - яуызлыҡҡа бойороусы, әҙәмдәрҙең нәфсеһе ҡылған боҙоҡлоҡто етмеш шайтан ҡыла алмаҫ".*



*МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ*

**Бөтә донъяла, төрлө ил ҡәүемдәрендә ижтимағи тормошҡа, көнитмешкә, шәхси сифаттарға, әхлаҡ-әҙәпкә бәйле меңәр йылдар буйына ҡулланылған, йола-ҡағиҙәгә әйләнгән эш-ҡылыҡ тәртиптәре, ғөрөф-ғәҙәттәр, аманаттар бар. Улар оҙайлы ваҡыт ҡат-ҡат һыналып, күп ҡабатланып, ырыу, йәмғиәт ағзаларының ғәҙәтенә кергән. Йәшәйешкә ҡағылған, кешеләрҙең холҡон, үҙ-ара мөнәсәбәттәрен көйләүгә ҡоролған йола-ҡағиҙәләр араһында тыйыу, әйтәйек, берәй эш-ҡылыҡҡа рөхсәт бирмәү, уны туҡтатыу, ғәмәлгә ашырмау, бәғзе теләккә, хис-тойғоға, кисереш-ярһыуға, тотанаҡһыҙлыҡҡа, тәртипһеҙлеккә ирек ҡуймау кеүек ғәҙәттәр ҙә бар.**

# ТЫЙЫЛҒАНДАН - ТЫЙЫЛ, ТИГӘН...



### Ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға тыйыу

Ир-атҡа һәм ҡатын-ҡыҙға тыйыу, уны боҙған өсөн язаға дусар ҡылыныу Әҙәм менән Һауа ғәйебенән килә. Аллаһы Тәғәләнең тыйыуын, әмерен үтәмәгәне өсөн Әҙәм ғәләйһиссәләмгә ун бәлә бирелә. 1. Аллаһы Тәғәләнең шелтәһе. Ҡөрьән-Кәримдә әйтелә: "Аллаһы Тәғәлә һеҙҙе был ағастан тыйманымы?" 2. Хөллә һәм таждан яланғас ҡалыу. "Асылды был икәүҙең ғәүрәттәре" (Ҡөрьән-Кәрим). 3. Әҙәм ғәләйһиссәләмдең йөҙө, тәне ҡаралды. 4. Ожмахтан сығарылды. 5. Әҙәм Һауанан йөҙ йыл, икенсе риүәйәт буйынса ике йөҙ йыл айырылып торҙо. 6. Әҙәм менән шайтан араһында дошманлыҡ көсәйҙе. 7. Гонаһлы исемен күтәрҙе. 8. Шайтан әҙәмдең балаларына һәм малдарына ҡатышты. 9. Донъя зинданына ябылып, һыуыҡ, эҫелек һәм төрлө ауырыуҙар менән һыналды. 10. Тормошо төрлө мәшәҡәттәргә дусар ителде.

Хаҡ Тәғәлә Һауаға әйтте: "Хата эш ҡылдың, шул сәбәпле яланғас ҡалдың, бәләгә тарының, Әҙәмде лә ҡайғылы, яланғас иттең". Аллаһы Тәғәләнән хитаб ҡылынды: "Әй, Һауа, йәннәттән сыҡ, һине ун биш бәлә менән һынаясаҡбыҙ. Был гонаһ шомлоғонан ҡыҙҙарың Ҡиәмәт көнөнә ҡәҙәр һыналыр. 1. Хәйез (күрем), нифас ҡаны ҡыҙҙарыңа аманат булһын. 2. Туғыҙ ай бала күтәрһендәр. 3. Бала тапҡанда үлем әсеһен татыһындар. 4. Ғиҙҙәт михнәтен сикһендәр. 5. Ирҙәре хөкөмөндә булһындар. 6. Талаҡ ирҙәр ҡулында булһын. 7. Мираҫта яртылаш кәм ҡалһындар. 8. Шәһәҙәт биреүҙә. 9. Аҡылда. 10. Диндә кәм булһындар. 11. Сәләм биреүгә мәхрүм булһындар. 12. Йома намаҙҙарынан һәм йәмәғәт менән уҡылған намаҙҙарҙан. 13. Пәйғәмбәрлектән. 14. Батша булыуҙан, хәлифәлектән. 15. Мәхрәмһеҙ сәфәр ҡылыу хәрәм булһын".

Бер риүәйәттә һөйләнелеүенсә, мең йәшкә еткәс, Әҙәм ауырып китә. Балаларын йыйып, Аллаһы Тәғәләнең тыйыуҙарына, әмеренә буйһонорға, шайтанға ҡаршы торорға, ҡатындарға йөрөмәҫкә бойора. Барса нәсихәттәрҙән, васыяттарҙан биш васыят менән ғәмәл ҡылырға, балаларға уларҙы кәңәш, теләк итергә ҡуша. 1. Күңелемде донъяға түгел, ожмахҡа бағланым, мәшәҡәт күрҙем. 2. Һәр ғәмәлдең аҙағын уйла, эшемдең ахырын уйламаған өсөн ошо хәлгә төштөм. 3. Ҡатын һүҙенә ҡарама. Мин ҡатын һүҙенә ҡарап бәләгә тарыным. 4. Һәр эште кәңәшләш, әгәр тыйылған емеште ашамаҫ элек фәрештәләр менән кәңәшләшһәм, мин был бәләгә тарымаҫ инем. 5. Теләһә ҡайһы ғәмәлде башлағанда эсең бошһа, уны ташла. Бойҙай ағасына яҡын барғас, күңелем тулҡынланды, эсем бошто. Ашағандан һуң ожмахтан сығарылдым. Бынан тыш, Әҙәм балаларына Мөхәммәт Мостафа пәйғәмбәрҙең нурын яҡшы һаҡларға ҡушты. Сөнки Хаҡ Тәғәлә Мөхәммәт ғәләйһиссәләм нурынан әҙәмде бар ҡыла, ул нур әҙәмдән Һауа инәгә күсә.

"Пәйғәмбәрҙәр тарихы" китабында әйтелеүенсә, ҡатын-ҡыҙға ла, ир-егеттәргә лә нәфселәрен тыйыу фарыз. Йософ ғәләйһиссәләм әйтә: "Хәҡиҡәттә нәфсе - яуызлыҡҡа бойороусы, әҙәмдәрҙең нәфсеһе ҡылған боҙоҡлоҡто етмеш шайтан ҡыла алмаҫ". Башҡорт халыҡ әйтемдәре лә нәфсехур, йәғни нәфсе ҡоло булыу яман ҡылыҡ икәнен аңғарта: нәфсеһенә баш булмаған - шайтанға эйәрер; нәфсеңде тыймаһаң, нәфсең туймаҫ, нәфсеңә хужа булһаң, нәфсең йыуаш булыр; нәфсенең сиге юҡ; нәфсене һимертһәң, үҙеңә бәлә өҫтәлер...

Ир - ҡатын мөнәсәбәттәренә бәйле серҙе сисмәү тыйыуы ла күҙәтелә. Был грек һәм рим мифологияһында ла сағылған. Ида тауы буйында көтөү көткән Анхис янына унаң матурлығына хайран мөхәббәт һәм гүзәллек алиһәһе Афродита килә һәм үҙен Отрей батша ҡыҙы итеп таныта. Енси яҡынлыҡ ҡылғандан һуң Афродита Анхисҡа унан Эней исемле данлы батырҙы тыуҙырасағын әйтә, әммә серҙе бер кемгә лә сисмәҫкә ҡуша. Ләкин дуҫтары менән һыйланғанда Анхис тыйыуҙы боҙа һәм шуның өсөн уны Зевс йәшене ата.

Дәрт, мөхәббәт, өйләнеү, туй, ғаилә тормошона ҡағылған өгөт-нәсихәттәр үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе көйләүгә, әхлаҡ-әҙәп ҡағиҙәләрен белеүгә, тотоуға йүнәлтелгән.

Ҡыҙ оҙатыу, килен ҡаршылау әйтемдәрендә ошондай тыйыу рәүештәре күҙәтелә: төҫөң боҙоп, теш ыржайтып, балаҡай, йәмәғәтеңде үртәмә; кейәү йортона барғас, албырғанма, ҡыҙыҡай; ҡабағанан ҡаптырма, төйләгәндән типтермә, ен-шайтанды индермә, иблисте еткермә; һыу башлауҙа тәү башлап, ҡоро күнәк күтәрмә; урынһыҙға һүҙ ҡатып, гонаһҡа батма, киленсәк; иреңә ҡаршы һүҙ әйтеп, ауыҙың асма; һүҙ йөрөтмә, ошаҡсы булма, ауылсы булма; ҡәйнәң ҡушҡан йомошто ташлап ҡасма; телсәнләнеп, ҡысҡырып, саусы булма; күҙең-башың йымылдап, күҙсән булма; олтораҕың ҡалтырап, тегендә-бында йөрөмә... Киленгә ҡайныһы, ҡайнағалары менән әҙәпһеҙләнеп һөйләшеп тороу ярамаған. Халыҡ әйткәнсә, ҡайнаға яйҡайтып тормаҫ, килен кирелеп тормаҫ.

Хоҙай Тәғәлә ҡатын-ҡыҙға ошоларҙы бойора: урламаҫҡа, уйнаш ҡылмаҫҡа, балаларын мәхрүм итмәҫкә, ялған һөйләмәҫкә, хупланған эштәргә ҡарышмаҫҡа; йәнә оят ерҙәрен һаҡларға, үҙҙәренең биҙәктәрен күрһәтмәҫкә, түштәрендәге уйымдарына бөркәнсектәрен ҡапларға, зина ҡылған ҡатындың һәр береһенә йөҙәр ҡамсы һуғырға, боҙоҡлоҡ һәм аҙғынлыҡ таратмаҫҡа, сит ирҙәр менән ҡыланып һөйләшмәҫкә...

Кейәүгә сығам, ир менән имен, татыу йәшәйем тигән ҡатын-ҡыҙ тыйыуҙарҙы үтәргә бурыслы. Саам мифологияһында тылсымлы болан-әүермән Мәндәш егет үҙенә әҙәм затынан кәләш әйттереүҙе һорай. Өс апай-һеңленән кесеһе генә Мәндәштең инәһенең тыйыуҙарын тыңлай, әпсен-төпсөн, арбау һүҙҙәре әйтеп, ғәмәлен башҡара, боландар менән яғымлы мөғәмәлә итә һәм Мәндәштең ғүмер юлдашы, хәләле дәрәжәһенә лайыҡ була. "Уғыҙ хикәйәте"ндә дәлилләнеүенсә лә, йән, ҡан тартыуы, бер-береңә күңел ятыуы, ғаилә татыулығы һәм ныҡлығы ир менән ҡатындың бер иманда булыуында, бер бөтөнлөгөндә.

Бәндәләргә Хаҡ Тәғәләнең тыйыуҙарын, әмерҙәрен, ҡанбаба Әҙәмдең өгөт-нәсихәттәрен, васыяттарын онотторға ярамай. Уларҙа - фәһем, һабаҡ, быуындан-быуынға тапшырылырға һәм үтәлергә тейешле аманат. Был тыйыу, кәңәш рәүешендә мәҡәлдәрҙә һәм әйтемдәрҙә лә күренә: һөймәгәнгә һөйкәлмә; ауылдан ҡыҙ алма ла мал алма; ирең булмаҫтайға иреңенде бирмә; көндәш күргәндең ҡыҙына ҡыҙыҡма; тиңһеҙҙе тиңгә тартма; ҡатынды үҙеңдән башҡа ҡунаҡҡа ебәрмә; ҡатындар һүҙенә алданма; кеше иреңә ышанып, түшәк йәймә; ҡатыныңа серңде һөйләмә; ҡатыныңды ҡапыл бөкмә; аҙғынға эйәрһәң, аҙырһың, тоғро юлдан яҙырһың...

**Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ.**
**(Дауамы. Башы 24-29-сы һандарҙа).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Теләк аша сағылған Ижади көс

Аң - иң ныҡ сикләүсе элемент, сөнки унда булған мәғлүмәт биш тойоу ағзаһы: ишетеү, тәм, еҫ, ҡағылыу һәм күреү аша үтә. Улар ҡайһы бер осраҡта беҙҙе алдай һәм уңайһыҙ хәлгә ҡуя алғанлыҡтан, аң биргән ялған күҙаллау, ҡиммәттәр һәм инаныуҙарҙы ҡабул итәбеҙ. Аң объектив. Ул рациональ, күҙәтеүсән; ул ихтыяр көсөнөң таянысы. Уны ишек эргәһендә торған һәм төпкө аңға инеүҙе һаҡлаған һаҡсы менән сағыштырырға була. Аң барлыҡ мәғлүмәтте һөҙөп, төпкө аңға бары тик үҙе дөрөҫ тип иҫәпләгән мәғлүмәтте генә, хатта ул ялған ышаныу булғанда ла, тапшыра.

Беҙ аң ярҙамында күргән нәмәләр күп осраҡта беҙҙе хаталандыра. Офоҡҡа ҡараһаҡ, ер менән күк тоташҡан, йәйғор ергә төшкән, ә тимер юлы рельстары алыҫта бергә ҡушылған кеүек. Бындай үҙгәреү аңдың ялған образдары һәм ялған мәғлүмәте һөҙөмтәһе. Ярлылыҡ, ауырыуҙар, хәүефлелек, күңел төшөү һәм өмөтһөҙлөк шулай уҡ аңыбыҙҙан ҡабул итеп алып, төпкө аңды программалаған ялған образдар.

Аң һалған сикләүҙәрҙән азат булыр өсөн беҙгә асылыбыҙға, Хәҡиҡәт сығанағына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Хәҡиҡәт бары тик асылдан килә. Уны тыштан эҙләү беҙҙең алға барыуыбыҙҙы тотҡарлап торған шарттарҙы нығытыу ғына ул. Бына ни өсөн беҙгә Юғары аң интуицияһына ҡолаҡ һалырға, был мәғлүмәтте аңға тапшырырға һәм маҡсатлы рәүештә үҙебеҙ хыялланған ыңғай тәжрибә булдырыу өсөн төпкө аңға программаларға кәрәк.

Йөҙәр йылдар дауамында уңышлы кешеләр йә интуитив, йә аңлы рәүештә үҙҙәренең ҡеүәтле көскә эйә булыуҙары тураһында һығымтаға килә. Улар был көскә мөрәжәғәт итеп, әҙәбиәттә һәм сәнғәттә, музыкала, төҙөлөштә бөйөк шедеврҙар тыуҙыра һ.б. Төпкө аң бик күп һәләттәргә һәм сикһеҙ мөмкинлектәргә эйә булыуына ҡарамаҫтан, ул - һеҙҙең ҡолоғоҙ һәм бойороғоғоҙҙо көтә. Ул үҙ-үҙенә бойороҡ бирә алмай. Асылда ул - һеҙ ныҡышмал рәүештә биргән бойороҡтарҙы аныҡ үтәүсе автоматик механизм. Ул һеҙ теләгән ваҡытта хыялығыҙҙағы тормошто булдырыу өсөн кәрәкле бөтөн мәғлүмәтте теләһә ҡайһы ваҡытта биреүсе компетентлы, ҡиммәтле партнер. Быға тиклем беҙ төпкө аң анда һаҡланған инаныуҙар һәм ышаныуҙарға ярашлы яуап бирә, тип яҙғайныҡ. Аңығыҙ нимәгә ышана, шуны һайлай, ә төпкө аң аңдың бөтөн ҡарарҙарына һәм бойороҡтарына һүҙһеҙ буйһона. Мотлаҡ шуны ла билдәләп китергә кәрәк: төпкө аң уңышты ҡабул иткән кеүек, шундай уҡ әҙерлек менән уңышһыҙлыҡты ла ҡабул итә, уңышты тормошҡа ашырған кеүек уңышһыҙлыҡты ла тормошҡа ашырыу өсөн бөтөн сараларҙы эшкә ҡуша. Был аныҡ мәлдә төпкө аңығыҙ йә һеҙгә, йә ҡаршы эшләй. Аң ярҙамында ул бөтөн физик, интеллектуаль, психологик, эмоциональ кисерештәрҙе ҡабул итә, теркәй һәм ошо мәғлүмәтте артабан ҡулланыу өсөн һаҡлай. Тупланған кисерештәр Аңдың хәҙерге кимәлен билдәләй.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



## 25 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.20 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
14.30 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Долгий путь домой". 9-я и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.35 "Гоморра". Криминальный сериал. 5-я и 6-я серии (18+).
01.30 "Это Я" (16+).
02.00, 03.05 "Свадьба". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сильнее судьбы". 1-4-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.50 "Обреченные. Наша Гражданская война. Слащев-Фрунзе" (12+).
02.50 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.40 "Взлеты и падения Мариса Лиепы". Док. фильм (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Учим башкирский язык" (0+).**
**10.15 "Городок АЮЯ" (0+).**
**10.30 "Борсаҡ" (0+).**
**10.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.45 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Книга сказок" (0+).**
**15.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "У дачи" (12+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**16.45 "Следопыт" (12+).**
**17.15 "Личность" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**19.15 "Сируси". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Хоккейные игры". Сериал (12+).**
**22.00 "Дознание" (16+).**
**23.00 "Арн - объединенное королевство". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Лучшие матчи КХ "Салават Юлаев" в 2015-2016 гг." (6+).**

## 26 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.00 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
14.30 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Долгий путь домой". Сериал (16+).
23.35 "Гоморра". 7-я и 8-я серии (18+).
01.25 "Это Я" (16+).
01.55, 03.05 "Поцелуй меня на прощание". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сильнее судьбы". 5-8 серии (12+).
00.50 "Жизнь и судьба". Военно-драматический сериал (12+).
02.40 "Семейный детектив". Сериал (12+).
03.30 "Валаам. Остров спасения". Док. фильм.
03.20 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Зеркальце" (0+).**
**10.30 "Физра" (6+).**
**10.45 "Деревенская комедия" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Фанташ" (0+).**
**15.15 "Бауырһаҡ" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45 "Красная кнопка" (16+).**
**16.45 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Орнамент" (0+).**
**18.00 "Полезные новости" (12+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Сируси". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.30 "Хоккейные игры". Сериал (16+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Побег из тюрьмы". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" в 2015-2016 гг." (6+).**

## 27 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10, 04.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
14.30 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Долгий путь домой". 13-я и 14-я серии (16+).
23.35 "Гоморра". 9-я и 10-я серии (18+).
01.25 "Это Я" (16+).
01.55, 03.05 "В поисках Ричарда". Худ. фильм (12+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Вести".
09.15 "Утро России".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сильнее судьба". 9-12 серии (12+).
00.45 "Жизнь и судьба". Военно-драматический сериал (12+).
02.20 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.15 "Драма на Памире. Приказано покорить". Док. фильм (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Ал да гөл" (6+).**
**10.30 "Бауырһаҡ" (0+).**
**10.45 "Деревенская комедия" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**15.15 "Физра" (6+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Наука 102" (12+).**
**16.45 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**17.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.15 "Сируси". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Хоккейные игры". Сериал (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Дом крокодилов". Худ. фильм (6+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" в 2015-2016 гг." (6+).**

## 28 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
14.30 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Долгий путь домой". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).
23.40 ""Гоморра". 11-я и 12-я серии (18+).
01.30 "Это Я" (16+).
02.00, 03.05 "Ликвидатор". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Сильнее судьбы". 13-16-я, заключительная, серии (12+).
00.45 "Жизнь и судьба". Сериал (16+).
02.50 "Семейный детектив". Детективный сериал (12+).
03.40 "Сталинские соколы. Крылатый штрафбат" (12+).
04.30 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 17.15 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Цирк в 13 метров" (6+).**
**10.30 "Преград.net" (6+).**
**10.45 "Деревенская комедия" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Яйляу" (0+).**
**15.30 "Гора новостей".**
**15.45, 18.00, 20.15 "Полезные новости" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.45 "Будьте как дома" (16+).**
**18.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**19.15 "Сируси". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.30 "Хоккейные игры". Сериал (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Курортный роман". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Бронзовый сезон. Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" в 2-15-2016 гг." (6+).**

## 29 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал" (12+).
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости.
12.15 "Пусть говорят" (16+).
13.25, 18.45 "Давай поженимся!" (16+).
14.30 "Таблетка" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда" (16+).
23.10 "Французский транзит". Криминальная драма (18+).
01.40 "Не оглядывайся назад". Романтическая комедия (16+).
03.30 "Билет в Томагавк". Худ. фильм (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Каменская". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу" (16+).
23.05 "Я подарю тебе любовь". Мелодрама (12+).
01.00 "Течет река Волга". Мелодрама (12+).
03.05 "Человек, который изобрел телевизор". Док. фильм (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Замандаш" (6+).**
**10.15 "Борсаҡ" (0+).**
**10.30 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**10.45 "Деревенская комедия" (16+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45, 14.45, 17.45, 19.00, 01.15 "Интервью" (12+).**
**12.00 "Белла Ахмадуллина" (12+).**
**12.30 "Автограф" (0+).**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**14.00 "Хазина" (0+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**15.00 "Сулпылар" (0+).**
**15.15 "Перекличка" (6+).**
**15.30 "Космические каникулы" (0+).**
**15.45 "Атлантида" (12+).**
**16.45 "Время башкирское" (12+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.15 "Сируси". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Полезные новости" (12+).**
**20.30 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Кольцо дракона". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Лучшие матчи ХК "Салават Юлаев" в 2015-2016 гг."(6+).**

## 30 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.35, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.25 "Синдром дракона". Сериал (16+).
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Инна Макарова. Судьба человека" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Идеальный ремонт".
13.10 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Дорогой мой человек". Худ. фильм.
16.00 "Алексей Баталов. "Я не торгуюсь с судьбой" (12+).
17.05 "Кто хочет стать миллионером?"
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.15 "Жара". Международный музыкальный фестиваль.
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.35 "Шик!" Комедия (16+).
02.35 "Нет такого бизнеса, как шоу-бизнес". Худ. фильм (12+).
04.50 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Визит дамы". Худ. фильм.
07.40 "Вести-Башкортостан".
08.00 "Вести".
08.10 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.15 "Сто к одному".
10.05 "Личное. Максим Аверин" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Расплата за любовь". Мелодрама (12+).
13.15 "Хозяйка большого города". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Хозяйка большого города". Продолжение фильма (12+).
17.35 Юбилейный концерт Игоря Крутого.
20.00 "Вести".
20.35 "Последняя жертва Анны". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
00.35 "Люблю, потому что люблю". Мелодрама (12+).
02.35 "Я подарю тебе любовь". Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.30, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Плодди супергерой" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (6+).**
**10.00 "Квадратный метр" (12+).**
**10.15 "Семь чудес Башкортостана" (12+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "У дачи" (12+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учим башкирский язык" (0+).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2016" (12+).**
**17.00 Н.Асанбаев. "Семь девушек" (12+).**
**19.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.30 "Замандаш" (6+).**
**19.45 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.00 "Бала-сага" (6+).**
**20.45 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**21.15 "Полезные новости" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**22.30, 01.00 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2016" (12+).**
**23.45 "Киберспорт" (16+).**
**00.45 "Родительский контроль" (12+).**
**01.30 З.Атнабаева. "Прерванная свадьба" (12+).**

## 31 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Наедине со всеми" (16+).
06.00 Новости.
06.45 "Случай в квадрате 36-80". Худ. фильм (12+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье".
10.00 Новости.
10.15 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Маршрут построен".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Дачные феи".
12.45 "Фазенда".
13.25 "Люди, сделавшие Землю круглой" (16+).
15.25 "Что? Где? Когда?"
16.35 "Цари океанов". К Дню Военно-морского флота"(12+).
17.40 К Дню Военно-морского флота. Праздничный концерт.
19.30 "Голосящий КиВин". Музыкальный фестиваль (16+).
21.00 "Время".
21.20 "Голосящий КиВин". Продолжение (16+).
22.25 "Бойфренд из будущего". Мелодрама (16+).
00.40 "Фантастическая четверка". Фантастика (12+).
02.30 "Беглый огонь". Худ. фильм (16+).
04.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Первый после бога". Худ. фильм (12+).
07.00 "Мульт утро".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама". Юмористическая программа.
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному".
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается".
14.00 "Вести".
14.20 "Мечтать не вредно". Худ. фильм (12+).
16.05 "В час беды". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
20.00 "Вести".
22.00 "Андрейка". 4 серии. Мелодраматический сериал (16+).
01.55 "Роман в письмах". Мелодрама (12+).
04.00 "Двое против Фантомаса. Де Фюнес - Кенигстон". Док. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Лев Макс" (0+).**
**08.30 "Йома" (0+).**
**09.00 "Бай бакса" (12+).**
**09.30 "Будьте как дома" (6+).**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Фанташ" (0+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.15 "Байтус" (6+).**
**11.30 "Учим башкирский язык" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Вечный лес" (12+).**
**15.30 "7 чудес Башкортостана" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (0+).**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 Т.Каюмов. "Наследство" (12+).**
**18.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**19.00 "Мир настоящих мужчин" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "Военно-полевой роман". Худ. фильм (12+).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Красная кнопка" (16+).**
**23.00 "Башҡорт йыры" (12+).**
**23.30 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.30 "Медная гора". Худ. фильм.**
**01.30 А.Кирющенко. "Дурь" (12+).**

*ИҒЛАН*

Утерянные документы: **студенческий билет № 605215** и **зачетную книжку**, выданные Башгосуниверситетом на имя **Галиуллиной Юлии Ильдаровны**, считать недействительными.

✓ *Тиҙ таҙартып була торған, модалы матур обойҙар ҙа һаулыҡҡа насар тәьҫир итеүе мөмкин. Ҡайһы бер синтетик материалдар фенол, формальдегид, толуол, бензол кеүек химик матдәләрҙән торған быу бүлеп сығара.*



ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА

# УН ЙЫЛҒА ЙӘШЕРӘКМЕ?

**Ун йылға йәшерәк күренеү өсөн ни бары беҙҙе ологайтыусы бер-нисә ғәҙәттән баш тартырға кәрәк, тигән фекерҙә белгестәр. Кешене тәмәке тартыу, эскелек йәки күп ашау ғына ваҡытынан алда ҡартайтмай икән. Ҡайһы берҙә тәү ҡарамаҡҡа зыянһыҙ ғына күренгән ғәҙәттәр арҡаһында үҙ йәшеңә ҡарағанда олораҡ күренәһең. Шул ғәҙәттәрҙән ҡотолғандан һуң күҙ алдында йәшәрә барыуығыҙҙы һиҙерһегеҙ.**



### Күҙҙе ҡысып ҡарау

Йыш ҡына күҙ ситтәрендә тәрән йыйырсыҡтар барлыҡҡа килеүен һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ. Уларҙың килеп сығыуы күҙҙе ҡысып ҡарау ғәҙәте менән бәйле булыуы мөмкин. Кеше күҙен бер нисә осраҡта ҡысып ҡарарға ғәҙәтләнә: алыҫтан яҡшы күреү өсөн күҙлеген дөрөҫ һайлап алмай, ҡара быялалы күҙлек киймәй. Алыҫтан насар күреп тә, күҙлек кейергә теләмәгән кеше, ваҡ әйберҙәрҙе ентекләп ҡарайым, тип, күҙҙәрен ҡыҫыусан. Ваҡыт үтеү менән был ғәҙәткә инеп китә. Ҡара быялалы күҙлектән баш тартыу ҙа ошо һөҙөмтәне бирә. Кешенең тиреһе ультрафиолет нурҙар йоғонтоһонда боҙолорға ғына тора. Ә күҙ ситендәге тире бигерәк тә йомшаҡ һәм ҡояшта йыйырсыҡланып ҡала. Күҙ ҡабағы тиреһенең тығыҙлығын яҡшыртыу өсөн составында коллаген булған крем һөртөргә һәм көнөнә бер нисә тапҡыр күҙҙәрҙе унға-һулға, өҫкә-аҫҡа йөрөтөп, ябай ғына күнекмә яһарға кәрәк.

### Бер туктауһыҙ сәйнәү

Бер туктауһыҙ низер ашау, һағыҙ сәйнәү аш һеңдереү процесына кире йоғонто яһауҙан тыш, танау, ирен тирәһендәге тирегә лә насар тәьҫир итә. Мускулдар һуҙыла, тире тығыҙлығын юғалта һәм йыйырсыҡтар барлыҡҡа килә. Гел көнбағыш ярыу, төрлө сәтләүектәр йәки башҡа берәй тәмлекәстәр ашау ғәҙәте невроз менән ауырыу билдәһе. Шуға күрә, сираттағы көнбағыш ҡабына үрелеү урынына иркенләп аяҡтарҙы салып ултырып, ҡулдарҙың усын өҫкә асып, тубыҡтарға һалып, күҙҙәрҙе йомған көйө тынысланып алырға кәрәк. Тәрән, иркен итеп танау аша тын алып, ауыҙ аша кире сығарыу мөһим.

### Тирене ышҡымағыҙ

Тирене ваҡыты-ваҡыты менән махсус тәғәйенләнгән әйберҙәр ярҙамында таҙартып тороу мөһим, әлбиттә. Ләкин бында ла сама белергә кәрәк. Тирене шымартыу өсөн ҡулланылған ҡаты өлөшсәләре булған скрабтар менән аҙнаһына бер тапҡыр йыуыу ҙа етә. Югиһә, тире төрлө ауырыуҙарға бирешеүсән була, ҡояшта тигеҙ янмай, хатта тиҙерәк ҡартайыу ҡуркынысы янай. Шуға күрә, скрабтар һайлағанда ла иғтибарлы булығыҙ, ҡаты өлөшсәләре ваҡ булғандарын алығыҙ. Составында тоҙ кристалдары булған скрабтарҙы ҡулланмағыҙ. Аллергия сыҡҡан тирене составына емеш-еләк кислоталары ингән крем менән йыумағыҙ. Тиренең иҫке күҙәнәктәрен ышҡып, йыуып төшөргәс тә яҡшы дымландырған крем һөртөргә кәрәк.

### Ҡартайыуға ҡаршы кремдар ҡулланыу

Йәшкә бәйле үҙгәрештәрҙе тотҡарлаусы крем, сывороткаңы 35 йәшкә тиклем даими рәүештә ҡулланыу дөрөҫ түгел. Ҡыҙҙарға 25 йәшкә тиклем тоник һәм дымландырыусы крем һөртөү ҙә етә. Ә бына 35 йәшкә тиклем тирене туҡландырыусы крем, стресты баҫҡан косметика ҡулланырға кәрәк. Бит тиреһен тарттырыусы, йыйырсыҡтарҙы тигеҙләүсе кремдарҙы организм коллаген матдәһен әҙ етештергәндә, 40 йәшкә етә барғанда һөртә башларға мөмкин. Йәш үҫенсәләктәрен иҫәпкә алмай, биттәге йыйырсыҡтарҙы төрләсә бөтөрөргә тырышыуҙың файҙаһы юҡ. Был, киреһенсә, ҡартайыу процесын тағы ла тиҙләтә.

### Арҡаны тура тотмау

Яурындарҙы түбән төшөрөп, арҡаны көмөрәйтеп йөрөү ғәҙәте хатта йәш ҡыҙҙарҙы ла ҡарт итеп күрһәтә. Табиптар әйтеүенсә, көмөрәйеп йөрөү "кифоз" тип атала һәм бик ҡурҡыныс ауырыу һанала. Унан арҡа һөйәге генә түгел, күкрәк ситлегендә урынлашҡан эске органдар ҙа ҙур яфа сигә. Яурындарын тура тотоп йөрөй алмаған кешеләргә дауаханала етди тикшереү үтеп, дауалаусы физкультура күнекмәләре яһарға кәрәк. Арҡа һөйәге бик ныҡ көмөрәймәгән булһа, үҙаллы ла был ауырыуҙан ҡотолоп була икән. Быны өсөн арҡаны тәҙ тотоп йөрөргә, ултырғанда ла бөгөлөп төшмәҫкә кәрәк. Шулай уҡ, өҫтәл артында ултырғанда йәки машинала китеп барғанда ябай ғына күнекмә яһап алыу ҙа ҡамасау итмәҫ. Тын алғанда яурындарҙы турайтып, мөмкин тиклем артҡа ҡарай ныҡ итеп тартылырға, мускулдарҙы ҡатырға торорға. Тынды сығарғанда яурындарҙы ғәҙәттәге хәленә ҡайтарырға. Шунан яурындарҙы алға ҡарай бөгөп, үҙегеҙ ҙә саҡ ҡына алға эйелеп, арҡаны тәгәрмәс кеүек бөгөргә кәрәк. Күнекмәне өс-дүрт тапҡыр ҡабатларға.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 25 (21) дүшәмбе | 3:46 | 5:16 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 26 (22) шишәмбе | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 27 (23) шаршамбы | 3:50 | 5:20 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 28 (24) кесе йома | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:52 | 21:22 | 22:52 |
| 29 (25) йома | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:50 | 21:20 | 22:50 |
| 30 (26) шәмбе | 3:55 | 5:25 | 13:30 | 19:48 | 21:18 | 22:48 |
| 31 (27) йәкшәмбе | 3:57 | 5:27 | 13:30 | 19:47 | 21:17 | 22:47 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺҮҘ АРАҺЫНДА

# ОБОЙҘАР ҘА...
## һаулыҡҡа зыян килтерә

**Бөгөн баҙар Ҡытайҙан килтерелгән һәм урында етештерелгән насар сифатлы төҙөлөш материалдары менән тулған. Быға етештереүсе компанияларҙың материалдарҙың дәүләт стандарт талаптарын боҙған өсөн закон алдында яуаплылыҡҡа тарттырылмауы һәм һатылған тауарҙарҙың контролдә тотолмауы ла сәбәпсе.**

Йортоғоҙға ҡайтҡас, башығыҙ ауырта башлаһа, йыш йүткерһәгеҙ, сөскөрһәгеҙ - фатирығыҙҙы ремонтлау һәм биҙәү өсөн ниндәй материал ҡулланылыуына иғтибар итегеҙ. Тиҙ таҙартып була торған, модалы матур обойҙар ҙа һаулыҡҡа насар тәьҫир итеүе мөмкин. Ҡайһы бер синтетик материалдар фенол, формальдегид, толуол, бензол кеүек химик матдәләрҙән торған быу бүлеп сығара. Әгәр ҙә кеше үпкә, тын юлдарының йәки танауҙың хроник сирҙәре менән яфалана икән, был матдәләрҙең тын юлына тәьҫир итеүе бар. Ҡурылдай астмаһы ваҡытында кеше былығырға мөмкин.

Шуға ла төҙөлөш һәм биҙәү материалдары һатып алғанда бик иғтибарлы булыу кәрәк. ПВХ һәм ДСП изделиеларынан баш тартыу хәйерлерәк, сөнки ПВХ-продукттар поливинилхлоридтан яһала, был бик көслә ағыу һанала һәм ул нервылар системаһын сафтан сығара, яман шеш барлыҡҡа килтерә. Саҡ ҡына температура күтәрелһә, винилхлорид тағы ла әүҙемерәк бүленә башлай. Бөгөн күп кенә йорт йыһаздары составында карбамидоформальдегид йәки фенолформальдегид ыҫмалалары булған ДСП-нан яһала. Был матдәләр ағас онтағын тоташтырыусы буларак ҡулланыла.

Буяу һайлағанда ла һаҡ булығыҙ. Һыуҙа иҙелә торған йәки казеин һәм ээбизле-казеин кеүек тәбиғи буяуҙар - иң яҡшыһы. Ремонт эштәре менән булышҡанда битлек кейергә һәм бүлмәләрҙе йыш елләтеп торорға ла онотмағыҙ.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА



# ЙОРТ ЙОНДОҘҠАЙЫ
## Дауалау формалары

**Йорт йондоҙҡайын халыҡ дауасылары үләндең һабағын һәм япраҡтарын сей килеш тә, киптереп тә файҙалана.**

**Аяҡ табандары ярылғанда:** үҫемлектең сей япраҡтарын аяҡ кейеме табансаһына һалырға һәм көнө буйы шулай йөрөргә. Эштән ҡайтҡас, аяҡты һабынлап йыуырға һәм һырғанаҡ майы һөртөргә. Процедураны ярылыуҙар бөткәнгә тиклем дауам итергә.

**Күҙҙең мөгөҙсәләрен** тергеҙеү өсөн бер аш ҡалағы үлән һабағын һәм япраҡтарын ваҡлап, уны бер стакан ҡайнар һыуҙа сәғәт тирәһе парҙа тотоғоҙ. Барлыҡҡа килгән һутты һыуытығыҙ һәм көнөнә бер нисә тамсы дүрт тапҡыр тамыҙығыҙ.

**Зәңгәр ҡаршы, ҡан тамырҙарын киңәйтеүсе һәм бәүел ҡыуыусы, елһенеүгә ҡаршы** сифаттарға эйә төнәтмә әҙерләү өсөн 15 гр үләнде бер стакан ҡайнар һыуҙа яҡынса 4 сәғәт торорға. Көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Тынысландырыусы** төнәтмә өсөн бер аш ҡалағы кипкән япраҡтарҙы 250 мл ҡайнар һыуға һалып, төнгөлөккә ҡалдырабыҙ. Һарҡытып, аш алдынан бер десерт ҡалағы эсәбеҙ. **Артериаль ҡан баҫымын** шулай дауалайҙар. **Подагра һәм ревматизмды** йорт йондоҙсоғононоң һуты менән дауаларға мөмкин. 5 гр һутты көнөнә дүрт тапҡыр бал ҡушып ҡабул итергә кәрәк. **Диатез, яра һәм эренле шештәр** булғанда 10 литр һыуға 10 ҡалаҡ яңы өҙөлгән үләнде һалып ҡайнатабыҙ, һыуытып һарҡытҡас, компресс итеп һалырға ла, ваннаға өҫтәргә лә була.

**Гинекологик сирҙәрҙең** барыһын да тиерлек ошо күрер күҙгә ябай ғына үлән ярҙамында дауаларға мөмкин. Бер стакан яңы ғына йыйылған үләнде бер стакан ҡайнар һыуҙа бешекләйбеҙ. Йылы төнәтмәне һарҡытабыҙ, тампонға манып, төнгөлөккә 5 көн дауамында ҡуябыҙ. Бер аҙна ялдан һуң курсты тағы дауам итәбеҙ. Был халыҡ дауаһы миоманан, кистанан, эрозиянан ярҙам итә.

**Маститтан һәм шештән:** яңы ғына йыйылған үләнде ваҡ ҡына итеп турап, уны 25 минутҡа түшегеҙгә һалығыҙ. Процедураны көнөнә өс тапҡыр ҡабатлағыҙ. Бала имеҙгәндә һөтөгөҙ аҙ булһа, өс тапҡыр бәпкә үләненең бер бал ҡалағы һутына бал ҡушып эсергә кәрәк.

Дауалау сифаттары менән бер үк ваҡытта, йорт йондоҙсоғо үләненең кемгәлер **зыянлы** булыуы ла ихтимал. Был бигерәк тә ҡан баҫымы түбән булыусыларға, вегетатив ҡан системаһы боҙолоусыларға ҡағыла. Шулай уҡ үләнде йыйғанда үтә лә иғтибарлы булығыҙ, сөнки уның ағыулы туғаны - ҡыяҡ япраҡлы йондоҙсоҡ (ланцетовидная звездчатка) бар.

Үҫемлектең спирттағы төнәтмәһе ашҡаҙан сей яраһын киҫкенләштереүе мөмкин. Әгәр төнәтмә эсергә теләһәгеҙ, уға алкоголь ҡушмағыҙ. Шулай уҡ юл эргәһендә үҫкән бәпкә үләне бик күп токсиндарҙы һәм ауыр металдарҙы үҙенә туплай. Дауаланыу өсөн экологик таҙа урындарҙа үҫкән үҫемлектәрҙе генә йыйырға кәрәк. Йорт йондоҙсоғоноң эс йомшартыу һөҙөмтәһенә эйә булыуын онотмағыҙ һәм дауаланыу башлар алдынан мотлаҡ табип менән кәңәшләшегеҙ, юҡһа, ыңғай һөҙөмтә урынына организмығыҙға ҙур зыян килеүе ихтимал.

**Шәрифә САЛАУАТОВА**
**әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 29-сы һанда).**

РУХИӘТЕБЕҘ

# МӨНӘЖӘТТӘР АША...

## иман нуры тарала

**Элек-электән үҙенең мәҙрәсәләре, мәсеттәре менән дан тотҡан Стәрлебаш ауылында мөнәжәт башҡарыусыларҙың "Иман нуры" исемле асыҡ район конкурсы булып үтте. Был конкурс халҡыбыҙҙың рухи хазинаһы булған, әммә совет осоронда тыйылып килгән дини, өгөт-нәсихәт йөкмәткеле шиғырҙарҙы - мөнәжәттәрҙе тергеҙеү маҡсатында икенсе тапҡыр үткәрелде.**



Ярышта ҡатнашыусы 29 кешенең иң йәшенә - 9, иң өлкәненә 92 йәш ине. Уларҙың сығыштарын мәртәбәле ҡунаҡтар - З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, филология фәндәре кандидаты Гөлназ Ғәлина, йырсы Радик Динәхмәтов һәм Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты, Стәрлебаш районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Хәнә Баһаутдиновалар баһаланы.

Ярыш бик көсөргәнешле булды. "Балалар" номинацияһында 3-сө урынға Азалия Ғиззәтуллина, 2-се - Ирәндек Дәүләтйәров, ә 1-се урынға 9 йәшлек Регина Ғәлиева лайыҡ булды. Ансамблдәр араһында 3-сө урынды "Ҡуғанаҡҡай", 2-се урынды күрше Фёдоровка районынан килгән "Ағинәйҙәр ҡоро" ансамбле, 1-се урынды Айҙарәле ауылынан "Балҡыш" ансамблдәре яуланы. Яңғыҙ башҡарыусылар араһында осҡалар күп булғанға күрә, һәр урынды бер нисә кешегә биреү кәрәкле тип табылды. Шулай итеп, 3-сө урынды Зөлхизә Әсәҙуллина, Хәлил Хәкимов һәм Люция Байназаровалар бүлеште; 2-се урын Фирүзә Гәйсина, Зөлфирә Булатова, Нәжиә Байтимероваларға бирелде. Ә инде 1-се урынды Рәйлә Заманова яуланы. Конкурста Гран-при хаҡлы рәүештә әсәле-уллы Фирүзә һәм Морат Иҫәнсуриндарға тапшырылды. Улар башҡарған "Улыма" мөнәжәте өлкән быуындың йәштәргә дуҫлыҡ һәм дошманлыҡ, яҡшылыҡ һәм яманлыҡ кеүек әхләҡи ҡиммәттәргә ҡағылған аҡыл-кәңәше, өгөт-нәсихәте булып яңғыраны. Бөтә конкурсанттар ҙа дипломдар, иҫтәлекле бүләктәр менән бүләкләнде. Киләсәктә был конкурсты республика кимәленә сығарыу күҙ уңында тотола.

Көндөң икенсе яртыһында конкурста ҡатнашыусылар һәм был жанр тураһында күберәк белергә теләүселәр өсөн мөнәжәт, уны башҡарыу үҙенсәлектәре тураһында семинар үткәрелде. Уны Гөлназ Ғәлина һәм Радик Динәхмәтов үткәрҙе.

Ауыл биләмәләре китапханаларын берләштереүсе район китапханаһы тарафынан мөнәжәттәр буйынса эҙләнеү-тикшеренеү эштәрен туплағән махсус йыйынтыҡ та әҙерләнгәйне. Оҙаҡламай ул донъя күрәсәк. Был мөнәжәт кеүек рухи хазинабыҙҙы киләсәк быуындарға тапшырыу йәһәтенән матур бер эш буласаҡ.

**Рәйфә ҒӘЛИЕВА,**
**Стәрлебаш районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге мөдире.**

ВИКТОРИНА

# ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ӘҘИПТӘР

**Әхмәр Ғүмәр-Үтәбайҙың "Тыштағы зыярат" роман-диалогы буйынса һораўҙар**

1. **Детектив Альберт Һунаршин ниндәй ауыл кешеләренең үтенесен ҡабул итеп, тикшереү эшенә тотона?**
   а) Мамыҡташ;
   б) Сереккүл;
   в) Мөслим;
   г) Ташлы.

2. **Детектив Альберт Һунаршин кешене үҙ-үҙенә ҡул һалырға алып килеүсе ниндәй төп сәбәпте асыҡлай?**
   а) эскелек;
   б) эшһеҙлек, аҡсаһыҙлыҡ;
   в) ғаиләнең тарҡалыуы;
   г) тәҡдирҙең, яҙмыштың үҙгәреүе.

3. **Ни өсөн Аллабирҙе хажи үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы башҡалар менән бер зыяратҡа ерләү шарты менән риза була?**
   а) үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар донъяһына үрт һалғас, ҡурҡыуға ҡала;
   б) детектив Һунаршиндың тәҡдименә ҡаршы килә алмай;
   в) үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙың был юлға тәҡдирҙәре үҙгәрешһеҙ ҡалыуы арҡаһында барғанлығын аңлай;
   г) кейәүе Динмөхәммәт менән ҡыҙының ғаиләһе тарҡалыуын теләмәй.

**Ҡәҙерле дуҫтар! Кем дә кем ошо һораўҙарға тәүгеләрҙән булып дөрөҫ яуап биреп өлгөрә, шуға Әхмәр Ғүмәр-Үтәбай үҙенең автографы ҡуйылған "Үрелеп алған алма" китабын бүләк итә. Ә инде, уҙған викторина йомғаҡтарына килгәндә, Флүр Ғәлимовтың "Аҙғын тәүбәһе" китабының еңеүсеһе - Баймаҡ ҡалаһында йәшәүсе Әлифә Шарапова була.**

**Иҙел РӘХИМОВ.**

ҺҮҘЛЕК

# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Һыу йондоҙо** - болотник обыкновенный
**Һыу йөнө** - рдест маленький
**Һыу ҡуҙғалағы** - щавель водяной
**Һыу һылыуҡаһы** - водокрас
**Һыу юл япрағы** - подорожник водяной
**Шайтан таяғы, сәнскәк** - чертополох курчавый
**Шалҡан** - репа
**Шапылдаҡ күрән** - осока озерная
**Шартлауыҡ** - крестовник речной
**Шауғамыш, ҡомай үләне** - манник крупный
**Шиңмәҫгөл** - бессмертник, цмин песчаный
**Шифалы тәкә һаҡалы** - вайда красильная
**Шифалы әрем** - полынь лечебная
**Шомбоя** - заразиха
**Шөңгәр сәскә, әтлек** - бубенчик лилиелистный
**Шөпшә бото** - девясил иволистный
**Шыбүлән** - пырей пустынный
**Шылтырауыҡ, ҡауғүлән** - погремок малый
**Шыма ҡарама** - вяз гладкий
**Шырткойроҡ** - щетинник зеленый
**Шыршы** - ель
**Шәфәкгөл** - смолевка обыкновенная, хлопушка
**Һыйы сәскә** - ландыш
**Һыйыҡас** - перловник
**Һыҫыҡ үләне** - росянка

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮҘ НӘФСЕҺЕН ТЫЙҒАН...

## солтан булыр

Ҡоҙа булғансы, нығ һораш, ҡоҙа булғас, нығ һыйлаш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бар нәмәгә лә ышаныу, бер нәмәгә лә ышанмаған кеүек үк, ҡурҡыныс.

**(Дени Дидро).**

Бәхетһеҙлек - иң бөйөк уҡытыусы. Байлыҡ аҡылды иркәләтә, байлыҡтан яҙыу, киреһенсә, аҡылды сыныҡтыра.

**(Уильям Хэзлитт).**

Тышлығына ҡарап, китап тураһында фекер йөрөтмә.

**(Инглиз халыҡ мәҡәле).**

Бөйөк эштәр көс менән түгел, ә ныҡышмалылыҡ менән тормошҡа ашырыла.

**(Сэмюэл Джонсон).**

Өмөт, ышаныс - идара итеп булғандар өсөн, ә иҫбатлау үҙ-үҙҙәре һәм башҡалар менән идара итә белгәндәр өсөн кәрәк.

**(Джордано Бруно).**

Етди булырға тырыш - был да ғорурлыҡ, әммә ул әйләнә-тирәләгеләрҙең иғтибарына һәм асыуына аҙыраҡ эләгә.

**(Жюль Ренар).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше йорт төҙөргә була. Тәүҙә ул йорт нигеҙе өсөн тәрән соҡор ҡаҙырға тотона. Ял минуттарында ул соҡорҙан өҫкә күтәрелеп ҡарай, уға аҫтан тик болоттар йә кешеләрҙең аяҡтары ғына күренеп ҡалғылай.**

**Нигеҙ әҙер булғас, был кеше йортоноң беренсе ҡатының стеналарын һала башлай. Хәҙер инде ул әйләнә-тирәһен иркен байҡай, эргәһенән үткән кешеләрҙе күҙҙән үткәрә ала. Йорт ни тиклем бейеккәрәк күтәрелгән һайын, уның хужаһына ла күберәк яңы күренештәр асыла башлай. Икенсе ҡаттан тороп, тирә-яҡҡа күҙ һалһа, ул бар урамдың панорамаһын, ә өсөнсө ҡаттан иһә хатта күрше урамды ла ап-асыҡ күреп булыуын төшөнә. Йортоноң ҡыйығында баҫып торғанда иһә кешенең күҙ алдына бар ауыл, уның урамдары, өйҙәре, кешеләре килеп баҫа.**

**...Бала саҡта беҙ күп нәмәне күрәбеҙ, тоттоп ҡарайбыҙ, ләкин аңламайбыҙ. Үҫә бара беҙ белем алабыҙ, фекер йөрөтөргә өйрәнәбеҙ. Тормошобоҙҙоң стеналары өҫкә табан үҫә барған һайын, беҙҙе уратып алған тирә-яҡ төрлө төҫкә инә. Ҡыйыҡта торғанда беренсе ҡаттағы нәмәләр бәләкәс кенә булып күренә. Ә беренсе ҡатта торғанда ундағы нәмәләр барыһы ла ҙур, етди һымаҡ була. Үҫкән һайын, аҡылың, белемең, эске донъяң камиллашҡан һайын да шулай була икән. Ә ҡайһы берәүҙәр бит оло йәшкә етһәләр ҙә беренсе ҡатта йөрөүҙе хуп күрә... "**

1582218911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
22 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары –
**50665, 50673**

Тиражы - 4417
Заказ - 1292/07